ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13-19 август (урағай) 2016

№33 (711)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Балаһының бәхетле булыуын фәҡәт юғары белем алыуҙа ғына күреп, юғары белемгә эйә булыу өсөн тик рус телендә генә уҡырға кәрәк, тип уйлап, сабый саҡта уҡ балаһын ят телгә күсергән әсә бала күңеле менән үҙ күңеле араһына пәрҙә ҡора. Күҙгә күренмәгән был пәрҙә Бала менән Әсә араһындағы күңел аралашыуын - тәбиғәттән ҡанға һалынған бер-береңде һиҙеү, тойоу һәләтен юҡҡа сығара.*
*Мәрйәм БУРАҠАЕВА.*

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Кәфендең кесәһе юҡ... 3



Киләсәк быуындарға... күберәк мәғлүмәт ҡалдырыу ҙа - бурысыбыҙ 8-9



Ҡуктәрҙән бирелгән талант 11



Уйылдан Мәзин 12



ТВ-программа 14

ЭШЛЕКЛЕ ӘҢГӘМӘ

# РӨСТӘМ ХӘМИТОВ:

## "Өфө Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары араһында иң яҡшыһы булырға тейеш"



**Өфө тормошо, төбәктең баш ҡалаһының йөҙө, унын уңыштары һәм етешһеҙлектәре, сифатлы үҙгәрештәре, төҙөлөш һәм юл эштәре, халыҡты медицина хеҙмәтләндереүе һәм яңы мәктәптәр төҙөлөшөнә арналды Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың баш ҡаланың киң мәғлүмәт саралары - "Вечерняя Уфа", "Уфимские ведомости" һәм "Киске Өфө" гәзиттәренең етәкселәре менән әңгәмәһе. Һөйләшеүҙең төп темаһы юҡҡа ғына Өфөгә арналманы, сөнки, образлы итеп әйткәндә, төбәктең "визит карточкаһы" буйынса унын бөгөнгөһө, үҫеш ҡеүәте һәм перспективалары тураһында фекер йөрөтәләр. Өҫтәүенә, Рөстәм Зәки улы ла өфөлө. Тимәк, тыуған ҡалаһының уңыштары һәм проблемалары тураһында яҡшы хәбәрҙар, уға эргә-тирәһендә йәшәүселәр, Өфөнөң үткәнен бөгөнгөһө менән сағыштырып ҡараусылар күҙе менән ҡарай белә.**

(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары РФ Дәүләт Думаһына алкоголизм менән сирләүселәрҙе, аныҡлап әйткәндә, балиғ булмаған алкоголиктарҙы мәжбүри дауалауҙы законға индереү тураһында башланғыс менән сыҡҡан һаны. Был хаҡтағы фекерегеҙ ниндәй булыр?

***Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Рәйесе:*** Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, былтыр наркологик иҫәптә алкоголизм менән сирле 15 бала иҫәптә торһа, быйыл алты айҙа ошо диагноз менән 10 үҫмер тикшерелә. Беҙ рәсми статистиканың фактик хәл-торошто сағылдырмауын аңларға тейеш: ата-әсәләрҙең барыһы ла үҙ балаһын наркодиспансерға иҫәпкә ҡуйыу кеүек аҙымға бармаясаҡ. Әгәр бала үҙе риза түгел һәм дауаланыуға ҡаршы булһа - бигерәк тә. Беҙ тәҡдим иткән закон ҡабул ителһә, баланы дауалау өсөн ололарҙың ҡарары ла етә. Дөйөм ҡағиҙәләргә, ата-әсәһенә һәм йәмғиәткә ҡаршы сыҡҡан үҫмерҙең, "был донъяла бөтөн нәмәне лә татып ҡарарға кәрәк", тигән принциптан эш итеүенә иманым камил. Бик йыш ул наркотик һәм алкоголь ҡабул итеүҙең эҙемтәләре хаҡында уйлап та ҡарамай. Ҡайһы бер осраҡта ниндәйҙер компанияла "үҙ кеше" булыу өсөн шундай аҙымға бара. Шуның өсөн наркомания һәм алкоголизм менән көрәш комплекслы, йәғни ололар менән дә, балалар менән дә алып барылырға тейеш. Был көрәш конституцион хоҡуҡ һәм азатлыҡ сиктәрендә ғәмәлгә ашырыла. Бөгөнгө балалар - иртәгәге ата-әсәләр. Әгәр ҙә беҙ уларҙың башына сәләмәт йәшәү рәүеше нормаларын һалып өлгөрә алһаҡ, киләсәк быуын сәләмәт һәм бәхетле буласаҡ, тип ышанырға була.

***Николай НИКИТИН, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитет рәйесе, закон проекты инициаторы, медицина фәндәре кандидаты:*** Бөгөн йәмғиәтебеҙҙә алкоголизм менән сирләүсе, йәғни алкоголгә бәйлелеге булған, наркотик, психотроп матдәләр ҡулланған балалар һәм үҫмерҙәрҙең булыуы һәм йылдан-йыл уларҙың һаны артыуы бер кемгә лә сер түгел. Улар ғаиләһенә генә түгел, йәмғиәткә лә хәүеф тыуҙыра. Шуға күрә, бындай категорияға ҡараған балаларҙың ата-әсәһенә йәки уларҙың законлы вәкилдәренә закон тарафынан йоғонто яһау отошлораҡ булыр, тигән күҙлектән сығып эшләнде лә инде был проект. Балаларҙы мәжбүри дауалау, тиелһә лә, бының өсөн уларҙың ата-әсәһенән йәки законлы вәкиленән яҙма рәүештә рөхсәт алырға кәрәк. Шул осраҡта ғына баланы мәжбүри дауаларға мөмкин. Әгәр ҙә ғаилә имен түгел, ата-әсә йәки баланың законлы вәкиле үҙе лә алкоголь менән дуҫ, балаларының киләсәгенә төкөрөп ҡарай һәм яҙма рөхсәт биреүгә ҡаршы икән, ул сағында инде бындай ата-әсәне ата-әсәлек хоҡуғынан мәхрүм итеп, балаларҙы опека органдарына тапшырыу күҙаллана. Был осраҡта мәжбүри дауалау менән ошо органдар шөғөлләнәсәк. Бала уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алынған осраҡта яуаплылыҡ яңы ата-әсә иңенә ята.

Ни өсөн закон проекты мәжбүри дауалау тип атала, сөнки алкоголгә бәйлелеге булған бала һәм үҫмер үҙенең алкоголик икәнен танымаясаҡ, нисек тә булһа быны инҡар итергә, үҙенең сирле түгеллеген, алкоголь йәки наркотик матдәләр ҡулланмауын раҫларға тырышасаҡ. Шуның өсөн ата-әсәләр һәм законлы вәкилдәр йәлеп ителә һәм уларҙың рөхсәте менән табиптар был категорияға ҡаршылыҡһыҙ профессиональ медицина ярҙамы күрһәтә аласаҡ.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

✓ *Яңы тәпәй баҫҡан балаһына һыра эсереп, уның алйыуынан көлөп ултырған ата-әсәләрҙе лә осратҡаным булды. Бөгөн балаларҙы ошондай аҙымға этәреп торған ата-әсәләргә ҡарата яза биреү ҙә күтәрелергә тейештәр.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ИЛ МЕНӘН КҮРГӘН - ТУЙ

***Әхәт СӘЛИХОВ, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәре, тарих фәндәре кандидаты:*** Заман ниндәй генә булғанда ла, шул хаҡта уйланыуҙар мәлендә әсәйемдең боронғонан килгән бер әйтемен хәтергә төшөрәм: ил менән күргән - туй. Йәғни, ил менән бергәләп ниндәй ауырлыҡты ла кисерергә була, бары илдән, халыҡтан айырып, яңғыҙ итмәһен. Шуның кеүек, бергәлек, берҙәмлек менән әле бик күп бәләләрҙе ситкә этәреп, үҙ республикабыҙҙа аҫаба ер хужалары, милли телле, милли мәҙәниәтле, ирекле халыҡ булып йәшәп ятабыҙ.

Бөгөн тел мәсьәләһен иң беренсе проблема итеп ҡуябыҙ, әммә уны проблема итеп кенә күрһәтеүҙән фәтүә булмаясаҡ. Беҙҙә был мәсьәлә менән шөғөлләнеүсе һәм уның торошо өсөн яуап биреүсе әллә күпме эш урындары биләп торған учреждениелар, ойошмалар бар. Бөтә нәмә лә уларҙың эште системалы һәм эҙмә-эҙлекле итеп алып бара белеүенән тора. Халыҡ туған телдә һөйләшергә, балалар уҡырға теләмәй түгел, бар бәлә - был өлкәнең эшмәкәрлеге һүлпән алып барылыуҙа. Был тәңгәлдә республика тағы ла ситтә йәшәүсе башҡорттарҙың теле, рухи үҫеше өсөн дә яуаплылыҡ алһын ине.

Тел һәм мәҙәниәт өлкәһендә көс күберәк байрамдарға һалына кеүек. Әлбиттә, был саралар ҙа кәрәктер, әммә уларҙың аҡса талап иткән бер күренеш кенә булып ҡалыуы билдәле. Ә махсус төҙөлгән программалар буйынса эшләү һәм уның һөҙөмтәләрен, сифатын тикшерә барыу - бөтөнләй икенсе йүнәлеш.

Юғары уҡыу йорттарында, йәш кеше ниндәй факультетта белем алыуына ҡарамаҫтан, туған телен өйрәнергә, өҫтәмә рәүештә башҡорт теле буйынса дәрестәр алырға хоҡуҡлы булһын ине. Был башҡорт телен белгән етәксе кадрҙар әҙерләүҙең башланғысы ла булыр ине.

Бөгөн өлкән быуын яҙыусыларҙы алыштырыр йәш яҙыусылар юҡ, булғанда ла, бик һирәк, тиҙәр. Был бая мин үрҙә әйтеп үткән телде уҡытыу, туған телдә белем биреү системаһының дөрөҫ эшләмәүенән килә. Телде исем өсөн генә уҡытыу, конкурстар, бәйгеләр, күргәҙмә дәрестәр ойоштороу - ул яһалма ҡыланыштар һөҙөмтәһе.

Ауылдарҙа башҡортса һөйләшеү бар ул. Ниндәй генә ауылға барып инмә, унда башҡорт телендә хәбәрләшергә, аралашырға мөмкин. Шунлыҡтан, ауылдарҙа тел юҡ, тигән ғәйепләүҙе онотайыҡ. Телде һаҡлауға ауыл менән уҡытыусыларҙы ғына яуаплы итеп ҡалдырмайыҡ, уның өсөн һәр кеше, чиновниктан башлап, уҡыусы балаға тиклем яуаплы.

Башҡорт теле юғалып барыусы телдәр исемлегенә инде, тиһәк тә, әле беҙгә һуң түгел. Беҙ әле телебеҙгә мөнәсәбәтте яҡшыртып ебәрә лә, киләһе быуындарҙы өйрәтә лә алабыҙ. Бының өсөн һәр беребеҙ эште үҙенән, балалары һәм ейәндәренән башларға тейеш.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары РФ Дәүләт Думаһына алкоголизм менән сирләүселәрҙе, анығыраҡ әйткәндә, балиғ булмаған алкоголиктарҙы мәжбүри дауалауҙы законға индереү тураһында башланғыс менән сығыш яһаны. Был хаҡтағы фекерегеҙ ниндәй булыр?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Резеда ҒОФРАНОВА, 22-се дауахананың неврология бүлеге мөдире:*** Дауаханала алкоголдән ағыуланған балаларға тиҙ ярҙам күрһәтергә тура килә һәм был осраҡ йышая бара. Мин балалар алкоголизмы шул тиклем үҫешкән тип уйламайым, әммә ундайҙар бар икән, уларҙы мотлаҡ дауаларға кәрәк. Һәм бында балаларҙы мәжбүри дауалау өсөн рөхсәтте ата-әсәләр бирергә тейешлеге лә бик дөрөҫ.

Алкоголь балаларға бигерәк тә зыянлы, сөнки уларҙың организмы, мейеһе үҫешә, ә алкоголь ҡулланыу уларҙы зарарлай. Шулай уҡ ул нервылар системаһын ҡаҡшата, был үҙ сиратында алкоголизмға килтерә. Был ваҡытта балала неврологик симптомдар күҙәтелә: нервы туҡымаларында матдәләр алышыныуы боҙола, организмда нервы күҙәнәктәре һаны һиҙелерлек кәмей, шулай уҡ баш һөйәге эсендә ҡан баҫымы күтәрелә, әммә иң хәүефлеһе - нервы көпшәһе һәм уның тиресәләре деградациялана.

Әгәр дауаламаһаҡ, насар юлдан йолоп алып ҡалмаһаҡ, киләсәктә беҙҙең генофондыбыҙ ниндәй буласаҡ? Генофондыбыҙҙы юғалтасаҡбыҙ. Шуға күрә депутаттарҙың был инициативаһын хуплайым.

***Сәғиҙә ҒӘЛИМОВА, Баймаҡ районы, ике ҡыҙ әсәһе:*** Хәмерҙе юҡҡа ғына шайтан һыуына тиңләмәй дин. Камил аҡылы була тороп та күпме көслө зат эскелек даръяһында юҡҡа сыға, күпмеһе тәбиғәт биргән әсәлек бурысынан мәхрүм ҡала. Был ағыуҙан бөгөн хатта балалар ҙа азат түгел. Улар араһында алкоголизм сире барлығы тураһында медицина хеҙмәткәрҙәре күптән саң ҡаға, әммә йәмғиәт ошоға тиклем уларҙың һүҙенә вайымһыҙ ине. Эйе, өлкәндәр иҫерткес эсемлекте үҙ теләге менән һайлай. Үҫмерҙәр иһә был ағыуға тәбиғи ҡыҙыҡһыныуҙары аша эләгә. Ә бына сабыйҙар? Был турала бер табиптан шундай миҫал ишетергә тура килде: эскелек менән мауыҡҡан әсәнең яңы тыуған сабыйы ла бахмурҙан ауырый икән. Әкиәт, тиерһегеҙ. Тик мин иҫерек әсәнең күкрәк һөтөн имеп иҫһеҙ йоҡлаған сабыйҙарҙы күргәнем бар. Яңы тәпәй баҫҡан балаһына һыра эсереп, уның алйыуынан көлөп ултырған ата-әсәләрҙе лә осратҡаным булды. Бөгөн балаларҙы алкоголизмдан көсләп дауалау ғына түгел, ошондай аҙымға этәреп торған ата-әсәләргә ҡарата яза биреү ҙә күтәрелергә тейештәр.

***АНОНИМ:*** Һәр ата-әсә өсөн үҙ балаһы ҡәҙерле. Моғайын, берәү ҙә уның яҙыҡ юлға баҫырын уйламай ҙа, күҙ алдына ла килтермәйҙер ҙә. Беҙ ҙә улыбыҙҙы әллә ни итеп үҫтерҙек, синыфташтары, дуҫтары араһында кәм-хур булып йөрөмәһен, тип, хәлдән килгән тиклем тырыштыҡ, икешәр эштә эшләнек. Әллә шул эш тип, донъя бөтәйтәбеҙ, тип, бушамаған булып, балаларыбыҙға тейешле иғтибар, йылылыҡ һәм яратыуыбыҙҙы биреп еткермәнекме икән, тип тә уйлайым хәҙер. Холҡоноң үҙгәрә башлауын, тыңламауын, тиҙ үпкәләп, ҡыҙып барыуын күсеү осорона япһарҙыҡ та ҡуйҙыҡ шул. Ә ул шул ваҡытта уҡ дуҫтары менән ҡыҙыҡ өсөн генә һыра, алкоголле эсемлектәр эсеп, тәмәке тартып ҡарай башлаған булған икән. Беҙ хәлде аңлап алғанда, ул ошо алама ғәҙәттәр бәйлелегенә эләккәйне инде. Бөтөнләй холҡһоҙланды, һүҙ күтәрмәй башланы. Аңлатып та, әрләп тә ҡараныҡ - файҙаһыҙ. Саҡ ҡына нимәләр әйтә башлаһаң, үләм, ти ҙә ҡурҡыта ине. Үҙ башына үҙе етте. Бындай яҙмышты дуҫыңа түгел, дошманыңа күрһәтмәһен.

Бала эсеүен үҙ елкәмдә татығас, закон проекты тураһында шулай тип кенә әйтә алам: был күренеште мәжбүри дауалауға тиклем алып барып еткергәнсе, уны алдан иҫкәртеү буйынса ныҡлы эш алып барырға, алкоголь һәм тәмәкене иркен һатыуҙы тыйырға, көмөшкә йәки алкоголь суррогаты һатыусыларға ҡәтғи саралар күрергә кәрәк.

**Шәрифә САЛАУАТОВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**1 июлдән 30 августа тиклем 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда яҙылыу бара. Хаҡтар 2016 йылдың икенсе яртыһындағыса, йәғни 50665 индекслы гәзитебеҙгә 574 һум 32 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

● Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең **бүләктәргә** лайыҡ була килә. Июль-августа 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән **20 кеше 2017 йылға "Башҡортса дини календарь"**, **өс кеше Флүр Ғәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе"**, шулай уҡ башҡа китаптарға лайыҡ буласаҡ.

● Быйылғы икенсе ярты йыллыҡ өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгәндәр 15 августа тиклем яҙылып, гәзитте сентябрҙән алдыра ала. 4 айға яҙылыу хаҡы - **382 һум 88 тин**.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов телефон аша һөйләшкәндә рапирасы Тимур Сафинды һәм уның тренерҙары Лира Грушина менән Руслан Насибуллинды Олимпия уйындарында бронза миҙал алыуҙары менән ҡотланы. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 7 августа Рио-де-Жанейрола XXXI йәйге Олимпия уйындарында рапирасы Тимур Сафин шәхси зачетта бронза миҙал яуланы. Был йәш спортсының карьераһында тәүге Олимпия миҙалы булды.

✓Башҡортостандың Сауҙа һәм ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп Гүзәл Аҫылова тәғәйенләнде. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов тейешле указға ҡул ҡуйҙы. Гүзәл Наил ҡыҙының һуңғы эш урыны - Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм сауҙа буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары.

✓Урып йыйыу кампанияһы йомғаҡтары буйынса Башҡортостандың иң яҡшы 10 комбайнсыһы автомобиль менән бүләкләнә. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Ирек Мөхәмәтдинов журналистарға белдереүенсә, улар үҙебеҙҙә етештерелгән "Нива" һәм "Лада Гранта" автомобилдәре буласаҡ. "Районда-рҙа ашлыҡтың уңышы төрлөсә булғанлыҡтан, иң яҡшы комбайнсыларҙы баһалағанда тәү сиратта һуғылған ашлыҡ күләменә түгел, һуғылған майҙанға иғтибар итәсәкбеҙ", - тине вице-премьер.

✓2016 йылдың аҙағына тиклем торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр тәртибе үҙгәрмәй. Әле йылылыҡ өсөн йыл буйына түләү системаһы ғәмәлдә. Файҙаланылған ресурстар өсөн түләү системаһын индереү тураһында мәсьәлә ҡарала. Был осраҡта ҡыш көнө күберәк, йылы ваҡытта бөтөнләй түләмәҫкә тура киләсәк. Бындай тәртип ресурстар менән тәьмин итеүсе ойошмалар өсөн файҙалы булыр ине. Башҡортостан Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығында аңлатыуҙарынса, 1 октябргә тиклем муниципалитеттар киләһе йылға иҫәпләшеү ысулын һайларға тейеш. Ул йә үҙгәрмәйәсәк, йәиһә "1/7" ысулына күскән осраҡта, 2017 йылдың көҙөнән ғәмәлгә инәсәк.

***✓ Ошо рәүешле Диоген Македонский тәҡдим иткән байлыҡтан баш тартҡан. Диоген менән артабан һүҙ көрәштереү файҙаһыҙ икәнлеген аңлаған Македонский уның янынан китеп барған.***



*ИШАРА*

**Беҙҙең эраға тиклем 356-323 йылдарҙа йәшәүсе Македония батшаһы Александр Македонский - Искәндәр Зөлҡәрнәй ярты донъяны яулағандан һуң 32 йәшендә донъя ҡуя. 33 йәше тулыуға ай самаһы, ғәрәптәргә ҡаршы һуғыш башланыуға 6 көн ҡалғас, ул мәңгелеккә күҙҙәрен йома. Йылъяҙмаларҙа теркәлеп ҡалғанса, ул үҙен һуңғы юлға ике ҡулының устарын халыҡҡа күрһәткән килеш алып барыуҙарын һорай. Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа ул ҡулдарын ҡәберҙән тышҡа сығарып күмеүҙәрен үтенгән, тигән мәғлүмәт тә һаҡлана.**

# КӘФЕНДЕҢ КЕҪӘҺЕ ЮҠ...

Шундайын батшаның, мәшһүр ғәскәр башлығының вафатына бәйле был мәғлүмәттең ысынбарлыҡҡа тура килеүенә шик юҡ. Әлбиттә, бының менән Македонский, ярты донъяны яулауына, олуғ шөһрәткә, иҫәпһеҙ-һанһыҙ байлыҡҡа эйә булыуына ҡарамаҫтан, донъялыктан туплаған байлығының семтем тиклемен дә теге донъяға алып китә алмауы хаҡында аңлатырға теләгән. Ҡайҙан килгән икән иҫәпһеҙ-һанһыҙ кешеләрҙең ғүмерен ҡыйыусыға, тарихҡа исемен ҡан һәм хәрби дан менән яҙып ҡалдырыусы башкиҫәргә былай тәрән аңлау? Төптән уйлап ҡараһаң, бары тик донъялыҡҡа, уның иҫәпһеҙ-һанһыҙ байлығына сытырман йәбешмәгән кеше генә донъя менән хушлашҡанда ошондай һүҙҙәрҙе әйтә алалыр кеүек.

Хәҙерге замандың иң оҙаҡ йәшәүселәре ғүмере менән үлсәп ҡарағанда, Искәндәр Зөлҡәрнәй ни бары уларҙың өстән бер ғүмерен генә йәшәгән булып сыға. Ул 20 йәшендә, атаһы Филипп II үлтерелгәндән һуң, тәхеткә ултыра. Уға тиклем, 18 йәшенән башлап, атаһы походта саҡта ил менән идара итеү эшенә йәлеп ителә. Күберәген ирен яратып-өнәп бөтмәгән әсәһе Олимпиада (иренең ҡатындары күп булыуы уны шулай көнсөл иткәндер тип уйларға урын ҡала) йогонтоһонда тәрбиәләнгән Александр, шулай итеп, ҡалған ғүмерен 12 йыл буйына ерҙәр һәм илдәр яулап үткәрә. Ул Македония империяһы сиктәрен Кесе һәм Урта Азия, Сирия, Египет, Һиндостан, Фарсы ҡултығы дәүләттәрен яулау иҫәбенә тиклем киңәйтә. Ул туплаған байлығын теге донъяға алып китеүҙән мәхрүм булып ҡына ҡалмай, хатта үҙе төҙөгән империя менән дә идара итеп, башҡа хандар һәм батшалар һымаҡ, йөҙәрләгән ҡатын алып, байман булып йәшәргә лә өлгөрмәй. Өлгөрмәй генә түгел, уның бындай теләге лә булмай. Кем белә, бәлки, мәшһүр философтар Аристотель, Диоген менән аралашып йәшәгән Искәндәр Зөлҡәрнәй башҡа төрлө була ла алмағандыр.



Атаһы Искәндәрҙе Аристотелгә тәрбиәгә бирә. Искәндәр илдәр яулап походтан ҡайтҡанда һәр ваҡыт үҙенең уҡытыусыһы өсөн төрлө илдәрҙән тарихи документтар, һирәк осраусы үләндәр, бөжәктәр һәм йәнлектәр алып ҡайта. Македонский вафат булғас, ярандары иң тәүгеләрҙән уның уҡытыусыһына ябырыла. Хатта батшаны ағыулап үлтереүҙә ғәйепләп, 61 йәшлек Аристотелде батшалыҡтан ҡыуып ебәрәләр. Аристотель үҙенең уҡыусыһы үлеп, бер йыл үткәнсе генә йәшәй, ауыр шарттарҙа көн итеп, 322 йылда вафат була. Аристотель тәхет янындағы күп аҡыл эйәләре кеүек, Македонский сәскәргән һайын "Йәрхәмбикалла!" тип кенә ултырмаған. Ул енеүҙәре менән маһайып, "үҙен Аммона-Ра аллаһы улы" тип атауға тиклем барып еткән Искәндәргә хәҡикәтте йөҙөнә бәреп әйтә торған булған, уның менән оҙайлы ҡыҙыу бәхәстәргә ингән. Уларҙың бәхәстәренең стенограммалары, әлбиттә, һаҡланмаған. Әммә үҙен Алла улы тип атар өсөн иң тәүҙә Александрҙың атаһы Филиптан баш тартырға тейеш булыуын иҫәпкә алғанда, был хаҡта Аристотель батшаға үҙ фекерен әйтмәй ҡалмағандыр.

Походта йөрөгәндә Македонский Аттика тигән урынға килгәс, унда йәшәүсе икенсе бер философ Диогендың үҙе килеп батшаға башын эйерен көткән. Ахырҙа, батша үҙе уның янына килгән. Диоген Краний тигән урында ҡояшта ҡыҙына икән. Уларҙың араһында шундай һөйләшеү булған:

- Мин бөйөк Александр батша...

- Ә мин Диоген тигән эт...

- Ә ниңә һине эт тиҙәр һуң?

- Кем ашарға бирһә - шуға ҡойроғомдо болғайым, бирмәгәнгә - өрәм, уҫалдарҙы тешләйем...

- Ә һин минән ҡурҡаһыңмы?

- Ә һин ниндәйһең: яуызмы, изгеме?

- Изге...

- Изгелектән кем ҡурҡһын инде...

- Нимә теләһәң, шуны һора минән. Һорағаның мотлаҡ үтәлер...

- Кәрәкмәй, юғиһә, миңә ҡояшты ҡаплайһың...

Ошо рәүешле Диоген Македонский тәҡдим иткән байлыҡтан баш тартҡан. Улай ғына ла түгел, философ байлыҡты яҡтылыҡҡа ҡорған сүрәтендә тип белгән. Диоген менән артабан һүҙ көрәштереү файҙаһыҙ икәнлеген аңлаған Македонский уның янынан китеп барған. Шул саҡ ул ярандарына тарихҡа инеп ҡалырлыҡ һүҙ әйткән: "Әгәр ҙә мин Александр Македонский булмаһам, мотлаҡ Диоген булырға теләр инем..." Әммә яҙмыштың шаяртыуымы, башҡа ғилләме, Македонский менән Диоген икеһе бер көндө беҙҙең эраға тиклем 323 йылдың 10 июнендә вафат була.

Диоген, гүйә, ошо һүҙҙәре менән бөйөк батшаның бөтә киләсәген әйтеп бирә.

Үкенескә күрә, Александр Македонский, хатта үлгәндән һуң ҡулдарын күрһәтеп ҡәберенә алып барырға йәки шул рәүешле күмеүҙәрен һораһа ла, үҙенең 12 йыл буйы илдәр яулауы, байлыҡ туплауы менән үҙенән һуң донъялыҡта ҡалыусыларҙың да ғүмер ҡояшын ҡаплай. Уның тәүге ҡатыны Роксананан тыуған улы тәхет вариҫы Александр 14 йәшендә үҙенең уҡ хәрби башлыҡтары тарафынан үлтерелә. Ҡолбикәһе Барсинанан тыуған улы Гераклды лә шундай уҡ яҙмыш көтә. Македонскийҙың хәрби башлыҡтарына - диадохтарына батша туплаған байлыҡҡа һәм тәхеткә дәғүә итер вариҫтары кәрәк булмай. Искәндәр төҙөгән империя ла үҙе үлгәндән һуң шулай уҡ йәлап тарҡалыуға, ике, аҙаҡ, өс, дүрт өлөшкә бүленеүгә дусар ителә. Империяның Греция һәм Македония өлөшөнә хәрби башлыҡ Антигон хакимлыҡ итә башлай.

Кәфендең кеҫәһе юҡ шул. Хатта ярты донъяны яулауға өлгәшкән Искәндәр Зөлҡәрнәй ҙә уның бер семтемен дә алып китә алмай, вариҫтарына тапшырыу ғына түгел, уларҙың үлтерелеүенә үҙе сәбәпсе була, йәғни ҡәбере менән уларҙың ғүмер ҡояшын ҡаплай, төҙөгән империяһының һаҡланыуын тәъмин итә алмай. Шуға күрә, ғүмеренең мәғәнәһеҙ үтеүен бик һуңлап, үлер алдынан ғына аңлағанға күрә лә, башта килтерелгән һүҙҙәрен әйтеп ҡалдыра. Үтә бәхетһеҙ, әммә ғибрәтле яҙмыш...

Һүҙемде йомғаҡлап, байлыҡ хаҡында бер нисә сығанаҡтан ҡыҙыҡлы фекерҙәр килтереп үтәм:

- Ғайса бәйғәмбәр үҙенең шәкерттәренә "Һеҙгә хаҡты әйтәм: бай кешегә ожмахҡа үтеүе бик ауыр буласаҡ; тағы ла һеҙгә әйтәм: бай кешегә Аллаһ хозурына барыуға ҡарағанда, дөйәгә энә күҙәүенән үтеүе уңайлыраҡ", - тип әйткән;

- Һин байлығың менән идара ит, тик байлығың үҙең менән идара итеүгә юл ҡуйма;

- Кем байлыҡтың ҡоло, ул байлығын ҡол кеүек һаҡлай, ә кем үҙендәге ҡоллоҡто емерә, ул байлығын хужа кеүек башҡаларға тарата;

- Ваҡытлыса бирелгән әйбергә йөрәгенде бәйләмә. Тиҙ генә беҙҙән киткән әйбер байлыҡ түгел ул;

- Байлыҡ һиңә башҡаларға бирер өсөн бирелә;

- Фәҡиргә ярҙам итһәң, Аллаһ һиңә ярҙам итер;

- Байлыҡ диңгеҙ һыуына оҡшаған: ни тиклем күп эсһән, шул тиклем сарсайһың;

- Беҙ ни тиклем күп байлыҡ туплаһаҡ, шул тиклем ҡолға әүерелә барабыҙ;

- Байлыҡ беҙҙе Хоҙайҙан алыҫлаштыра. Ул беҙҙең көнелде зәғифләй, шундай ғәриплектә беҙ үҙ-үҙенә бикләнгән ҡаты, тупаҫ, һалҡын, тәкәббер, һаран кешегә әүерелә беҙ...

Аңлағандарға - ишара.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Быйыл Өфөлә "Һөт иле" фестивале 3 сентябрҙә Салауат Юлаев майҙанында үтә, тип хәбәр итә "Комсомольская правда-Уфа" гәзите сайты. Әле фестивалгә тулы әҙерлек бара, байрамды ойоштороусылар сараның "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге рәсми төркөмөндә ирекмәндәр йыя. Фестиваль баш ҡалала дүртенсе тапҡыр уҙғарыла. Былтыр "Һөт иле"ндә 40 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан. Һөт почтаһы бүлексәһенән 1000-гә яҡын открытка ебәрелгән.

✓Танылған ҡурайсы Роберт Юлдашев һәм "Курайсы" төркөмә профессиональ музыканттар араһында этник музыка өлкәһендәге "Russian World Music Awards" премияһына дәғүә итә. Әлеге ваҡытта башҡорт төркөмә тамашасыларҙың тауыш биреүе буйынса тәүге урынға сыҡты. "Курайсы" өсөн "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге рәсми төркөмдә тауыш бирергә мөмкин. Дәғүәселәр араһында "Zaman" этно-проекты ла бар. Жюри 2016 йылдың 1 сентябренә тиклем эшләй, октябрҙә еңеүселәрҙе билдәләү була.

✓Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, әле 740 мең гектар майҙанда иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар сабылған, 700 мең самаһы гектарҙа - һуғылған. Илеш, Мәләүеҙ, Шаран, Дүртөйлө, Нуриман, Стәрлебаш, Саҡмағош районларында сабыу буйынса пландың яртыһы үтәлгән. Яҡынса 1,5 миллион тонна ашлыҡ һуғылған, гектарҙан уртаса уңыш 20,5 центнер тәшкил итә. Иң юғары уңыш Саҡмағошта - гектарҙан 31 центнер, һуғып алыуҙа стәрлетамаҡтар алда бара - 82 мең тонна.

✓19-20 августа Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районына 86 йыл һәм борнғо башҡорт ауылы Ҡоншаҡҡа 280 йыл тулыу билдәләнә. Ошо уңайҙан майҙанда тирмәләр ҡорола, милли аш-һыу әҙерләнә, халыҡтың этнографияһын сағылдырған күргәҙмәләр ойошторола. Тантанаға Башҡортостан ҡунаҡтарының һәм Силәбе өлкәһе Хөкүмәте вәкилдәренең килеүе көтөлә. Ҡоншаҡ районының төп халҡы - башҡорттар. Улар халыҡтың яҡынса 60 процентын тәшкил итә. Тарихи мәғлүмәттәргә ярашлы, 1736 йылда башҡорттар Ҡоншаҡ ауылына нигеҙ һала, бөгөн унда халыҡ һаны алты мең самаһы кеше тәшкил итә.

**"Башинформ"дан.**

***✓ Һаулыҡ һаҡлауҙа етди проблемалар бар. Шул уҡ ваҡытта медицинаға ҙур ресурстар йүнәлтәбеҙ. 2015 йылда республика һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә 53 млрд һум аҡса бүленде. Шунса финанс бүленгән тағы берәй тармаҡты әйтегеҙ әле?***



ЭШЛЕКЛЕ ӘҢГӘМӘ

# РӨСТӘМ ХӘМИТОВ:

## "Өфө Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары араһында иң яҡшыһы булырға тейеш"

(Башы 1-се биттә).

**➔ Рөстәм Зәки улы, һәр баҫма редакцияһының эше граждандарҙың хаттары һәм шылтыратыуҙарына ла бәйле. Мөрәжәғәт итеүселәр теге йәки был эшкә үҙҙәренең ыңғай фекерен еткерергә тырыша, ҡайһы берҙә нигеҙле дәғүәләрен дә белдерә. Уларҙың ҡайһы бер һорауҙарын бөгөн Һеҙгә бирергә булдыҡ. Әйткәндәй, уларҙың күпселегенең йөкмәткеһе яңылыҡ булмаясаҡ. Сөнки энергиялы, тыуған ҡалаһын яратҡан, уның бөгөнгөһө һәм киләсәк яҙмышына битараф булмаған халыҡ, моғайын, Һеҙгә лә мөрәжәғәт иткәндер...**

- Мин һәр саҡ миңә һәм республика Башлығы хакимиәтенә килгән мөрәжәғәттәрҙе ентекле өйрәнәм. Статистика күрһәтеүенсә, хаттарҙың 40 проценты - Өфөнән. Йәғни республика халҡының сирек өлөшө власть органдарына мөрәжәғәт итеүселәрҙең дөйөм һанының яртыһын тиерлек алып тора. Өфөләрҙең ошолай әүҙемлек күрһәтеүе аңлашыла ла, сөнки уларҙың тормош сифатына талаптары башҡаларҙыҡына ҡарағанда юғарыраҡ. Ҙур ҡалала йәшәүе лә ҡатмарлыраҡ бит.

**➔ Шулай ҙа, өфөләрҙең тыуған ҡалаһы яҙмышын хәл итеүҙә ҡатнашырға теләүе нимә менән аңлатыла?**

- Минеңсә, йәмғиәттә кешеләрҙең үҙбаһаһы күтәрелә. Граждандар үҙҙәрен лайыҡлы, тағы ла сифатлыраҡ, уңайлыраҡ һәм уңышлыраҡ тормошҡа лайыҡ тип иҫәпләй. Улар йәмғиәттә ғәҙеллекте тәьмин итеү зарурлығы мәсьәләләрен күтәрә. Бөгөн йәмғиәттә ғәҙеллек етмәй. Халыҡ менән аралашып, республика власы ла, муниципаль власть та граждандарҙы борсоған проблемаларға иғтибар бүлергә тейеш.

**➔ Был проблемаларға ентекләберәк туҡталып китмәҫһегеҙме?**

- Өфө тураһында һөйләшкәс, уларҙың тәүгеһе - ҡала юлдарының торошо. Ҡайһы бер участкаларҙа хәл-торош бигерәк тә хурлыҡлы - мин быны башҡаса атай алмайым. Һөҙөмтәлә халыҡ интегә. Автомобилист соҡорға эләгеп, юл-транспорт ваҡиғаһын тыуҙыра икән, бында, әлбиттә, юлдарҙы шундай насар торошта тотоусылар ғәйепле.

**➔ Юлдарҙы Рәсәйҙең иң төп бәләләренә индергән Гоголь заманынан алып бер нәмә лә үҙгәрмәгән, тиерлек...**

- Ысынлап та, Николай Васильевичты нисек иҫкә алмайһың инде. Быйыл яҙғыһын юлдарҙың торошо ҡәнәғәтһеҙлек белдергән мөрәжәғәттәр тулҡынына сәбәп булды. Эйе, һәр ҡайһыбыҙ уларҙы яҡшы белә һәм шул уҡ ауырлыҡтар кисерҙе! Тәрән, ситтәре осло соҡор-саҡырҙы, хәүефле ярыҡтарҙы, һикәлтәләрҙе иҫкә төшөрмәй булмай... Мин Салауат Юлаев проспектында һәр йыл барлыҡҡа килгән тәрән колея тураһында әйтеп арыным инде. Йорт ихаталарында ла юлдар маҡтанырлыҡ түгел... Йыл һайын республика етәкселегә ҡала хеҙмәттәрен юлдарҙың торошона һәм хәүефһеҙлегенә ҙур яуаплылыҡ менән ҡарарға саҡыра, юл эшләүселәрҙең эше сифатын ҡәтғи контролләү зарурлығын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Әлбиттә, нимәлер эшләнә... Ләкин өфөләр әлегәсә юл хеҙмәте эшселәрен һәм власть структураларын тәнҡитләй. Был тәнҡит - ғәҙел. Беҙгә 1 июнгә тиклем Өфө һәм Өфө районы юлдарын ниндәйҙер кимәлдә яҡшыртыу өсөн һиҙелерлек көс сарыф итергә тура килде. Әммә әле лә күп нәмә эшләнмәгән. Шул уҡ ваҡытта беҙ был өлкәлә һаман да алға барабыҙ, юл ҡатламы составына ингән ингредиенттарға яңы талаптар ҡуябыҙ. Рәсәй Федерацияһы субъекттары араһында беренсе тапҡыр битумға урындағы ГОСТ эшләнек.

**➔ Йәғни, хәҙер сәбәп етештереүсе намыҫындамы?**

- Беҙҙең заводтар сифатлы битум сығарыу проблемалары менән шөғөлләнергә бик теләмәй һәм яңы ҡорамалдарҙы сафҡа индереүҙе 2018-2019 йылдарға күсерә. Әммә беҙ быға юл ҡуймаясаҡбыҙ. Бына ГОСТ, рәхим итеп халыҡ зыян күрмәҫлек нормаль битум, ингредиенттар сығарығыҙ, юлдар тейешле сифат талаптарына тап килһен. Бынан тыш, шуны ла билдәләп китәм: юл төҙөлөшөндә күҙәтелгән уғрылыҡҡа кәртә ҡуйырға кәрәк. Юҡһа, юлдар булған урындарҙа яҡшы подряд, ҡәнәғәтләнерлек эш хаҡы булыуы ғәҙәткә инеп китте. Юл төҙөү менән шөғөлләнгән ҡайһы бер шәхси структураларҙың етәкселәре илебеҙҙән ситтә йәшәүе лә сер түгел. Улар аҡсаны бит һауанан алмаған.

**➔ Редакцияларға килгән хаттар араһында торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендәге хеҙмәттәргә ҡағылғандары ла бик күп...**

- Ҡала торлаҡ-коммуналь хужалығы - тап халыҡты борсоған проблемаларҙың икенсеһе. Теләһә ниндәй илдең мегаполисы өсөн ул беренсе сираттағы проблема булып тора. Властың эше тураһында тап торлаҡ-коммуналь хужалыҡ торошо, идара итеү компанияларының эш сифаты, күҙәтеү органдарының үҙ бурыстарына яуаплы ҡарауы, финанстар тотонолоуының ғәҙеллеге һәм асыҡлығы буйынса фекер йөрөтәләр. Кешеләр йылдар буйына йорттарында капиталь ремонт эшләүҙе көтөүҙәре тураһында яҙа. Ә бит капремонт өсөн түләү хәҙер граждандар иңенә һалынды. Күпселек ғаиләләр өсөн коммуналь хеҙмәттәр, капиталь ремонт тарифтары ауыр йөк булып ятты, ә ҡайһы бер ваҡытта хатта күтәрерлек тә түгел. Авариялар, өҙөклөктәр, торбалар ярылыуы йыш ҡабатлана. Йәйгеһен йылы һәм һыуыҡ һыуҙың булмауы халыҡтың йәненә тейә. Граждандар телевизор ҡарап, үҫешкән илдәргә сәфәр ҡылып, ундағы торлаҡ-коммуналь хужалыҡ торошоноң икенсе кимәлдә булыуын күрә һәм: "Ни өсөн беҙҙә улай түгел? Сәбәп нимәлә? Тимәк, властар эшләп еткермәй?" - тигән һорауҙарға күмелә. Эйе, беҙ ҙә эшләп еткермәйбеҙ. Тиҫтә йылдар торлаҡ-коммуналь хужалыҡ проблемаларына икенсел ҡараш булған мираҫ тураһында ла онотмағыҙ. Был - тармаҡта заманса белемгә, яҡшы эш тәжрибәһенә эйә профессионалдар булмауы ла. Ундай белгестәр юҡ. Бик йыш торлаҡ-коммуналь хужалыҡ системаһына кешеләр урамдан килә.

Хәл-торошто үҙгәртер өсөн ваҡыт кәрәк. Беҙ был өлкәлә эш алып барабыҙ. Былтыр республикала 1000-дән ашыу йорт ремонтланды. Быйыл тәүге ярты йыллыҡта - 450. Ремонт күрһәткестәре буйынса ла беҙ Рәсәйҙә лидерҙар иҫәбендә. Бында шуға ла иғтибар итергә кәрәк: ремонтты сифатлы эшләргә өйрәнеү зарур. Был өлкәлә үҙ эшен яҡшы белгән белгестәр эшләргә тейеш, ә халтурасылар, шабашсылар түгел.

**➔ Ныҡлы, төҙөк йорто булғанда ла, әгәр уның сәләмәтлеге, ғүмере өсөн профессионалдар түгел, ә медицина өлкәһендә эшләргә хоҡуғы булмаусылар яуап бирһә, кеше үҙен яҡлаулы итеп тоймай. Үкенескә күрә, ундайҙар ҙа осрай һәм гәзит уҡыусылар табиптарға рәхмәт менән бер ҡатарҙан һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге иҫ китерлек осраҡтар тураһында ла яҙа...**

- Һис шикһеҙ, иң мөһим темалар рәтендә - күрһәтелгән медицина ярҙамының сифаты. Һаулыҡ һаҡлауҙа етди проблемалар бар. Шул уҡ ваҡытта медицинаға ҙур ресурстар йүнәлтәбеҙ. 2015 йылда республика һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә 53 миллиард һум аҡса бүленде. Шунса финанс бүленгән тағы берәй тармаҡты әйтегеҙ әле... Ундайҙар юҡ. Был ресурстарҙы һөҙөмтәле файҙаланырға өйрәнергә кәрәк. Беҙгә дарыуҙар, ҡорамалдар һатып алыуға конкурстарҙың - ғәҙел, асыҡ, ә сығымдарҙың нигеҙле һәм оптималь булыуы мөһим. Медицина учреждениелары, поликлиникалар асырға кәрәк. Күптән түгел мин 4-се бала табыу йортонда булдым. Әйткәндәй, ул - Башҡортостандағы иң ҙур бала табыу йорто, йыл һайын унда республиканың 7,5 мең яңы гражданы донъяға килә, иң ауыр һәм ҡатмарлы сирлеләр ҡабул ителә. Эргәлә генә 400 квадрат метр майҙанлы ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһы эшләй һәм ҙур Киров районынан бер нисә тиҫтә ҡатын-ҡыҙҙы ҡабул итә! Әлбиттә, бындай иҫ китерлек осраҡтар бөтөнләй булырға тейеш түгел. Ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһы өсөн яңы бина табасаҡбыҙ, ундағы табиптарҙы нормаль, яҡты кабинеттарға күсерәсәкбеҙ. Әйткәндәй, бөгөн бында табиптар етешмәй... Бындай факт нимә тураһында һөйләй? Власть оҙаҡ ваҡыт был проблемаға күҙ йомоу ғына түгел, уны күрергә лә теләмәгән. Унда Колгуев биҫтәһе үҫә, төҙөлөш ҡайнай, күп ҡатлы яңы йорттар сафҡа инә... Ләкин был проблеманы күптән хәл итергә кәрәк ине. Был - эшләп еткермәү. Шундай хаталарҙы төҙәтергә тейешбеҙ.

**➔ Өфө бюджеты республика ярҙамынан тыш ҡыҫҡа ваҡытта һәм этаплы рәүештә хәл ителергә тейешле бурыстарҙың күбеһен атҡара алмаҫы көн кеүек асыҡ... Төбәк үҙенең баш ҡалаһына ниндәй дәрәжәлә ярҙам итә?**

- Ысынлап та, өфөләр иғтибар талап итеп яҙған тағы бер тема - ҡала бюджеты. Сөнки уның тулыланыуына баш ҡаланың уңышлы үҫеше бәйле. Республика власы һуңғы йылдарҙа Өфө бюджетына яҡшы, көслө ярҙам күрһәтә. Һөҙөмтәләр ҙә күҙгә күренеп тора - ремонтланған яңы биҫтәләр, яҡшы сифатлы ял зоналары, велосипед юлдары барлыҡҡа килде, йорттарҙың фасады яңыртыла. Өфө - бөгөн Рәсәйҙең иң яҡшы ҡалаларының береһе. Мин ил буйлап күп йөрөйөм һәм һүҙҙәремә яуап бирәм. Был илһөйәрлек кенә түгел, ә анығ, объектив хәл-торош.

Өфө - матур, һоҡланғыс ҡала! Шул уҡ ваҡытта ул тағы ла матурыраҡ була ала. Бының өсөн беҙ дөйөм ҡала ҡаҙнаһы ҡала халҡы эшләгән барлыҡ предприятиеларҙың, ойошмаларҙың, учреждениеларҙың өлөшөнән һәм һалымдарҙан, шул иҫәптән баш ҡала эшҡыуарҙары һалымдарынан йыйыла икәнен аңларға тейеш. Дөйөм "кеҫә"ләге тупланманы грамоталы тотонғанда, Өфө халҡы ҡала, дөйөм милеккә һаҡсыл мөнәсәбәттә булғанда ғына ҡаҙна тәртиптә була. Әммә һуңғы ваҡытта беҙ дөйөм милеккә вәхшиҙәрсә ҡараш өлгөләрен бик йыш күрәбеҙ. Эскәмйәләрҙе ватыуҙарына өйрәнеп тә бөттөк инде, ләкин сәнғәт өлгөләрен ҡыйратыуҙан да тартынмайҙар бит!..

Ҡала власының төп бурысы - килемдәрҙең муниципаль бюджетҡа ваҡытында инеүе, уның балансы. Бөгөнгө ябай булмаған иҡтисади хәл-торошта аҡса ресурстарын тотоноуға яңы ҡараш кәрәк. Әлегә уны "үҙләштерәләр", ә беҙҙең өсөн һалынған аҡсаның һөҙөмтәһе - аныҡ файҙа. Даими рәүештә сығымдар статьяһын анализларға, ундағы һөҙөмтәһеҙ өлөштән

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан 2016 йылдың икенсе кварталында кредитлауҙың дөйөм күләме буйынса кредит биреү йәһәтенән әүҙем 10 төбәк иҫәбенә инде. Ошо осорҙа банктар республика халҡына 22,3 миллиард һумлыҡ 225,4 мең кредит биргән. Был күрһәткес буйынса төбәк исемлектә бишенсе урынды биләй, тип хәбәр итә Берләшкән кредит бюроһы. Тикшереүгә ярашлы, автокредит һәм ҡулаҡса алыу буйынса ла Башҡортостан тәүге унау араһында бишенсе урынды биләй.

✓Өфөлә "Мәктәпкә йыйынырға ярҙам ит" хәйриә акцияһы уҙа. Унда ҡатнашыусылар мохтаж балаларға мәктәп кәрәк-яраҡтары һәм әйберҙәр килтерә ала. Өфөлә мәктәп кәрәк-яраҡтары һәм әйберҙәр һигеҙ адрес буйынса ҡабул ителә: СССР-ҙың 50 йыллығы урамы, 27/1, тел.: 248-65-02; Үҙәк урам, 18, тел.: 281-80-35; Б.Хмельницкий урамы, 53, тел.: 283-95-11; Менделеев урамы, 136/2, тел.: 287-23-18; Ғафури урамы, 103, тел.: 250-77-00; Р.Зорге урамы, 31, тел.: 282-55-82; Б.Хмельницкий урамы, 68/1, тел.: 263-86-85; Цюрупа урамы, 102, тел.: 273-31-47.

✓Белоруссияның Пинск ҡалаһында йәштәр араһында халыҡ-ара шашка буйынса Европа беренселегендә классик программа рәсәйҙәрҙең триумфы менән тамамланды. Биш йәш төркөмөндәге ярыштарҙа рәсәйҙәр алты алтын, алты көмөш һәм ике бронза миҙал яуланы. Өфөләр Марсель Шәрәфетдинов һәм Руфина Таулыҡаева "алтын", уларҙың яҡташы Даниил Ильин - "бронза", Ишембайҙан Руфина Әйүпова - "көмөш" алды. Уларҙың барыһы ла, шулай уҡ "Башнефть" шашка клубынан Кристина Осипова, Тамерлан Әхмәров, Айгөл Иҙрисова, Әлиә Әминова милли йыйылма командаһы иҫәбенә мәрәй килтерҙе.

✓Халыҡты иҫке торлаҡтан күсереү программаһын тормошҡа ашырыу йәһәтенән Сибайҙа авария хәлендәге торлаҡтан күсеүселәр йыл аҙағынаса яңы фатирҙар аласаҡ. 2012 йылдың 1 ғинуарына Сибайҙа 87 күп фатирлы йорт авария хәлендә тип таныла. 2009-2016 йылдарҙа 47 күп фатирлы йорт төҙөлгән, 672 фатир һатып алынған, 1652 кеше күсерелгән. Халыҡты иҫке һәм авария хәлендәге торлаҡтан күсереү программаһын тормошҡа ашырыу барышында өс кимәлдәге ҡаҙнанан 1 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән.

**✓ ...Баш ҡаланы мөмкин тиклем уңайлы ҡала итеү, кешеләргә дуҫтарса мөнәсәбәтле тормош мөхите булдырыу. Бында ҡала үҫешен тотҡарлаусы объектив факторҙар бар, киләсәктә ҡуҙаллағанда уларҙы ла иҫәпкә алырға кәрәк.**



баш тартырға, профилһеҙ муниципаль предприятиеларҙан, ундайҙар ҙа бар, ҡотолорға кәрәк. Был өлкәлә даими эшләү зарур. Беҙҙә ыңғай миҫалдар ҙа етерлек. Әйтәйек, Ер һәм милек мөнәсәбәттәре идаралығы эшмәкәрлегенән 2011 йылдан алып килемдәр ике тапҡырға артып, былтыр 5 миллиард һумға етте. Ни өсөн? Сөнки ер участкалары, ҡала милке менән дөрөҫ мөғәмәләгә өйрәндек. Тәртип урынлаштырғас, финанстар йәһәтенән һөҙөмтә лә күренде. Әммә муниципаль милек, ер менән бушлай файҙаланыусыларҙың, ҡала финансы иҫәбенә йәшәп өйрәнеүселәрҙең ҡәнәғәтһеҙлеге артты. Ә бюджет аҡсаһына ҡул һуҙыу - әсәйеңдең аҡсаһын урлау ул. Беҙ бер кемгә лә урлашырға юл ҡуймаясаҡбыҙ! Был беҙҙең принципиаль позиция.

**➔ Ҡаланың һәм ҡала халҡының именлеге өфөләрҙең килеменә лә бәйле...**

- 2012 йылдан алып Өфөлә уртаса эш хаҡы 25 процентҡа артып, 35 мең һумға етте. Был лайыҡлы кимәл, республикала иң яҡшыһы, Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары араһында алтынсы күрһәткес. Шуныһы мөһим, иҡтисадтағы яҡшы булмаған хәл-торош ваҡытында, Башҡортостандың баш ҡалаһында эшһеҙлек кәмей.

...Ҡала бурыстарын хәл итеү өсөн кеслө иҡтисади база кәрәклеге аңлашыла. Бөгөн Өфө республиканан ситкә сығарылған тауар, башҡарылған эш һәм хеҙмәт күләменең яртыһын тәьмин итә. Былтыр был һан триллион һум самаһы ине. Шуны ла иҫегеҙгә төшөрәм: республиканың эшкәртеү сәнәғәте продукцияһының 85 проценты баш ҡала предприятиелары өлөшөнә тура килә. Өфө авиатөҙөлөш, нефть химияһы, нефть эшкәртеү, фармацевтика өлкәһендә юғары етештереүгә һәм фәнни компетенцияға эйә. Һәм был ҡеүәтте предприятиеларҙың килемен, уларҙың дәғүәселек һәләтен арттырып тормошҡа ашырырға кәрәк. Ҡала власы предприятиеларға, уларҙың инженер, энергетика инфраструктураһы үҫешенә ярҙам итергә, шарттар тыуҙырырға, ҡала ситендә сәнәғәт предприятиеларын рациональ урынлаштырыу мәсьәләләрен берлектә хәл итергә, халыҡҡа сәнәғәтте үҫтермәй тороп, прогресс булмауын аңлатырға тейеш.

**➔ Шулай уҡ инвестициялар йәлеп итмәйенсә үҫеш булмаясағын да...**

- Килешәм. Инвестицион әүҙемлектең, бигерәк тә төҙөлөш өлкәһендә, артыуы - мөһим мәл. Былтыр 825 мең квадрат метр торлаҡ сафҡа индерелде. Индустриаль ысул менән төҙөү рекордлы күләмгә етте, йәғни 500 мең квадрат метрҙан ашты.

**➔ Күптән түгел генә айырым урындарҙа төҙөлөш алып барыу заман бәләһе ине...**

- Ул бөгөн юҡ тиергә лә була. 2012 йылда уның өлөшө дүрт тапҡырға кәмеп, хәҙер дөйөм төҙөлөштөң 6 процентын ғына алып тора. Һәм улар 1990, 2000 йылдарҙа бирелгән ерҙәрҙә тормошҡа ашырыла. Ул ваҡытта, күрәһең, ҡала халҡының именелегә тураһында хәстәрлек күрелмәгән.

Авария хәлендәге торлаҡтан күсереү буйынса хәҙер Өфө илдең иң яҡшы биш ҡалаһы иҫәбенә инә. Әле баш ҡалала бер үк ваҡытта 740 объект төҙөлә. Өфө - 100 мең кешегә капиталь төҙөлөш объекттары һаны буйынса Рәсәйҙең иң яҡшы өс ҡалаһы иҫәбендә. Бөгөн мегаполис территорияһында 236 күп фатирлы торлаҡ йорт төҙөлә.

**➔ Республика август кәңәшмәһе мәлендә мәғариф объекттарын төҙөү темптары ла ҡыҙыҡһындыра...**

- Беҙ артабан да Өфөлә мәктәптәр төҙөүҙе дауам итәсәкбеҙ. Улар тәү сиратта яңы кварталдарҙа һәм яңы биҫтәләрҙә етешмәй. Әле дөйөм алғанда 4 мең урынлыҡ 4 ҙур мәктәп, 610 урынлыҡ 3 балалар баҡсаһы төҙөлә. Муниципаль-шәхси партнерлыҡ механизмдарын индереү менән социаль объекттар төҙөлөшө тағы ла үҫәсәк.

**➔ Йыл һуңында 2030 йылға тиклем Өфөнөң Стратегик үҫешен ҡуҙаллаған документ эшләнеп бөтәсәк. Уның төп маҡсатын нисек билдәләр инегеҙ?**

- ...Баш ҡаланы мөмкин тиклем уңайлы ҡала итеү, кешеләргә дуҫтарса мөнәсәбәтле тормош мөхите булдырыу. Бында миллионлы ҡала үҫешен тотҡарлаусы объектив факторҙар бар, киләсәктә ҡуҙаллағанда уларҙы ла иҫәпкә алырға кәрәк. Төп мөһим бурыс - транспорт инфраструктураһын үҫтереү. Ике айҙан Затон күперенең икенсе сиратын төҙөү тамамлана. Хәҙер беҙгә артабан эшләргә кәрәк. Интернационал урамы киҫелешендә, һупайлыла һәм Инорста күперҙәр юҡ. Бигерәк тә ҡаланың төньяҡ өлөшөн транспорт ағымынан бушатыу мөһим. Бик күп йылдар Өфө тирәләй транспорт ҡулсаһы булдырыу, тиҙ йөрөшлө трамвай йәки метробус линияһын ебәреү, күп кимәлле түләүле парковкалар төҙөү буйынса фекер алышыу бара. Әммә әлегә баш ҡаланың пассажирҙар ағымы үҙгәреүен иҫәпкә алған транспорт системаһын комплекслы үҫтереүҙең ахырынаса уйланылған стратегияһы юҡ.

Өфөнөң генпланы иҫкергән һәм был мегаполисты артабан үҫтереүҙе тотҡарлай. Беҙгә баш ҡаланы, уның транспорт, коммуналь, социаль инфраструктураһын үҫтереүҙе Ағиҙел, Ҡариҙел аръяғы территорияларын үҙләштереү, яҡын-тирәләге райондарҙа ауыл хужалығының уңдырышлы ерҙәрен һаҡлап алып ҡалып, аҙ ҡатлы йорттарҙы комплекслы төҙөү бурысы менән тығыҙ бәйләнештә алып барырға кәрәк. Өфө үҙенең илдең алдынғы сәнәғәт, фәнни, мәҙәни, спорт үҙәге статусын һыҙлырға тейеш. Беҙ башҡа төбәктәрҙән һәм дәүләттәрҙән туристар килеүен теләйбеҙ һәм мөмкин булғандың барыһын да эшләйбеҙ. Быуының өсөн ысын мәғәнәһендә таҙа, бөхтә, матур, изге һәм заманса уңайлы ҡала мөхите булдырыу зарур.

**➔ Өфө яҡшыра, матурлана бара. Уға төрлө илдәр туристарының ҡыҙыҡһыныуы артыуы ла - яҡшы һөҙөмтә. Сит ил ҡунаҡтарының бындай иғтибары ҙур бурыс йөкмәтә...**

- Һис һүҙһеҙ. Әммә яңы ҡыҙыҡлы маршруттар, ял зоналары, күҙәтеү майҙансыҡтары төҙөп, туристик инфраструктураны даими үҫтерергә кәрәк. Өфөнөң абруйлы конгресс майҙаны, киң күләмле халыҡ-ара сараларҙы үткәреү урыны сифатындағы позицияларын да нығытыу зарур. Беҙ хәҙер үк аҙна һайын тигәндәй әһәмиәтле симпозиумдар, форумдар, эре кәңәшмәләр уҙғарабыҙ. 2019 йылда баш ҡаланың йәйге Халыҡ-ара балалар уйындарын, 2020 йылда Бөтә донъя фольклориадаһын ҡабул итәсәген әйтеү ҙә етә. 2021 йылда умартасыларҙың "Апимондия" Халыҡ-ара конкурсын үткәреүгә заявка әҙерләйбеҙ. Ә был - донъяның 110 иленән 10 мең ҡатнашыусы тигән һүҙ. Күҙ алдына килтерәһегеҙме, бер үк ваҡытта күпме умартасы киләсәк һәм дегустация өсөн күпме бал килтерәсәк! Хәйер, беҙҙең башҡорт балынан да яҡшыраҡ бал юҡ. Ғөмүмән, Өфө төҙөклөк, инфраструктура торошо, дөйөм һәм экологик именлек, тормош сифаты буйынса Рәсәйҙең иң яҡшы миллионлы ҡалаһы булырға тейеш.

**➔ Нисек уйлайһығыҙ, республиканың өс йылдан һуң билдәләнәсәк 100 йыллыҡ юбилейына иң яҡшы бүләк нимә булыр ине икән?**

- Башҡортостанда көслө иҡтисади, мәҙәни ҡеүәт, йәмғиәт тыныслығы һәм татыулығы совет замандарында уҡ һалынған. Беҙ быны оноторға тейеш түгел. Эйе, республикабыҙ үҙенең быуатлыҡ юбилейын билдәләргә йыйына. Рәсәй Президенты Владимир Владимирович Путин ҡул ҡуйған "2019 йылда Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын байрам итеү тураһында" Указ - төбәктең ҡаҙаныштарына, уның халҡының хеҙмәтенә юғары баһа, беҙҙең эшмәкәрлеккә, пландарға һәм башланғыстарға ярҙам ул.

Иҫтәлекле дата хөрмәтенә "Башҡортостандың 100 йыллығына - 100 яңы объект" тигән киң күләмле акцияны тормошҡа ашырырға тәҡдим иттем. Улар мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт, спорт учреждениелары, социаль, юл, инженер инфраструктуралары һ.б төҙөү. Өс йыл эсендә ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа тормошто еңеләйтә торған йөҙәрләгән ҙур объекттарға эйә булырға тейешбеҙ. Баш ҡалала ла яңы, матур, кәрәкле һәм ихтыяж булған биналар, ҡоролмалар төҙәләсәк. Әлегә бындай эшмәкәрлектең планын әҙерләйәсәкбеҙ. Әгәр граждандар мине хуплаһа, программаға стартты быйыл уҡ бирәсәкбеҙ.

## ҠЫҪҠАСА...

# КЕШЕЛӘР ӨСӨН ЭШЛӘРГӘ

✓ **Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Кремлдә Рәсәй Президенты Владимир Путин менән осрашты.** Төбәк етәксеһе Владимир Путинға республикалағы социаль-иҡтисади хәл тураһында хәбәр итте. 2016 йылдың тәүге ярты йыллығындағы йомғаҡтар хаҡында һөйләгәндә Рөстәм Хәмитов төп күрһәткестәрҙең ыңғай динамикаһын билдәләне. Башҡортостанда Рәсәй Президентының барлыҡ күрһәтмәләре лә үтәлә, тип хәбәр итте республика етәксеһе. Мәҫәлән, быйыл Өфөлә заманса перинаталь үҙәк файҙаланыуға тапшырыла. 2020 йылға ғүмер оҙайлығын 70 йәштән 72-гә тиклем арттырыу бурысы ҡуйылған. "Һеҙ торлаҡҡа сиратты кәметеү һәм хатта бөтөрөү өҫтөндә эшләргә ҡуштығыҙ. Әлеге хәлдә тикшереҙек, һәм беҙгә 90 мең самаһы ғаиләне торлаҡ менән тәьмин итергә кәрәк. Ҡиммәтле, әммә хәл ителә торған программа. Ҡуртым торлағы ла төҙөйәсәкбеҙ. Беҙҙә торлаҡ һаҡламы программаһы әүҙем эшләй", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рөстәм Хәмитов.

✓ **Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфөлә "Берҙәм Рәсәй" партияһы төбәк бүлексәһенең әүҙем ағзалары менән осрашты.** Сарала Өфө һәм Өфө районының меңгә яҡын партия ағзаһы ҡатнашты. Унда "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк бүлексәһе секретары, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев, партияның төбәк башҡарма комитеты етәксеһе Рәмзил Ишһарин һәм ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов сығыш яһаны. Республика етәксеһе билдәләүенсә, "Берҙәм Рәсәй" партияһының етди ҡаҙаныштары бар. Уның 40-тан ашыу проекты уңышлы үтәлә. "Реаль эштәр" проекты быға сағыу миҫал булып тора, уның барышында былтыр граждандарҙың 900-ҙән ашыу башланғысы тормошҡа ашырылған. Рөстәм Хәмитов киләһе йылда республика, ҡала бюджеты һәм граждандар ҡатнашлығындағы ихата һәм йорт яны биләмәләрен ремонтлау программаһына кире ҡайтырға тәҡдим итте.

✓ **Урып йыйыу эштәрен үткәреү буйынса штаб ултырышында синоптиктар август айына һауа торошо менән таныштырҙы.** Төбәктә иң юғары 5 класлы янғын хәүефе иғлан ителгән, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығында. Башгидромет мәғлүмәттәре буйынса, райондарҙа дымға ҡытлыҡ күҙәтелә, ҡайһы берҙәрендә атмосфера һәм тупраҡ ҡоролого теркәлгән. Августа республикала уртаса һауа температураһы күп йыллыҡ күрһәткестәр кимәлендә - +17-19 градус, яуымтөшөм нормаға ярашлы буласаҡ. Айҙың беренсе декадаһында уртаса температура норманан 4-6 градусҡа юғарыраҡ. Икенсе ун көнлөктә +16-18 градус. Өсөнсөһөндә һауа температураһының төндә +3-8 градусҡаса түбәнәйеүе көтөлә. Айырым райондарҙа йәшенле ямғыр, боҙборсаҡ яуыуы ихтимал.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йәйге тымау

❖ Көнөнә 2-3 мәртәбә танау юлдарына яңы ғына өҙөп алынған каланхоэ япрағының һутын һөртөргә, 3-5 тамсыһын танауға тамыҙырға ла була. Һөт һәм һөт ризыҡтарын ҡулланмай тороғоҙ. 36-37 градусҡа тиклем йылытылған тоҙло һыу менән танауҙы сайҡарға.

### Яман шештән һаҡлан

❖ Картуф сәскәһен йыйып киптерергә һәм көн һайын сәй менән бергә бешереп эсергә.

❖ Көн дә бер тырнаҡ һарымһаҡ ашарға.

❖ Көн һайын уҡ булмаһы ла, ашаған ризыҡтарың араһында ҡайын еләге, кишер һуты, сей кәбеҫтә, ҡара шалҡан (редька), сөгөлдөр, балан, әстерхан сәтләүеге булһын.

❖ Яман шеш сирен иҫкәртеү өсөн һырғанаҡ (облепиха) майы яҡшы дауа. Уны көн һайын 3 мәртәбә ашарҙан 40 минут алда 1-әр балғалаҡ эсергә.

### Массаж

❖ Тәнеңә лә ярҙам ит, ябай кейем щеткаһы менән массаж яһа. Ул йыйырсыҡтарҙы яҙып ебәрә, ҡан һәм кислород әйләнешен яҡшырта. Был массажды тәнде бөтөн өлөшөнә лә яһарға була.

### Йылан саҡһа

❖ Саҡҡан урындан өҫтәрәк жгут һалырға, йәрәхәттән аҡҡан ҡанды туҡтатмаҫҡа, сағылған ҡул йәки аяҡты түбән һалындырырға, йәрәхәттән ҡанды ҡул менән һығып сығарырға, әммә йәрәхәткә теймәҫкә. Йылан ағыуын ауыҙ менән һурыу тыйыла. Быларҙы эшләгәндән һуң табипҡа барырға.

### Юғары ҡан баҫымы

❖ Ҡан баҫымы күтәрелгәндә, дарыу эсеп, уның тәьҫирен көтмәйенсә, ҡолаҡтарға массаж яһарға. Ике ҡолаҡҡа ла бер үк ваҡытта, ҡолаҡ япраҡтарына - аҫтан өҫкә, унан һуң ҡолаҡ эсенә өҫтән аҫҡа табан яһарға. Көнөнә 5-6 тапҡыр шулай һылау-һыйпау ҡан баҫымын нормаллаштерә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Етмәһә, һыйыр тик тормай, себен ҡыуып, ҡойроғон болғап тик тора. Биҙрәгә сүп-фәлән төшмәһен, тип, аҡрын ғына һауам. Хәлем бөтөп, тубыҡтар ойоп, аяҡтарымды ла һиҙмәй башланым.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

**Ҡайһы бер нервы-психик ауырыуҙарҙың, эске сирҙәрҙең, айырым бер йоғошло ауырыуҙарҙың да сәбәбен башҡорт халыҡ медицинаһы мистик һәм дини ҡараштан сығып аңлатҡан.**

Мәҫәлән, кешегә ен ҡағылыу йәки уның кешегә "эйәләшеүе", йәнәһе, сиргә һабыштыра. Әле лә өлкән быуын кешеләре паралич һуғыуҙы "ен һуғыу" тип атай.

Йәшен атыуҙы ла шул уҡ сәбәп менән аңлатҡандар. Баҫлығып йоҡлаһаң, албаҫты баҫҡан тиҙәр. Һәр бер ауырыуҙың, йәнәһе, үҙ ен-эйәһе бар. Ошо endeң кешегә инеүе (ғәҙәттә, ауыҙ аша) сирләп китеүгә сәбәпсе. Ауырыу - тере зат һәм ҡайһы саҡта антропоморф (кеше) ҡиәфәтендә була ала, тип иҫәпләгәндәр. Хатта ауырыуҙы һеләүһен тиреһенән тегелгән бүрек кейгән кеше рәүешендә йөрөгәнен "күреүселәр" ҙә булған. Ауырыу хайуан, ҡош (күпселектә һайыҫҡан) ҡиәфәтендә лә була ала, имеш.

Ҡорһаҡ ҡыуышлығындағы ағзаларҙың ҡайһы бер ауырыуҙары "бүсер" ҡуҙғалыуы менән аңлатылған. Башҡорт мифологияһы буйынса, "бүсер" - тере мифик зат, һәр кемдә була һәм ҡорһаҡ эсендә, кендек тәңгәлендә йәшәй. Ул, йәнәһе, нигеҙҙә эсәк-ҡарын буйлап күсеп йөрөүсән. Уның ошо хәрәкәте эстең теге йәки был урынында ауыртыу тыуҙыра ла. Ҡурған өлкәһендә йәшәүсе бер өлкән ҡатын бүсерҙе "үҙ күҙем менән күрҙем" тип һөйләне. Уның хәбәр итеүенсә, бүсер аҡ төҫтә, әстерхан сәтләүегә ҙурлығында, йөнтәҫ тырнаҡтары бар. Ысынбарлыҡта, әлбиттә, бүсер тигән нәмә юҡ. Медицинала тыумыштан килгән "тератома" тигән шеш билдәле. Эйе, был шеш йөнтәҫ, тырнаҡлы булыуы мөмкин.

Башҡорттар араһында таралған мистик ҡараштар буйынса, ауырыуҙың йоғоуы, ендең ҡағылыуы нигеҙҙә энер төшкән мәлдә, дымлыраҡ, һаҙлыраҡ урындарҙа, сүп-сар соҡоро, ташландыҡ өйөмө тирәһендә, мунсала күҙәтелеүсән. Имеш, ен-шайтан айырыуса имсәк балаларҙы ярата. Ҡайһы ваҡыт ул үҙ балаһын ҡалдырып, кеше балаһын алып китә.

Үсле, үсал ниәтле әҙәмдәр йоғонтоһо ла "һаулыкты ҡаҡшатыуы" бар. Элек күҙ тейеүгә ышаныусылар күп булған. Күҙ тейеү имсәк бала өсөн айырыуса хәүефле, тип иҫәпләгәндәр.

Ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарының сәбәбен йылан эйәләшеүҙән күргәндәр. Йәнәһе, кеше ауыҙын асып йоҡлағанда, уның ауыҙы аша йылан инеп китә. Һөҙөмтәлә, кеше сиргә һабыша. Бындай фекер күпселектә эсәктәрҙә эйәләшкән паразит селәүсендәрҙең, нигеҙҙә, аскарида исемле йомро гельминттың, ауыҙ аша сығыуынан тыуғандыр. Сөнки был паразит селәүсен эсәктәрҙә бик күбәйеп киткәндә, эсәктәрҙән ашҡаҙанға үтеп, ҡыҙыл үңәс буйлап ауыҙға сыға ала. Шул уҡ ваҡытта, ысынлап та, ауыҙ аша йыландың кешегә үтеүе мөмкин. Был хаҡта Гиппократ та телгә ала.

Төрлө ауырыуҙар ваҡытындағы патологик процестың асылы шулай уҡ ике ҡараштан - стихиялы материализм һәм дини-мистик ҡараштан сығып аңлатылған. Мәҫәлән, ҡан боҙолоуға ныҡ ышанғандар. Йәнәһе, бөтә организмда йәки айырым ағза-тұҡымала ҡан боҙола. "Ҡан ойоу" тигән термин да мәғлүм. "Эс төшөү", "ашҡаҙан түбәнләү" һымаҡ төшөнсәләр ҙә йыш ҡулланылған.

Халыҡ медицинаһының үҙенә күрә прогностикаһы булған. Ҡаты сирләгән кешелә ашау теләге барлыҡҡа килә икән, тимәк, уның һауығыуына өмөт бар. Сирленән һаҫыҡ тир бүленгәндә, уның хәле насар, һауығыуы шикле, тигәндәр. Ә ауырыу кеше тирләй башлаһа, был күренеш ыңғай баһаланған, һауығыуҙың бер билдәһе тип иҫәпләнгән.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы" китабынан.**

ҠЫҘЫҠ ХӘЛДӘР

# ӘСӘЙЕМӘ...

## һауыу аппараты бүләк итәм!



**Әсәйем ауырып дауаханаға яткас, бер көнгә ауылға ҡайтып, донъя көтөп торҙом. Хәлдән генә тайҙым! Ауыл ҡыҙымын, ошо йортта үҫтем, ләкин "ҡара эште" онотҡанмын икән. Ауыл ҡатын-ҡыҙҙарының эше тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел икәненә тағы бер ҡат инанып ултырыла...**

Баштан яҙайым әле. Ҡайтып еттем бит инде, кис еткәйне, өс һыйыр, һауын ваҡытын белдереп, баҡырыша, тыныс ыһыҙлана башланы. Өс биҙрә алып, һауырға сыҡҡайным, быҙауҙары өҫкә менеп бара, аяғымды иҙеп бөттөләр. Быҙауҙарҙы ынтылып, һыйырҙар ҙа тыбырсына, уларын көскә арҡанлап ҡуйҙыҡ атай менән. Шунан һәүкәштәрҙең елендәрен йыуып, майлап, һауырға ултырҙым. Һауа башлауым булды, ҡулдарымдың көсө бөттө лә ҡуйҙы. Етмәһә, һыйыр тик тормай, себен ҡыуып, ҡойроғон болғап тик тора. Биҙрәгә сүп-фәлән төшмәһен, тип, аҡрын ғына һауам. Хәлем бөтөп, тубыҡтар ойоп, аяҡтарымды ла һиҙмәй башланым. Минең бик уҡ эшкинмәгәнемде күреп, атайым үҙе һауыша башланы. Бер сәғәттәй маташып, көскә һауып бөттөк...

Артабан һауылған һөттө йылытып, сепаратҡа һалырға сират килеп етте. Сепараты бик көйһөҙ нәмә, бер детален дөрөҫ ҡормаһаң - айырмаҫҡа әҙер тора. Өс биҙрәнән бер литрҙай ҡаймаҡ сыҡты. Сепаратты йыуып ҡуйып, әлекке ҡаймаҡтарҙы май итеп бешеп, ҡаҙанда ҡорот ҡайнатып, уны һарҡытып элеп, һөт һауған дүрт биҙрәне, һөт йылытҡан кәстрүлде, ҡаҙанды, ҡыҫҡаны, бер өйөм һауыт-һабаны йыуҙым. Тегендә-бында һөт йылытып йөрөп, иҙәнгә вис түгеп бөткәнмен. Май бешкәндәге һыуҙар ҙа тамған, аяҡ аҫты шау май. Һыу йылытып алып, һауыт-һаба йыуа торған шыйыҡса менән һөртөп алырға тура килде иҙәнде лә. Ошо эштәр менән булған арала дүрт сәғәт ваҡыт үткән. Ә мин бит әле балаға, иргә, үҙемә иғтибар бүлмәнем. Ашарға бешермәнем, мунса яҡманым, тигәндәй.

Үлгән шикелле йоҡлағанмын. Иртәнге алтыла тороп, шул уҡ кискe процедураларҙы ҡабатларға тура килде. Иртәнге 10-да иһә мин хәлдән тайып ята инем инде. Әммә хәл алып ятырға ваҡыт юҡ. Ҡаймаҡлап, эремсекләп, сәй эсеп алдыҡ. Төшкә эҫе төшкәнсе, тип, баҡсаға картуф, йәшелсәләрҙе утарға сыҡтыҡ. Яныраҡ ҡына бер тапҡыр утағайныҡ. Тағы сүп баҫҡан. Укроптар күпләп үҫеп киткән, уларҙы йыйып алып, тоҙларға кәрәк булды. Үҙем алып ҡайтҡан сәскә үҫентеләрен ултыртып сыҡтым. Еләк бешкән, уны йыйып, таҙартып, варенье ҡайнатыу өсөн әҙерләп ҡуйҙым. Хәҙер иһә кискелеккә мунсаға һыу ташып ҡуйырға, йәшелсәгә һибеләсәк һыуҙы ла улаҡтарға тултырып ҡуйырға кәрәк. Себештәрҙе ул көндө ояларында тотторҡ, көтөргә сығармаһыҡ, бушап булманы. Тағы ашарға бешерҙем, ҡашығаяҡты йыуып ҡуйҙым. Бала-саға һыу буйында уйнап ҡайтып, өҫтәрен бысратҡан, уларҙы йыуындырып, өҫтәрен йыуҙым. Тағы ла иҙәндәрҙе йыуып сығарҙым. Күрше ҡатын ингәйне, уның менән бер аҙ ғына һөйләшеп алдым. Ҡул буйына төшөп һыу инеп килергә ваҡыт табып булманы...

Кискеһен һеңлем мине алыштырырға ҡайтҡанда арманһыҙ булып йығылғайным инде. Биҙрәләр ана шунда әлеүле тора, тип кенә әйтә алдым. Үәт ул эшкә шәәәп... Минең һымаҡ эшкинмәгән бәндә түгел инде. Ул беләктәр, ул күкрәктәр, тигәндәй. Һыйырҙарҙы ярты сәғәт эсендә шабырлатып һауып бөттө, сепаратты ла унышлы ғына ҡороп, ҡаймаҡ айыртып алды. Ул тороп ҡалды, ә мин иртәгәһенә ҡалаға "реабилитацияға" юлландым...

Ҡала урамдарында ауылдан һөт һатыусылар торһа, танау сирып үтеп киткән булабыҙ. "Деревня", "ауылса" тигән һүҙҙәр ҙә ысҡына ауыҙҙан. Ҡаланыҡылар һөтләмайлы-итле йәшәһен тип, күпме хеҙмәт башҡара ошо ауыл кешеһе. Хөкүмәт эшендә лә эшләп йөрөй, иртәнге сәғәт һигеҙгә тиклем шәхси хужалығындағы эшен бөтөрөп, төп эшенә сығып китә. Йә төйөнсәктәрен тейәп, һөт-ҡаймаҡ һатырға баҙарға юллана. Автобуста. Шуның өсөн ауыл кешеһенә баш эйерлек. Ауыл ҡатын-ҡыҙына һәйкәл ҡуйырлыҡ. Бына минең әсәйем дә ғүмере буйы көн дә шул ҡәҙәре ауыр эш эшләй булып сыға бит инде. Һыйырҙы һауып, һөтөн эшкәртеп ҡуйыу үҙе генә ни тора! Балаларыма аҡ булһын, тип, ауырығанда ла, ҡышҡы буранда ла, ямғырҙа ла көн һайын һауа бит шул һәүкәшен. Әлеге әсәйемде алыштырып маташҡан бер көн ошо ауыл тормошона өр-яңы күҙлектән ҡарарға мәжбүр итте мине. Әсәйемдең көнитмешен саҡ ҡына еңеләйтер өсөн, уға һауыу аппараты бүләк итергә булдым...

**Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА.**

ҮӘТ, ӘЙ!

# НИНДӘЙ ҺИН...

## киләсәк кешеһе?

**Футурологтар фекеренсә, киләсәк кешеләре хәҙергеләрҙән ҡырҡа айырылып торасаҡ.**



Бер фараз буйынса, киләсәктә ике зат вәкилдәренең дә сәсе булмаясаҡ, ир-аттарға һаҡал-мыйыҡ үҫмәйәсәк. Эстетик йәһәттән был бер аҙ юғалтыу һымағыраҡ булһа ла, сәс йыуыу һәм ҡырыныу өсөн хәҙерге кеүек күп һыу тотонолмаясаҡ. Тикшеренеүселәр фекеренсә, компьютерҙа һәм башҡа ҡатмарлы техникала эшләүе уңайлы булһын өсөн яйлап кешеләрҙең бармаҡтары нәҙек оҙонға әйләнәсәк. Аҡыл тештәре сығыуҙан туҡтаясаҡ.

Фәйләсүф Франческо Кавалли Сфорца әйтеүенсә, электрон һәм мәғлүмәти үсеш һөҙөмтәһендә нервылар системаһында ла үҙгәрештәр буласаҡ. Хәҙерге балаларҙа элекке быуында булмаған ҡайһы бер һәләттәргә әле үк эйә, әммә был өлкәлә тағы ла үҙгәрештәр буласаҡ, артыҡ ауырлыҡ һәм депрессия кеүек яңы сирҙәр барлыҡҡа киләсәк. Кешенең буйы ла оҙонораҡ булыуы фаразлана.

Ғалимдар фекеренсә, кешелә үҙгәрештәр әле үк башланған. Еҫ һәм тәм тойоу насарайған, киләсәктә танау бөтөнләй еҫ һиҙмәй башлаясаҡ, ти улар. Ҡайһы бер футурологтар әйтеүенсә, XXI быуаттың уртаһына Ерҙә йәшәүселәрҙең яртыһының тиреһе ҡарағусҡыл, ә күҙҙәре ҡыҫыҡ буласаҡ, йәнәһе, шул рәүешле европеоид раса балаларҙы аҙ тапҡан өсөн яза аласаҡ. Кешенең мускул массаһы кәмеүе бар, һулаҡайҙар күбәйәсәк. Бер теория буйынса, тәбиғәт таш быуатта уң ҡулдар менән бәрелештәрҙә һәләк булған һулаҡайҙар популяцияһын кире тергеҙәсәк.

Америка ғалимдары фаразлауынса, яҡынса 2 мең йылдан һуң атмосфераның бысраныуы арҡаһында кешенең күҙҙәре бәләкәсәйеп, унда өҫтәмә күҙ ҡабағы барлыҡҡа киләсәк. Үпкәләр ҙурайып, атмосферала ҡалған һауаны эшкәртеү өсөн тағы ла ҡуйыраҡ ҡан йөрөү системаһына эйә буласаҡ. Атмосфералағы химик бысраҡтан һәм әүҙем ҡояштан һаҡланыу өсөн тиренең ҡалынайыуы ихтимал. Тауыштан һаҡланыу өсөн ҡолаҡтарҙа йыйырсыҡтар барлыҡҡа киләсәк. Бөйөрҙәр яңы функцияға эйә булып, һейҙектән һыуҙы айырып алып, уны организмда һаҡлаясаҡ. Антропологтар әйтеүенсә, баш мейеһе ҙурайыуы һөҙөмтәһендә баш ҙурыраҡ һәм йомороҡ буласаҡ.

Ысынмы был, әкиәтме, бәрәү ҙә аныҡ ҡына итеп әйтә алмай, әммә күп ғалимдар фекеренсә, кешенең тышҡы йөҙөндә һәм физиологияһында ниндәйҙер үҙгәрештәр мотлаҡ буласаҡ һәм бында техник прогрестың бик тиҙ темп менән үҫеше "ғәйепле".

1918 йылдың августа Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән ғәскәрҙәрҙә полк һәм дивизия муллалары вазифаһы булдырыла. 2-се Башҡорт пехота полкының муллаһы итеп Нуриәғзәм Таһиров тәғәйенләнә.



БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ТАРИХЫНАН

# ПОЛК МУЛЛАЛАРЫНЫҢ...

## ғәскәрҙәге тәртипте, һалдаттарҙың рухын һаҡлағаны



1-се Башҡорт пехота дивизияһы муллаһы булған, Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы хәрби комиссары Нуриәғзәм Таһиров. 1919 йыл.

**Башҡорт ғәскәрҙәре 1918 йылдың июнендә аҡтар яғында Башҡорт хөкүмәтенең ҡарары буйынса ойошторола. Бының өсөн Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлеге янында махсус Башҡорт хәрби советы булдырыла. Ул Башҡорт ғәскәренең штабы тип тә аталып йөрөтөлә. Аҡтар яғында Башҡорт хөкүмәте ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 8 полк ойоштороуға өлгәшә. 1918 йылдың сентябрендә башҡорт полктары Айырым Башҡорт корпусына берләштерелә[1].**

Башҡорт ғәскәрҙәре 1918 йылдың июнендә аҡтар яғында Башҡорт хөкүмәтенең ҡарары буйынса ойошторола. Бының өсөн Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлеге янында махсус Башҡорт хәрби советы булдырыла. Ул Башҡорт ғәскәренең штабы тип тә аталып йөрөтөлә. Аҡтар яғында Башҡорт хөкүмәте ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 8 полк ойоштороуға өлгәшә. 1918 йылдың сентябрендә башҡорт полктары Айырым Башҡорт корпусына берләштерелә[2].

Ислам дине башҡорт ғәскәрҙәрендә ҙур урын биләй. Аҡтар яғында улар милли ғәскәр генә түгел, ә мосолман ғәскәре булараҡ та күҙәләнеш ала. 1-се Башҡорт полкы ойошторолоу менән Башҡорт хөкүмәте 1918 йылдың 14 июнендә үҙенең фарманы менән милли атрибутика индерә. Был фарманға ярашлы, башҡорт яугирҙәре алты ҡырлы ҡалҡан рәүешендәге күк шеврон тағып йөрөй. Унда полктың номеры һәм айырыу билдәләренән тыш, мосолман символикаһы ярым ай менән йондоҙ һүрәтләнгән була .

1918 йылдың 28 авгусында Башҡорт хәрби шураһы башҡорт ғәскәрҙәре өсөн дөйөм униформа эшләй. Унда ла ярым ай менән йондоҙ билдәһе башҡорт һалдаттары таҡҡан шевmegрондарҙа урын ала. Екатеринбург ҡалаһын большевиктарҙан азат итеүҙә ҡатнашҡан 2-се Башҡорт пехота полкына ҡала халҡы тарафынан бүләк ителгән байраҡты ла мосолман билдәһе - ярым ай менән йондоҙ биҙәй. Башҡорт ғәскәренең мисәттәрендә лә ошо уҡ символика тора[3].

Ислам дине башҡорт армияһында тышҡы атрибуттар кимәлендә генә түгел, милли мосолман ғәскәрендәге кеүек урын биләй. Автономия етәкселеге был мәсьәләгә ҙур иғтибар бирә. 1918 йылдың авгусында Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән ғәскәрҙәрҙә полк һәм дивизия муллалары вазифаһы булдырыла[4]. Һуғыш шарттарында муллаларға мосолман йолаларын атҡарыу бурысы һалына: һәләк булған яугирҙәрҙы йыназа уҡып ерләү, йома һәм байрам намаҙҙары үткәреү һ.б. 2-се Башҡорт пехота полкының муллаһы итеп күренекле башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәре Нуриәғзәм Таһиров тәғәйенләнә, ул октябрь айынан бер үк ваҡытта дивизия муллаһы вазифаһын да башҡара[5].

Башҡорт ғәскәрҙәрендә күнегеүҙәр графигы ла дини йолаларҙы атҡарыуға яраҡлаштырып үҙгәртелә. Йәкшәмбе көнөнән тыш, башҡорт полктарында йома көнөндә сәғәт 14.00 тиклем, йәғни полк муллалары йома намаҙы үткәргәнгә тиклем, дәрес, күнегеүҙәр үткәрелмәй[6].

Башҡорт ғәскәрҙәрендә мосолман байрамдары үткәреүгә лә ҙур әһәмиәт бирелә. 1918 йылдың сентябрендә Башҡорт корпусының командиры генерал Хажиәхмәт Ишбулатовтың Ҡорбан ғәйете айҡанлы башҡорт полктарына ебәргән ҡотлау телеграммаһы ошо хаҡта һөйләй: *"От души поздравляю вас с великим прздником Курбан-байрам. От чистого сердца желаю вам, воинам, отважно, не дрогнувшей рукой очистившим в боях нашу родину от врагов и, кроме того, избавить наш народ от неописуемых, связанных с войной, хлопот и неудобств для спокойного и благополучного проведения праздника. Прошу у Аллаха силы и помощи в наших святых делах по спасению от катастрофы нашей родины Башкортостана и всей Российской республики".*[7]

Ырымбурҙа 4-се Башҡорт пехота полкы частары Ҡорбан ғәйете байрам иткән көндәрҙә фронтҡа юллана. Яугирҙәрҙы Ҡөрьән аяттары уҡып, доғалар ҡылып юлға оҙаталар. "Башҡортостан хөкүмәте хәбәрҙәре" ("Вестник правительства Башкирии") гәзите был ваҡиға тураһында бына нимә тип хәбәр итә: *"14 сентября состоящий из 3-х рот 1-й батальон 4-го Башкирского полка отправился для сражений на Орский фронт. До станции его провожали члены Башкирского военного шуро и командир Башкирского корпуса генерал Ишбулатов. На станции имамом Махмутом-эфенде было зачитано из Корана и исполнено богослужение с пожеланиями успехов воинам. Член Башкирского правительства Аллаберде Ягафаров произнес речь о значении для башкир Орского фронта. Речь он закончил словами: "Да здравствует автономный Башкортостан! Да здравствует созданная на федеративной основе Российская республика!"*

*Выступление генерала воины встретили возгласами "Ура!".*

*Было, конечно, несколько неудобно отправляться в путь завтра в праздничный день "Гаит-байрам". Несмотря на это, присягнувшие на верность родине башкирские роты двинулись в путь при высоком душевном их подъеме, говоря: "С помощью Аллаха непременно возьмем Орск".*[8]

Иртәгәһенә, башҡорт батальоны Һары станцияһына килеп төшә. Бынан фронт һыҙығына барып етер өсөн 25 саҡрым йәйәү үтергә кәрәк була. Ә Орск ҡалаһына станциянан 45-50 саҡрымдар тирәһе ара. Башҡорт һалдаттары изге Ҡорбан ғәйетен Һары станцияһында һый әҙерләп байрам итә. Кискә ҡурай моңо тыңлап, бейеп күңел аса. *"Беҙҙең батальон һалдаттары Ғәйет байрамы айҡанлы бер аҙ күңел асып алыу ниәте менән уртала бейеү өсөн майҙан ҡалдырып, бер түңәрәккә йыйылды. Майҙан уртаһында беҙҙең батальондың ҡурайсыһы Төлкөбай урын алған. Ул башҡорт бейеү көйҙәрен ҡурайҙа ғәжәйеп матур уйнай. Уртала елеп йөрөп башҡорт егеттәре бейей. Төлкөбай бейеү көйҙәренән оҙон көйҙәргә күсә. Уның ҡурайынан ата-бабаларҙың башынан үткән ҡайғы, аһ-зарҙарын сағылдарған Тәфтиләү, Ашҡаҙар көйҙәре ағыла. Һәр кем башын түбән эйеп, һығышлы уйҙарға сума"*, - тип яҙа башҡорт батальонының бер яугиры[9].

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**
**(Дауамы бар).**

[1]*ЦИА РБ. Ф.1201. Оп. 2. Д. 4. Л. 2.*
[2]*Таймасов Р.С. Участие башкир в Гражданской войне. Книга 1. В лагере контрреволюции (1918 - февраль 1919 гг.). Уфа, 2009. 56-сы биттәр.*
[3]*Ярмуллин А.Ш. Башкирская военная символика периода Гражданской войны// Проблемы востоковедения. 2011, №4 (54). 102-се бит.*
[4]*Ярмуллин А.Ш. Институт полковых мулл в башкирских войсках в годы Гражданской войны// Проблемы востоковедения. 2010, №3 (49). 76-сы бит.*
[5]*ЦАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. д. 3. Л. 36.*
[6]*Таймасов Р.С. Участие башкир в Гражданской войне. Книга 1. Уфа, 2009. 86-87 биттәр.*
[7]*Национально-государственное устройство Башкортостана (1917-1925). Документы и материалы: В 4 т. /Авт.-сост. Б.Х. Юлдашбаев. Т. 1. Ч. 2. Уфа, 2002. 464-се бит.*
[8]*Шунда уҡ. 465-се бит.*
[9]*Ярмуллин А.Ш. Башҡорт армияһы тарихынан. Өфө, 2012. 49-50-се биттәр.*

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Инеш

Уның нигеҙен батырҙар: Ашын, Туҡсаба, Мәсем, Иҫкебей, Ҡара Ҡужаҡ, Һары Мәргән, Алдар Иҫәкәев, Күсем Төләкбаев, Килмәк Норошов, Аҡай Күсемов, Йосоп Арыҡов, Күҫәк Солғолов, Рысай Игембәтов, Бәпәнәй Төрөпбирҙин, Төлкөсура Алдағолов, Аланйәнғол Ҡотлоғужин, Кинйә Арыҫланов, Салауат Юлаев, Баҙарғол Юнаев, Ҡаранай Моратов, Муса Мортазин, Әмир Ҡарамышев, Хажиәхмәт Унасов, Муса Гәрәев, Таһир Күсимов, Миңлеғәле Шайморатов, Шакирйән Мөхәмәтйәнов, Миңләғәле Ғөбәйҙуллин, мәғдәнселәр: Исмәғил Тасимов, Надир Үрәзмәтов, 1812 йылғы Ватан һуғышы батырҙары Ҡаһым түрә, Ниғмәтулла Хазиев, Ҡотлогилде Ишемғолов, Аҡкөсөк Тимербаев, Килдейәр Байбулдин, Назарбай Теләпов, Нәсир Наурызов, Ҡыуатовтар, ғилем таратыусылар: Ҡол Ғәли, Сәлихйән Күкләшев, Мирсалих Биксурин, Байыҡ Аблаев, Буранбай Ҡотосов, Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев, шағир-мәғрифәтселәр: Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Мифтахетдин Аҡмулла, Ризаитдин Фәхретдинов, Ғәли Соҡорой, диндарҙар, шағирҙар, яҙыусылар һәм дәүләт эшмәкәрҙәре: Зәйнулла Рәсүлев, Ғабдулла Сәиди, Әхмәтзәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич, Һәҙиә Дәүләтшина, Дауыт Юлтый, Мәжит Ғафури, Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Мостай Кәрим, Мортаза Рәхимов һәм башҡа бик күптәр тәшкил итә. Күп быуаттар буйына азатлыҡ өсөн көрәшкән башҡорт халҡы үҙендә тыуған иленә тоғролоҡ, яуызлыҡ менән килешмәүсәнлек, эскерһеҙлек, тыуған еренә сикһеҙ мөхәббәт тойғолары тәрбиәләй алды. Башҡорттар азатлыҡты бар нәмәнән дә өҫтөн ҡуя.

Башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары булған уғыр ҡәбиләләрен бер ҡанат аҫтына тупларға ынтылыу Бөйөк Башҡорт илен төҙөүгә башланғыс була ла инде. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев яҙыуынса, Болғар империяһы осоронда уғыр ҡәбиләләре үҙҙәрен баш уңғар йәки баш уғыр (югор) тип һанаған (бында баш - иң төп мәғәнәһендә). XX быуат башында Рәсәйҙә революция була. Әхмәтзәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич һәм башҡалар етәкселегендәге башҡорт милли хәрәкәтенең башҡорттарҙың ерҙәрен "Ҙур Башҡорт иле" сиктәрендә һаҡлап алып ҡалырға тырышыуы тормошҡа ашмай. "Ҙур Башҡорт иле" бары тик картала ғына тороп ҡала. Башҡорттар йәшәгән уның территорияһы совет власы урынлаштырылған осорҙа күп өлөштәргә бүленеп, Рәсәйҙең бер нисә өлкәһе һәм Татарстан Республикаһы барлыҡҡа килә.

Үкенескә күрә, Р.Ғ. Кузеевтың "Башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүе" китабында башҡорт халҡы Арал һәм Һырдаръя буйынан Көнъяҡ Уралға күсеп килеүсе күсмә халыҡ тип кенә килтерелә. Был хеҙмәттә башҡорт халҡы бөйөклөгөнөң ысын мәғәнәһендәге тәрәнлеге һәм киңлеге күрһәтелмәй, автор өҫтән-мөҫтән генә һүрәтләү менән сикләнә.

Евразияның күп кенә халыҡтарының тарихын өйрәнеүселәр боронғо һәм урта быуат авторҙарының, көнсығыш тарихсыларының, сәйәхәтселәрҙең яҙмаларын файҙалана. Уларҙа археологик сығанаҡтар иң мөһим әһәмиәткә эйә. Китапта барлыҡ баҫма сығанаҡтарға һылтанма тексттың үҙендә килтерелә, унда авторҙар йәки төҙөүселәр, баҫманың сыҡҡан датаһы, бит һандары урынлаштырыла. Һылтанмаларҙа килтерелгән сығанаҡтар исемлеге тексттың аҙағында.

Автор үҙенең китабында башҡорт халҡының тарихын иң боронғо дәүерҙән хәҙерге көнгәсә өйрәнә, был халыҡтың тарихы үҫешенең динамикаһын күрһәтә. Хеҙмәтемде яҙғанда ҡатмарлы мәсьәләләр буйынса фекер алышыуҙа ҡатнашҡандары өсөн ғалимдар Рәшит Шәкүровҡа, Роза Букановаға, Нияз Мәжитовҡа, Юлдаш Йосоповҡа һәм башҡаларға рәхмәтемде белдерәм.

**(Дауамы. Башы 29-сы һанда).**

✓ *Күпме китабыбыҙ ғәрәп графикаһы менән яҙылған, иҫке төрки телендәге яҙмалар уҡылмай ята. Беҙҙең тарих Карамзиндың тарихы ғына түгел, уны төрки сығанаҡтарҙан эҙләргә кәрәк.*



# киләсәк

## күберәк мәғлүмәт

**Бер ваҡыт йәмғиәттә милли идея эҙләү күренеше популяр булып киткәйне. Йәнәһе лә, милли идеяны тапһаҡ, милләтебеҙ алға китер, үҫер. Тәҡдимдәр бихисап булды, һәр кем үҙе эшләгән эште милли идеяға тиңләне, әммә аныҡ ҡына, барыһы ла күтәреп алырлыҡ, әйҙәүсе уртаҡ фекер табылманы. Ләкин халҡыбыҙҙы ҡыбырлатып, сәмләндереп алырға бер сәбәп булды ул. Бөгөн заман башҡортоноң образын эҙләйбеҙ икән, тимәк, был сара ла күңелдәргә рух һалырға, тиңләшергә тырышырлыҡ шәхестәрҙе табырға һәм барларға кәрәклегенә ишара. Бөгөнгө геройҙарыбыҙҙы ла, һис шикһеҙ, заман башҡорттары тип атарға мөмкин. Ни өсөн икәнен әңгәмәлә үҙегеҙ аңларһығыҙ. Шулай итеп, һүҙ Башҡорт Википедияһы хакимдары Рөстәм НУРЫЕВ менән Зөфәр СӘЛИХОВҡа.**

**▸ Тимерҙе ҡыҙыуында һуғыу яҡшы, тигәндәй, һөйләшеүҙе ябай ҙа, шул уҡ ваҡытта ҡатмарлы ла һорауҙан башлайыҡ: заман башҡорто, һеҙҙеңсә, ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш?**

**Р. Нурыев:** Башҡорт заманына ҡарап тормайынса, һәр заманда ла башҡорт булырға тейеш һәм бөтөн замандарҙа ла заманса булған башҡорттоң, минеңсә, төп бурысы - Урал батырҙың васыятын үтәү. Быны мөмкинлек сыҡҡан һайын ҡабатлайым: яҡшылыҡ менән генә яманлыҡҡа юл ҡуймаҫҡа мөмкин. Яман менән яман булып, яманлыҡтың юлы ябылмай, бары арта ғына. Шуға күрә иң төп сифат, иң төп шарт - яҡшылыҡ, изгелек ҡылыу. "Башҡа милләттәр алда бара, башҡорттар артта һөйрәлә", тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә, йәнәһе лә, уларҙа прогресс. Ә башҡорттар үҙҙәренең тәбиғәткә яҡын булыуы, яҡшылыҡты ямандан айыра белеүе менән һәм таш атҡанға аш атып ҡына юлды ябыуҙары арҡаһында һәр ваҡыт замана башҡорттары булып ҡала ала. Хатта башҡаларға ҡарағанда ла замансараҡтар, тиер инем.

Әле мәғлүмәт технологиялары, мәғлүмәт эраһы тип геү киләбеҙ. Күптәр, интернет - ул сүп донъяһы, ти. Әлбиттә, ямандар күтәрелделәр ҙә, баҫтылар ҙа алдылар донъяны, сүп үләне бит тиҙ үҫә, әрһеҙ була. Ә баҡсаны сүп үләненән утап торуҙан ғына мәғәнә юҡ, сүп ҡабат үҫеп сығасаҡ. Шуның өсөн матур, сифатлы сәскәләрҙе күберәк ултыртырға кәрәк. Ул саҡта улар сүпте баҫып китәсәк.

Википедияла "тиҙ грант" тигән яңы программа индерелде һәм беҙ шунда иң элек грант алыусылар булып сыҡтыҡ. Бына был да заман башҡортоноң бер сағылышы - һәр өлкәлә хәбәрҙар булыу.

**З. Сәлихов:** Минеңсә, заман башҡорто заман менән бергә атларға, хәҙерге технологияларҙы белергә, кәрәкле һәм әһәмиәтле аралашыуҙар булдырырға, мәғлүмәт табырға һәм уның файҙалы-файҙаһыҙ икәнен айыра алырға, милләтен, үҙен яҡлап, дәлилле яуаптар бирә белергә лә тейеш. Сөнки әле мәғлүмәт көрәше бара, ә яу яланына ялан ҡул сығып булмай, иң төп ҡоралың - етди сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәт. Милләтеңде яманлауҙар, бысраҡ өйөргә тырышыу күренештәре күҙәтелгәндә, дәлилле яуап бирерлек компетентлы, белемле булырға тейеш башҡорт. Шулай уҡ үҙенең милләтен, нәҫелен, тамырҙарын, ата-бабаларын, шәжәрәһен, халҡының батырҙарын белергә, улар менән ғорурланырға, уларҙың данын үҙенең данлы эштәре менән байытырға, милләтенең данын, уның брендтарын артабан да донъяға танытырға, тыуған яғының, Башҡортостанының тарихын пропагандаларға, таратырға тейеш. Борон башҡорттарҙа иң әһәмиәтле мәғлүмәттәр ауыҙ-тел ижады аша таралып, беҙҙең көндәргә шулай килеп еткән икән, киләсәк быуындарға күберәк һөйләп ҡалдырыу - беҙҙең төп бурыс.



**▸ Тел төбөгөҙҙән тойомлауымса, һүҙ яйлап ҡына Википедия юҫығына борола башланы. Википедия ирекле энциклопедия булһа ла, унда сығанаҡ булмайынса, мәғлүмәт урынлаштырыу мөмкин түгел. Эйе, беҙҙең ғалимдарыбыҙ бик күп, әммә Википедияла эшләй башлаһаң, бәхәсле мәсьәләләрҙә сығанаҡтар етмәүе бәкәлгә һуға. Ә сығанаҡһыҙ, йәғни ҡоралһыҙ, ул баҡсаға күп нәмәне сәсеп булмай...**

**З. Сәлихов:** Бала саҡтан фәнни-популяр әҙәбиәт уҡырға яраттым. Мәктәпкә бармаҫ борон уҡ Диҡҡәт Бураҡаевтың "Аждаһа күле" тигән китабын апайҙарымдын-ағайҙарымдан уҡыта торғайным. Ятлап бөттөм, барыбер уҡытам. Үҫә төшкәс, башҡортса шундай әҙәбиәттең булмауына иғтибар иттем. Рөстәмдең, Википедияға мөхәррирҙәр саҡырам, тигәнен күреп, Башҡорт википедияһына милләтем тураһында башҡа халыҡтарға күберәк мәғлүмәт биреү ниәте менән килеп эш башланым. Эшләү тигәнем - ваҡыт булғанда мәҡәләләр төҙәтә, яңыларын яҙа инем. Әлеге ваҡытта иң бәкәлгә һуҡҡаны - башҡорт телендә махсус әҙәбиәт булмағанлыҡтан, башҡа телдәрҙән алып эшләү.

**Р. Нурыев:** Дөрөҫ, был йүнәлештә, әлбиттә, башҡорт википедистарына ғына түгел, ғөмүмән, милләттәштәребеҙгә, зыялыларыбыҙға эшләйһе, дәлилләйһе, иҫбатлайһы эштәр бик күп. Һәм ундай сығанаҡтарҙы үҙебеҙҙең мөхиттә генә күрһәтеп ҡалыу түгел, ә донъя мөхитенә сығарып күрһәтеү шарт булып тора бит. Әлеге ваҡытта билдәле мәғлүмәттәрҙе сығарып күрһәтеү йәһәтенән википедистар алдына ҙур маҡсаттар ҡуйылған. Мәҫәлән, Википедияла тәҡдим ителгән, һәр тел бүлегендә мотлаҡ булырға тейешле 1000 мәҡәлә исемлеге бар. Әгәр шуларҙың береһе бөтөн телдәргә лә тәржемә ителһә, уны икенсе мәҡәлә менән алыштырырға була. Беҙгә бына ошо исемлеккә лә әләгергә кәрәк. Әйтәйек, "Урал батыр" эпосын Википедияға индереү йәһәтенән көслө генә аҙымдар яһап, уны яҡын арала индереп, башҡа тел бүлектәрендә "Урал батыр" эпосы тураһында мәҡәләләр урынлаштырыу йүнәлешендә эшләргә. Бының өсөн уны башҡортса, русса, инглизсә - кәмендә өс телдә ҙур, күләмле һәм һайланған статусы алған мәҡәлә дәрәжәһенә еткерергә өлгәшеү зарур. Әле ул мәҡәлә бик бәләкәй.

Икенсенән, китаптарҙа, башҡа төрлө ғилми сығанаҡтарҙа сағылыш тапмаған нәмәләр бик күп. Әгәр бәхәс килеп тыуа икән, сығанаҡ булмаһа, "һауанан алып яҙаһығыҙ", тигән дәғүә белдерелә. Заманында совет идеологияһы беҙҙе боронғо сағатай телендә, төрки, ғәрәп графикаһында яҙылған сығанаҡтарҙан айырған, уларҙы уҡый белмәйбеҙ. Шуларҙы табып, цифрлаштырып, дөйөм ҡулланыуға сығарып, кириллица менән нығытып ҡуйыу - киләсәккә бик ҙур эш шул. Ошо йүнәлеште күтәреп ебәрергә кәрәк. Күпме китабыбыҙ ғәрәп графикаһы менән яҙылған, иҫке төрки телендәге яҙмалар уҡылмай ята. Беҙ бит әле 40-сы йылдарҙан һуң кириллицаға күсерелгән сығанаҡтарҙа ғына болғанабыҙ. Уныһын да беҙгә рус ғалимдары яҙып биргән. Улар ҙа Карамзиндың ҡарашынан сығып яҙылған. Петр Беренсе Карамзинға: "Пиши историю России Великой", - тип бойорған, Карамзин яҙған, беҙ хәҙер шул тарих менән һуғарылып, үҙебеҙҙекен яҙабыҙ. Беҙҙең тарих Карамзиндың тарихы ғына түгел, уны төрки сығанаҡтарҙан эҙләргә кәрәк. Тарихын тергеҙеп, алға ҡараусы ла заман башҡорто ул.

**▸ Был донъяға һәр кеше үҙенең миссияһы менән тыуа, тиҙәр. Үҙегеҙгә йөкмәтелгән миссияны нисек күҙаллайһығыҙ һәм нимәлә күрәһегеҙ? Уны үтәйбеҙ тип уйлайһығыҙмы?**

**З. Сәлихов:** Үҙебеҙҙе, ер йөҙөндә башҡорттар ҙа бар, улар алға киткән, юғары үҫешкән милләт, тип танытырға тейешбеҙ. Көн һайын ошо маҡсатҡа нимәлер эшләргә тырышам. Википедияға бынан 11 йыл элек килеп "сумдым". Ҡайһы бер ваҡыттарҙа япа-яңғыҙым булдым. Ваҡыт-ваҡыт Вячеслав Чернев ярҙам итте, һуңынан Азат Хәлилов ҡушылды. Вячеслав аша башҡа тел бүлектәрендә эшләүселәр менән танышып, аралашып, Башҡорт википедияһын йәшәтеп килдек. Бының өсөн көн дә үҙем тәржемәләр эшләнем, ҡыҫҡа булһа ла мәҡәләләр яҙҙым, нимәнелер төҙәтеп булһа ла сыҡтым. Әлбиттә, ул ваҡыттарҙы бөгөнгө менән сағыштырырлыҡ түгел. Хәҙер Башҡорт википедияһына профессиональ яҙыусылар, журналистар, уҡытыусылар килде. Хатта филологтар ғына түгел, географ, биолог, математик, психолог та бар. Ошондай көн килеп етер тип уйламай ҙа инем, шулай ҙа хыяллана торғайным. Элегерәк берәй мәҡәлә әҙерләгәндә цитата килтерһәң дә, "Ҡайҙан алдың, википедиянанмы ни?" тигән ышанмаусылыҡ булһа, хәҙер, киреһенсә, Википедияға ышаныс арта, эҙләү системаһында иң элек Википедия килеп сыға. Был уның ышаныслы сығанаҡ булыуына бер дәлил.

Википедияның маҡсаты - донъяла аҙ һанлы тип иҫәпләнгән халыҡтарҙың да бар икәнлеген танытып, иҫтәренә төшөрөп тороу, минеңсә. Донъялағы ете мең самаһы тел араһында башҡорт теленең дә булыуы һәм үҫеш буйынса беренсе 50 тел исемлегенә инеүе бик ҡыуаныслы. Был милләтебеҙ, телебеҙ өсөн бик юғары күрһәткес. Сөнки халҡы 50-шәр миллион булған милләттәр ҙә быға өлгәшә алмаған әле. Миссиям шулай үтәлә, тип уйлайым.

**Р. Нурыев:** Ысынлап та, Башҡорт википедияһын йәшәтеүҙә Зөфәр бейҙең өлөшө, һис шикһеҙ, ҙур. Башҡорт википедияһын биләүҙән тәрбиәләп, уны атлатып ебәреү - уның ҡаҙанышы. Шуның өсөн Башҡорт википедияһы ирекмәндәре араһында иң беренсе булып Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының "Ал да сәс нур халҡыңа" тигән миҙалы менән бүләкләнеүе лә лайыҡлы.

Миссияға килгәндә инде, был турала күп тапҡырҙар уйланғаным булды. Әлеге ваҡытта, бәлки, үтәмәгәнмендер ҙә, тигән уйҙар ҙа килә. Ләкин заманына ҡарата ниндәй бурыстар ҡуйыла, шуларҙы үтәргә тырышам. Интернеттағы башҡорт мөхите менән 90-сы йылдарҙа уҡ ҡыҙыҡһына башланым. Ул ваҡытта башҡортса клавиатура ла, шрифттар ҙа - бер нәмә лә юҡ ине. Һуңыраҡ сайттар төҙөү менән ҡыҙыҡһынып маташтым. Бер-ике сайт эшләп тә ҡараным. Әммә нимә тип әйтә алам - сайт төҙөп ҡуялар ҙа, артабан үҫтерергә оноталар. Улар шулай итеп үлә һәм бөтөнләй юғала. Был - техник һәм финанс сәбәптәр эҙемтәһе. Һөҙөмтәлә кешенең ҡыҙыҡһыныуы юғала, аҡсаһы бөтә, мәғлүмәт сығанағы үлә. Ә бына викитехнология был йәһәттән ниндәйҙер аныҡ кешегә бәйле түгел. Бында берәү килә, берәү китә. Мине ул шуның менән йәлеп итте. Был мәғлүмәт сығанағы беҙҙән һуң да йәшәйәсәк. Шуныһы менән дә ул көслө ресурс.

**РӨСТӘМ НУРЫЕВ:**

*Бөтөн замандарҙа ла заманса булған башҡорттоң төп бурысы - Урал батырҙың васыятын үтәү, йәғни яҡшылыҡ менән генә яманлыҡҡа юл ҡуймаҫҡа мөмкин икәнен аңлау.*

Бөгөнгө көндәге маҡсатым - ошо Башвики ирекмәндәрен берләштереп, Зөфәр менән тапаған һуҡмаҡты киңәйтеү, ҙур юл итеп күрһәтеү һәм уны донъя кимәленә сыға торған юл итеп танытыу. Беҙгә семинарҙарға йөрөргә, башҡаларҙың тәжрибәһен өйрәнергә, яҡшыһын үҙебеҙҙә ҡулланырға, үҙебеҙҙе күрһәтергә кәрәк. Әлбиттә, сығымдар күп буласаҡ, шуға күрә килем табыу тураһында ла уйлау мөһим. Кешеләрҙе күберәк йәлеп итеп, күберәк саралар үткәреп, уларҙы күберәк сит тарафтарға, сит илдәргә тәжрибә уртаҡлашырға сығарыу зарур. Һәм, әлбиттә, был сараларҙан һуң туғандаш проекттарҙа башҡорттар, Башҡортостан тураһында мәғлүмәт артырға тейеш.

**▸ Ғөмүмән, Башҡортостан тураһында нисә телдә мәғлүмәт бар, башҡорттарҙы, Башҡортостанды донъя ирекмәндәре беләме?**

**З. Сәлихов:** Үҙәк һәм Көнсығыш Европа илдәре осрашыуы былтыр Эстонияла булды, шун-

*✓ Улар башҡортса һөйләшмәйҙәр, социаль селтәрҙә аралашҡанда ла башҡорт телен ҡулланмайҙар. Үҙҙәренең башҡорт икәнлеген йәшереп йәшәүселәр ҙә бар. Башҡорт булып йәшәү ауыр булмаһын тиһәң, рух көслө булырға тейеш.*

# БЫУЫНДАРҒА...

## ҡалдырыу ҙа - бурысыбыҙ

да барғанда Босниянан, Хорватиянан килеүселәр Башҡортостанды, уның ҡайҙа урынлашҡанын бөтөнләй белмәй ине. Рәсәй эсендә Башҡортостан тигән дәүләт бармы ни, тип аптырайҙар. Сөнки Википедияны донъя кимәлендә ил кәүҙәләндерә. Рәсәйҙә күп милләт һәм халыҡ йәшәп, улар үҙ телдәрендә википедия булдырһа ла, Башҡорт википедияһы - донъя кимәлендә танылыу алған берҙән-бер тел бүлеге. Уларға Башҡортостанда башҡорт телендә матбуғат, радио бар, мәктәптәрҙә башҡорт теле генә түгел, башҡортса уҡытыу ойошторолған урындар бар, тигәс, һеҙ бит тулы хоҡуҡлы милләт булып формалашҡанһығыҙ, тиҙәр. Шулай итеп, Башҡортостанды таныттым, әле күптән түгел тамамланған Европа яҙы конкурсына ("Вики яҙ - 2016") ла саҡырҙылар. Унда, илдәр генә ҡатнашһа ла, Рәсәйҙән тыш, субъекттарҙан сахалар һәм беҙ генә ҡатнаштыҡ. Һөҙөмтәлә башҡа тел бүлектәрендә Башҡортостан тураһында мәҡәләләр һиҙелерлек артты.

**Р. Нурыев:** 2012 йылда булды, буғай, Тулуз ҡалаһында йәшәүсе бер француз ғалимы, медик, википедист, фотоһәүәҫкәр Тәбиғәтте өйрәнеү музейынан грант алған да, фотоларын һәр бер тел бүлегендәге төрлө мәҡәләләргә ҡуя башланы. Беҙҙең башҡорт бүлегендәге мәҡәләләрҙе фотолар менән тулыландырыуҙа ла уның өлөшө бик ҙур булды. Уға русса һәм гуглда французса тәржемә итеп, рәхмәт белдереп, хат яҙып ебәрҙем. Яуабында: "Эшемде күреүегеҙ шул тиклем һөкландырҙы, шатландырҙы. Башҡалар иғтибар ҙа бүлмәне, һеҙ генә күрҙегеҙ, һеҙ генә рәхмәт әйттегеҙ. Шул арҡала ғына башҡорттар бар икәнен белдем", - тип яҙҙы. Һуңынан уның менән әңгәмә сыҡты "Киске Өфө"лә, электрон вариантын үҙенә һалып ебәрҙем. Һуңынан тағы хат килде: "Ҡайҙа ғына бармайым, ҡайҙа ғына сығыш яһамайым, шул гәзитте күрһәтәм. "Бына, башҡорттар минең турала яҙа", - тием". Был да үҙенә күрә пропаганда бит.

**"Кәрәк түгел милләтем тип тамаҡ ярыу", ти үҙенең бер шиғырында Рауил Бикбаев. Шул һүҙҙәргә мөнәсәбәтегеҙ...**

**Р. Нурыев:** Әгәр кешенең булмышы шундай икән, йәғни милләт өсөн көрәшен ул ҡайҙалыр трибуна артына сығып һүҙ һөйләүҙә генә тип күрә икән, ундайҙарға, ололар әйтмешләй, мейеләрен уртаға ярып һалып булмай...

**З. Сәлихов:** Улай тамаҡ ярып йөрөгән юҡ, әлбиттә, ундай кешеләрҙе күргәнем бар. Үҙем шым ғына ултырам да, тотам да эшләйем. Рөстәм бей булмаһа, журналистар менән дә осрашмаҫ, күренмәҫ тә, һаман да шулай шым ғына эшләп тик йөрөр инем.

Википедиянан тыш шым ғына башҡарған тағы ниндәй эштәремде атап үтергә була: ауылыбыҙҙа шәжәрә байрамы үткәрҙек, ауыл тураһында китап сығарҙыҡ, "Башҡортостан" гәзитенең элекке баш мөхәррире Нияз Сәлимов менән бергә Ғафури районында Башҡортостандың географик үҙәге тигән стела астыҡ. Өфө ҡалаһында үткән Шәжәрә байрамдарында ла ғаиләбеҙ менән ҡатнашабыҙ. Ҙур эштәр бәләкәй эштәрҙән башлана. Нимәлә булһа ла беренсе аҙымды яһарға кәрәк.

**Р. Нурыев:** Әлбиттә, шунда уҡ юл ярып булмай, башта һуҡмаҡ һалырға кәрәк. Минә килгәндә, Мәсетле районы яҡташтар берлегендәмен, ул йүнәлештә әүҙем эш алып барабыҙ. Райондың энциклопедияһын сығарыуҙа ҡатнашлығым булды. 2007 йылда "Ҡошсо ырыуы ауылдары" тигән 1000-дән ашыу дана мәғлүмәт йыйынтығын үҙемдең һәм бағымсыларҙың аҡсаһына баҫтырып тараттым. 2014 йылда "Беҙ - Мәсетле. Яҡташтарым менән ғорурланам" тигән электрон китап әҙерләнем. Республика гәзит-журналдарында яҡташтарым тураһында баҫылып сыҡҡан мәҡәләләр йыйынтығы булды ул. Был китапты йәштәр күрһен, уҡыһын, эргә-тирәләрендә кемдәр йәшәгәнен белһен, ғорурланһын, шуларға оҡшарға тырышһын, өлгө алһын тигән маҡсаттан тупланым. Сөнки йәштәр электрон китап уҡый. Төп эш буйынса, планға инмәһә лә, етәксебеҙ Әкрәм Ғәниевтың инициативаһы менән 2008 йылда 2002 йылғы иҫәп алыу буйынса башҡорттарға ҡағылышлы айырым статистик йыйынтыҡтар сығарҙыҡ. Унан һуң, XX быуатта үткән барлыҡ халыҡ иҫәбен алыу буйынса, шулай уҡ һуңғы ике переписте лә ҡушып (2002, 2010), 630 битлек статистик мәғлүмәт йыйынтығы әҙерләнек. Баҫтырып сығарырға ғына кәрәк. Ике йыл инде шуға аҡса эҙләйем. Башҡорттарҙың социаль-демографик статистик мәғлүмәттәре тупланған күләмле эш ул. Шуны баҫтырып сығара алһаҡ, тағы ла бер ҙур миссиямды үтәгәнмен тип һанар инем.

**Бөгөн күптәр зарланыуҙан бушамай. Һеҙҙең ҡарашҡа, башҡорт булыуы ауырмы?**

**Р. Нурыев:** Минең өсөн еңел дә түгел, әммә ауыр ҙа түгел. Әлбиттә, үҙ-үҙен яҡлай белгән кешегә ауыр түгел. Тормош булғас, төрлө проблемалар тыуып тора. Беҙҙең халыҡ өсөн бигерәк тә күберәк, сөнки башҡаларҙан айырмалы, Башҡортостан, уның ере-һыуы, киләсәге өсөн беҙ яуаплыраҡ. Икенсе яҡтан, әгәр проблемалар булмаһа, тормош булмаҫ ине. Башҡорттоң проблемаһы булмаһа, тимәк, башҡорт та булмаҫ ине. Шулай уҡ башҡорттоң ошо ер өсөн яуаплылығы ла ҙурыраҡ, шуға ла уның проблемалары ла күберәк. Башҡа милләттәр был ерҙе барыбер ҙә башҡорт кеүек йөрәгенә яҡын ҡабул итә алмайҙыр, тием. Сөнки был ерҙәр - ысынлап та, борон-борондан беҙҙең ерҙәр ул, шуға ла ул беҙгә ҡәҙерле. Ул ошо ерен, шундағы тереклекте яҡларға, һаҡларға тейеш.

Дөйөм алғанда, башҡорт милләтенең миссияһы - "Урал батыр"эпосында һалынған. Ул - тәбиғәтте, ерен, бөтөн кешелек донъяһын яҡлау һәм һаҡлау. Ысын башҡорт булып йәшәһәң, башҡорт булыуы ауыр түгел ул. Минең Википедия аша донъя кимәлендә башҡа милләттәр араһында шул тиклем таныштарым күп. Үҙемде уларҙан бер ҙә кәм дә, артыҡ та итеп тоймайым - беҙ барыбыҙ ҙа бер тиң. Эйе, Әмир Аһарони 10-дан артыҡ тел белә, мин ул тиклем үк белмәйем, ләкин яҡшы аралашабыҙ, уны үҙемдән өҫтөн йәки ул мине үҙенән түбән итеп ҡарамай. Шуның өсөн, минә һәр хәлдә башҡорт булыуы ауыр түгел.

**З. Сәлихов:** Минең өсөн дә ауыр түгел, ләкин кемдәр өсөн ауыр икәнен исемләп әйтмәгәндә лә билдәле. Улар башҡортса һөйләшмәйҙәр, социаль селтәрҙә аралашҡанда ла башҡорт телен ҡулланмайҙар. Шулай итеп, үҙҙәренең башҡорт икәнлеген йәшереп йәшәүселәр ҙә бар. Башҡорт булып йәшәү ауыр булмаһын тиһәң, рух көслө булырға тейеш. Шунан телебеҙҙең ҡулланылышын арттырырға кәрәк, көнкүрештә генә түгел, төрлө саралар ҙа, юғары даирәләрҙә. Шул ваҡытта башҡорт булыуы ауыр тип ҡарамаҫтар, башҡорт булыуҙан ҡурҡмаҫтар, киреһенсә, ғорурланырҙар ғына.

**Әгәр бөтөн нәмәне үҙгәртә алһағыҙ, шундай ҡөҙрәткә эйә булһағыҙ, ниҙәрҙе үҙгәртер инегеҙ?**

**Р. Нурыев:** Бик ауыр һорау. Мин донъяны "Урал батыр" эпосында яҙылған принциптар буйынса ҡорор инем. Әле лә үҙемсә кешелекте яҡшылыҡҡа әйҙәргә тырышам. Бөтөн халыҡтар ҙа яҡшылыҡ буйынса йәшәп кенә алға китеп булырын аңлаһын, барлыҡ эшләгән эштәре, ҡылған ҡылыҡтары ла яҡшылыҡҡа нигеҙләнһен ине. Ә был принцип, яҡшылыҡ һәм йылы мөнәсәбәттәр, Викитехнологияға һалынған. Шуның өсөн мин википедияла.

Икенсенән, үҙен башҡортмон тип иҫәпләгән һәр кешегә, "Урал батыр" эпосындағы сәйәсәт бына ошо технологияла бар, тип аңлатып сығыр, ғилем таратыр инем.

Өсөнсөнән, Урал батыр тәбиғәттең мәңгелек булыуын теләгән, мин дә булған ҡөҙрәтемде шуға йүнәлтер инем. Сөнки бөгөнгө йәмғиәт, кешелек донъяһы тәбиғәттең елеген һурып, киләсәккә ҡалдырмай. Кешелекте сама менән йәшәргә өйрәтергә кәрәк. Бөгөн ҡулланыусы йәмғиәтенең ҡарашы - күберәк сүп-сар етештерәбеҙ икән - яҡшыраҡ йәшәйбеҙ, иң мөһиме - күберәк булһын, тиҙерәк булһын, шул саҡта ғына иҡтисади үҫеш була, шул саҡта ғына иҡтисади прогресс алға китә, йәнәһе. Был - хаталы, яңылыш һәм ҡулланыусы ҡарашы. Ә төҙөүсе, булдырыусы тәбиғи ресурстарҙы сама менән ҡулланып, киләсәк быуындарға тапшырыу маҡсатын алға ҡуя.

Икенсе ҡарашым: илдәр, дәүләттәр - кеше уйлап тапҡан ҡоролош һәм ул низағтарға, бәхәстәргә, һуғыштарға килтерә. Ул дөрөҫ ҡоролошмо икән, бәлки, икенсе төрлө ҡоролош барҙыр? Әгәр ҡөҙрәтем булһа, шундай ҡоролошто уйлапмы, эҙләпме табыр һәм һәр кем тыныс ҡына, бер-береһе менән тигеҙ йәшәй алған мөхит тыуҙырыр инем Ер шарында.

**З. Сәлихов:** Мин дә ошолар хаҡында хыялланам...

**Башҡорт Википедияһында - ҡатын-ҡыҙҙар, башҡаларҙа ир-ат күберәк. Бының сәбәптәрен нимәлә күрәһегеҙ?**

**З. Сәлихов:** Тәбиғәт шулай ҡоролған, ир-ат иң алдан юл ярып барған: ғалимдар, философтар, уҡытыусылар, табиптар һ.б. барыһы ла ир-ат булған. Һынауҙы улар үтеп, был эште ҡатын-ҡыҙ ҙа эшләй алырлыҡ икәнен аңлағас, уны гүзәл затҡа тапшырғандар. Йәғни йортто нигеҙенән алып ир-ат күтәрә, ә инде усаҡтағы утты һүндермәй тотоу - ул ҡатын-ҡыҙ эше. Башҡорт википедияһын да беҙ, ир-ат, төҙөнөк, хәҙер ҡатын-ҡыҙ уны һүндермәй, усаҡҡа ут өҫтәп тора, тип уйлайым. Тылы ныҡ булған ғаиләләр генә тормош ауырлыҡтарына бирешмәй алға барған кеүек, беҙҙең Башҡорт википедияһының да тылы ныҡ бөгөн. Тормош үҙе лә бит һынауҙарҙы ир-атҡа йөкмәтә, ул уңышлы булһа ғына ҡатын-ҡыҙға тапшыра. Беҙ һынауҙы уңышлы үттек, тип уйлайым, ә башҡа википедиялар һаман да һынау осоронда, күрәһең. Әммә улар ҙа ошо юлды үтәсәк һәм шуға киләсәк.

**Р. Нурыев:** Ысынлап, та, уйлап ултырам да, Зөфәр менән тулыһынса килешәм. Беҙҙе башҡа википедияға өлгө итеп ҡуйырға була. Башҡа тел бүлектәре аптырап һорайҙар ул, нисек һеҙ был эшкә ҡатын-ҡыҙҙарҙы йәлеп итә алдығыҙ, тип. Хәҙер, беҙ үҫеш этабын үттек, тип аңлата йөрөрбөҙ инде. Был беҙҙең алда барыуҙың, заман башҡорттары күрһәткесе.

Тормошта ла бит ир һәм ҡатын - улар бер бөтөндөң ике яртыһы. Башҡорттарҙың менталитетында шул иштәрҙең тиңлеге һаҡлана. Йәмғиәттә уларҙың һәр береһенең үҙ бурысы булыуға ҡарамаҫтан, "Урал батыр" эпосында Йәнбикә менән Йәнбирҙе арыҫланға атланып, һунарға йөрөгәндә, уларҙың тиңлегенә ишара яһала. Шуның өсөн был ирҙеке, был ҡатын-ҡыҙҙыҡы тигән ҡараш юҡ. Икенсенән, бөгөн Википедияла ғына түгел, ә башҡа йәмәғәт башланғысындағы йүнәлештәрҙе алып ҡарағанда ла ҡатын-ҡыҙҙар яуаплылыҡты үҙ өҫтәренә алыуҙан ҡурҡмай икәнен күреп-ишетеп торабыҙ бит...



### ЗӨФӘР СӘЛИХОВ:

*Әле мәғлүмәт көрәше бара, ә яу яланына ялан ҡул сығып булмай, иң төп ҡоралың - етди сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәт. Милләтеңде яманлауҙар, бысраҡ өйөргә тырышыу күренештәре күҙәтелгәндә, дәлилле яуап бирерлек компетентлы, белемле булырға тейеш башҡорт.*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәгә ошо урында ҡыҫҡа ғына йомғаҡ яһарға ла мөмкиндер, моғайын. Заман башҡортоноң ниндәй булырға тейешлеген әңгәмәселәр ҡоро һүҙ менән түгел, үҙ эшмәкәрлектәре, үҙ өлгөләре менән раҫланы. Әммә иң мөһиме - улар үҙҙәренең матур башланғысында арттарынан башҡаларҙы эйәртергә, башҡаларҙа үҙ-үҙенә ышаныс тыуҙырырға, заман һынауҙарына ҡаршы барырға һәм тағы ла яңы үрҙәр яуларға, камиллашырға әҙерҙәр.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

**✓ Ысынлап та, Илдар ине ауылға инеп килгән йәш кеше. Эшен ташлаған да бөтөнләйгә ауылға ҡайтырға булған икән. Әсәһенең яңғыҙлығын, атай йортоноң етемһерәп ултырыуын күтәрә алмаған кинйә малай.**



# Вариҫтар

Байгилде МОТАЛЛАП

Хикәйә



Зәйнулла ауыр көрһөндө лә урынына ултырҙы. Был тиклем дә бер ҡатлы булмаҫ кеше. Үҙ балалары, аңларҙар, хупларҙар, элеп алырҙар, кем нисек булдыра ала, шулай булышырҙар, тип уйлаған булды. Хыялый! "Быныһы беҙҙеңсә... Әйҙәгеҙ осрашыу хөрмәтенә... Беренсеһе менән икенсеһенең араһы ҡыҫҡа, әйҙә, тамыҙҙыҡ!.." - мәжлес ҡапыл йәнләнеп китте. Йөҙҙәр яҡтырҙы, телдәр асылды. Бөгөнгө заман тураһында һәр кеменең үҙ фекере бар, имеш: "Крючков телевизорҙан сығыш яһаны, сит илдәр СССР-ҙы тарҡатыу тураһында килешкәндәр тей", "Тарҡала инде, хәҙер килеп, Рәсәй иҫәбенә йәшәп ятҡан ҡырғыҙҙар ҙа, ҡаҙаҡтар ҙа хатта суверенитет иғлан иткәс", "Зерә Гарбач ниместәрга хут бирҙе берләшергә. Улар тағы һуғыш асырға могут", "Бисәһен эйәртә лә йөрөйсө шул миңле пәрей", "Спекулянттарҙың бер-икәүһен урамға сығарып атҡанда, башҡалары ҡотормаҫ ине хаҡ бесеп" һәм башҡалар, һәм башҡалар. Һүҙҙәрендә - томаналыҡ, асыу, үпкә, көнләшеү. Өҫтәл артында ҡыҙа, ҡуйыра барған хәбәрҙәрҙе тыңлап, Зәйнулла моңһоу йылмайып ҡуйҙы. "Хәстрүш политиктар, үҙ ихаталарында ни хәлдәр булып ятҡанын белгәндәре юҡ, былары ла шунда - буш боғаҙ Мәскәү әрәмтамаҡтары һүҙен олоғара хәбәр итеп һөйләп ултыралар", - тип әсенде. "Ер алайыҡ бергәләп, үҙ хужалығыбыҙ менән йәшәйек бынан ары", - тип әйтергә йөрьәт итмәне. Һүҙҙәренә ҡарағанда, йәштәр элекке ғәмһеҙ тормоштарының бөтөүгә барыуына асыулы. Улар икенселәй йәшәүҙе күҙ алдына килтермәйҙәр, башҡа төрлө йәшәргә лә теләмәйҙәр, ахыры. Һуғыш, һуғыштан һуңғы йылдарҙағы аслыҡты, яланғаслыҡты күрмәгән Брежнев заманы балалары бит улар - әҙергә өйрәнгәндәр, бүтәнсә көн итеүҙе белмәйҙәр.

* * *

Ҡыш көндәренең береһендә Зәйнулла атын дөйөм кәртәнән алып ҡайтты ла, өйҙәге малын ҡарағас, фермаға эшкә китте. Көн алсаҡ аяҙ, матур ине.

Төш мәлендә ат санаһы табаны аҫтында ҡар шығырлаған тауышты ишетеп, Әклимә йәһәтләп өҫтәлгә аш йыйыштыра башланы. Самауыры ла түрҙән ҡунаҡланы. Хужа, ғәҙәттә, малға бесән һалып инә бер ыңғайҙан. Шуға ашыҡманы. Берауыҡ ваҡыт үткәс: "Оҙаҡланысы, албары ҡыланмағанын", - тип, өҫтәлдән самауырын төшөрҙө лә, мейес алдына ҡуйып, борҡотоп алды, күмер өҫтәне.

Зәйнулланың ҡайтыуына байтаҡ ваҡыт үтеп китте. Инде лә сабырлығын юйған ҡатын тышҡа сыҡты.

- Бә-ә-әй, әллә мынау ҡартлас лаяҡыл иҫереп ҡайтҡан, ғүмерҙә ҡыланмағанын. Санаһында йоҡлап ятасы... Йә, Хоҙай, өшөп тә киткәндер былайтып урамда ятҡас, - Әклимә, әптәләнеп, еңелсә көйө егелгән атҡа табан туйтаҡланы.

Барып етмәне санаға, туктап ҡалды.

- Аллаҡайым, бигерәк килбәтһеҙ ята ла ул, - ҡатындың йөҙөндә хафалы шомлолоҡ хасил булды.

Зәйнулланың башы артҡа аңҡайып, һаламға бата биргән - асыҡ ауыҙы, танауының осо ғына күренә. Йөҙө буръяҡланған, уң ҡулы өҫтән ниҙер алырғамы, әллә, киреһенсә, бирергәме уҡталғандай күтәрелеп ҡатып ҡалған.

Әклимә, иң ҡурҡыныс шиктәрен ҡыуып, санаға уҡталды һәм, абынғандай, үле күҙҙәргә төртөлөп туктап ҡалды.

Был үлем бөтә ауылды тетрәндерҙе. Һап-һау кеше уйламағанда донъялыҡтан китте лә барҙы.

Ете бала әсәһе Әклимә килен булып төшкән ауылда үкһеҙ етем ҡалды ла ҡуйҙы. Кинйәһе Илдар ҙа ике ай элек Себерҙәге апаһы янына эшкә киткәйне.

* * *

Усаҡ, ҡашығаяҡ тирәһенән ары китмәгән Әклимәгә яңғыҙ донъя көтөүе уғата ауыр бирелде. Әлдә балалары, сиратлап ҡайтып, ярҙам итеп торҙо.

Шулай булһа ла һөтөн һауып эсерлек кенә бер һыйыр ҡалдырҙы ла, башҡа мал-тыуарын балаларына таратып бирҙе. Инде мал да киткәс, ишек алды, кәртә-ҡура бөтөнләй етемһерәп ҡалды. Буран һалған ҡарҙы ла көрәмәй яңғыҙ ҡатын - үҙе йөрөрлөк берләм юлды тапалап һалып ала.

Әклимәнең яңғыҙ ғүмер кисеүенә йыл да үтеп китте шулай. Зәйнуллаһының рухына бағышлап, балаларын йыйып, аят уҡытырға ниәтләне, хәбәр ебәрҙе уларға.

Илдар отпуск алып, алдан ҡайтып төштө. Егет, өйҙәре тапҡырына еткәс, ҙур юл сумкаһын ҡарға ҡуйҙы ла тыуған йортона байтаҡ текләп торҙо. Ярым асыҡ тышҡы ҡапҡаны яртылаш көрт баҫҡан. Кисәге ҡарҙы тапалап, уның аша ике-өс тапҡыр уҙғандар. Моғайын, әсәһе һыуға, йә магазинға барғандыр, күршеһенә инеп сығыуы ла ихтимал. Төтөн еҫе килһә лә морйәнән өн сыҡҡандай түгел. Күршеләре мейес яға икән. Тәҙрәләр туңмаған - эстән йылытылмаған бинаның, ғәҙәттә, быяла өлгөләре шулай таҙа була ҡышҡыһын да. Илдарҙың күңелен шом баҫты - йорт бөтөнләй етемһерәп ултыра, кеше йәшәмәгән дә һымаҡ. Әллә әсәһе өйҙә юҡмы икән?

Йүгерә-атлай һуҡмаҡтан ихатаға йүнәлде. Әсәһенең эҙҙәренән саҡ ҡына тайпылғайны, ботоноң төбөнә тиклем ҡарға батты. Сығырға аҙапланғанда сибек әбей генә тапалаған һуҡмаҡ уйылып китте, ҡатыраҡ ергә Илдар шыуышып саҡ сыға алды.

Ишек бикһеҙ ине. Йөрәкһеп, абайламай кемделер тертләтеп ҡуйыуҙан ҡурҡып, тотҡаны тартты. Тауышһыҙ еңел асылды ишек.

Ҡаршыһына бер кем дә сыҡманы. Тышта көн үҙәге булһа ла өй ярым ҡараңғы, элекке кеүек мейес йылыһы ла бөркмәне битенә.

- Әсәй, - Илдар һаҡ ҡына өндәште.

- Кем унда, - тауыш төпкө бүлмәнән ишетелде.

- Мин, Илдар.

- Атаҡ, мин һине иртәгә көтә инем, - әсәһе күренде. Ҡартайған, төҫ-ҡиәфәтендә бахырлыҡ билдәһе ярылып ята.

- Нишләп өй һыуыҡ, ҡараңғы? - Илдар яуап урынына үҙе һорау бирҙе.

- Иҫән ҡайттыңмы, улым? Әллә, өйрәнгәнмен инде, миңә ҡалай ҙа ярай, - Илдарҙы ҡосаҡлап алды, күҙҙәрен һөрткөләне.

Илдар ҙур ҡосаҡ утын индереп, мейескә яғып ебәрҙе, тәҙрә ҡорғандарын киреп асты, соланға сығарып самауырға ҡуҙ һалды. Әсәһе ғүмере буйы эшкә сымыры булды, йорттары гел ялтлап торҙо. Яңғыҙлыҡ шулай кәрен алғанмы - донъяһына ҡул һелтәгән дә ҡуйған хәҙер.

- Бер ҙә генә толҡа тапмайым яңғыҙым өйҙә, ҡулыма бер эш тә бармай, - тине аҡланғандай улының аптыраулы ла, шелтәләгәндәй ҙә ҡарашын күтәрә алмай.

- Апайҙарға күсеп кит һуң улай булғас, - Илдар әсәһенә ярҙам итеүҙең башҡа юлын күрмәй ине.

- Килен булып төшкән нигеҙҙе, атайың ҡәберен ташлап ҡайҙа китәйем... Ошонда ғына әүеш-тәүеш итеп йәшәрмен инде ҡалған көндәремде...

Илдар ике көн буйы ҡар көрәне, ирҙәр эше түгел тип тормай, өй иҙәндәрен йыуып алды, керләнгән тәҙрә ҡорғандарын алмаштырҙы. Йылы, яҡты йортҡа йән ҡайтты. Әсәһе икмәк һалып ебәргәс, тәмле еҫ таралды - Илдар үҙен ҡайтанан бала саҡтағылай тойҙо. Ул бер ҡайҙа ла китмәгән, туғандары ла ауылда, хәҙер, ишекте киң асып, атаһы килеп инер...

* * *

Аятҡа, алыҫ Себерҙәгеләрҙе иҫәпкә алмағанда, ғаилә тулыһынса йыйылды. Аталары, өмөт иткән әруахтар рухына аят бағышлап, сауабын алдылар, донъялыҡтағы бер бурыстарын атҡарҙылар.

- Ҡартатай мәрхүмдең өйөн күсереп алам быйыл. Таш стеналар артында икенсе ҡатта йәшәү ялыҡтырҙы, балалар ҙа ҙурая, - тине өлкән ағалары Хәлфетдин ауылдан саҡырылған кешеләр таралышып бөткәс, туғандарына үҙе хәл иткән ҡарарын еткереп.

Ул ике ҡатлы совхоз йортоноң икенсе ҡатында йәшәй. Өс балаһы бар. Ҡапылғара уңайлы ла һымаҡ ундай торлаҡ - утын ташыйһы түгел, һыуы ла килеп тора. Тик үҙ ишек алдың булмағас, ауылса иркенләп йәшәп булмай - баҡса ла, мал һарайы ла, мунса ла ситтә. Еңелсә генә ҡапыл сығып әйләнеп булмай. Бер һәнәк бесән ташларға булһа ла кейенеп, әҙерләнеп сығырға кәрәк.

- Атайығыҙҙың тейҙергеһе килмәгәйне бит әле өйгә... - Әклимә оло улының ниәтен хупламағандай, икеләнеп өндәште.

- Ултырып сереһенме, әтеү?..

- Берегеҙ ҡайтһағыҙсы...

- Бер сығып киткәс, ҡайтыу юҡ инде... Пирспиктива юҡ бында... Мәктәп тә башланғыс синыф ҡына, балаларҙы барыбер ситкә ебәрергә... Нисек ҡайтаһың?.. - Әсә һүҙен балалары хупламаны.

- Атайығыҙ былтыр васыят әйткәндәй ошо өҫтәл артында торғайны бит. Оноттоғоҙҙамы ни?

- Ярай, йәлләгәсең, ултырып сереһен, - Хәлфетдин ҡул һелтәне.

Өй эсендә ауыр тынлыҡ урынлашты. Бер аҙҙан: "Иртәгә эшкә", - тип, ҡайтырға йыйына башланылар. Совхоз автобусын алып килгәйнеләр үҙәктән. Береһенең дә әҙер транспорттан ҡалғыһы килмәне.

Аҙна-ун көндән Илдар ҙа Себергә китте.

* * *

Гөрләп яҙ килде, бар ғәмәл йәшеллеккә күмелде. Әклимә, ҡайғыһы онотола төшкәс, яҙмыштан уҙмыш юҡ, тип, донъяһына иғтибарын арттырҙы. Йортҡа элекке бөхтәлек, йәм ҡайтты. Ишек алдын да таҙа торорға тырыша яңғыҙ ҡатын.

Яңы ғына сыҡҡан ҡаҙ себештәрен кәртә артына ҡыуҙы ла, ҡулын ҡаш осона терәп, тау битләүендәге юлдан ауылға төшөп килгән кешегә баҡты.

- Атлауы Зәйнулланыҡы һымаҡсы, - тине үҙ алдына. - Ah-ah-ah, әллә балам... Илдар булмағайы... Тәс атаһы кеүек баҫып килә...

Ысынлап та, Илдар ине ауылға инеп килгән йәш кеше. Эшен ташлаған да бөтөнләйгә ауылға ҡайтырға булған икән. Әсәһенең яңғыҙлығын, атай йортоноң етемһерәп ултырыуын күтәрә алмаған кинйә малай.

Ул тойғоларға бирелеп кенә түгел, ә ҙур уй һәм оло ниәт менән ҡайтҡан булып сыҡты. Ныҡлы уйлап, яңы ғына ҡабул ителгән закондарға нигеҙләнеп, фермер хужалығы булдырыу буйынса план ҡорған, иҫәп-хисаптарға таянып, буласаҡ хужалыҡтың проектын эшләгән. Ниәте - ер алып, тыуған ауылында төпләнеү, атай нигеҙенә яңы һулыш өрөү ине.

Бер мең дә туғыҙ йөҙ ҙә туҡһанынсы йылдар башында ауыл хужалығында етештереүҙе йәнләндереү өсөн хөкүмәт яңы ойошҡан фермерҙарға мул ярҙам күрһәтте: кредит бирҙе, аҙаҡтан түләү шарты менән техника таратты, башҡа төрлөсә дәртләндерҙе. Үҙ эшенә тотонорға йөрьәт иткән ауыл кешеһенән бары тик ерҙә эшләү теләге, ишекте белеп шаҡып, кәрәкле хужаға мөрәжәғәт итеү, тейешле ҡағыҙҙарҙы теүәл тултырыу ғына талап ителде.

Илдар әлегә үҙ планына төшөрөлгән тәүге аҙымды ғына яһаны. Ниәттәренең башҡаларына өлгәшеү өсөн юлда күп йөрөргә кәрәк буласағын белгәнгә күрә, ул Себерҙә эшләп йыйған мул ғына аҡсаһына "Москвич" машинаһы һатып алды. Һәм уның артабанғы уңыштарын фәҡәт ошо дөрөҫ аҙымы менән аңлатырға мөмкиндер.

Йәш егет буш урында яңғыҙы нисек үҙ хужалығын башлап ебәрергә тейеш? Әгәр илдә барған хәлдәрҙе белмәһәң, закондар менән ҡыҙыҡһынмаһаң, саҡ ҡына тәүәккәллегең булмаһа, әлбиттә, был - тормошҡа ашмаҫлыҡ хыял. Илдарҙың күңеленә атаһының: "Ер алып үҙ хужалығыңды ҡороп була бит хәҙер", - тигән һүҙҙәре уйылып ҡалғайны. Ул быға тәүҙә артыҡ әһәмиәт бирмәне. Себергә сығып китте, мул аҡсаға әүрәп, атай һүҙен бөтөнләй онотҡан да һымаҡ ине. Ләкин аят уҡытҡанда тағы иҫенә төшөрҙөләр. Үҙе лә, тыуған йортоноң һүнеп барғанын күреп, Себерҙә болоҡһоп йөрөнө. Шул мәлдә ҡулына "Совет Рәсәйе" гәзите килеп эләкте. Унда Ырымбур өлкәһендә Смирнов тигән фермер тураһында бер битлек мәҡәлә яҙылғайны: нисек башлап ебәргән эшен, ниндәй закондарға таянған, ҡайҙан, ниндәй ярҙам күргән, хужалығын ни рәүешле ойошторған һәм башҡалар. Гәзиттәге мәҡәлә - эш өсөн торғаны бер камил ҡулланма - тот та, яҙылғандарға таянып, эҙмә-эҙлекле эш ит! Илдарҙа ҡыҙыҡһыныу уянды, ул китапханаға барып, фермер хужалығын ойоштороу мәсьәләһенә ҡағылышлы төрлө баҫмаларҙы уҡыны. Кәрәк нәмәләрҙе яҙып барҙы һәм шулай уның планы тыуҙы.

Ауылға ҡайтҡас, бер ай буйы "Москвич"ынан төшмәне тип әйтһәң дә яңылыш булмаҫ. Көн аша тигәндәй районға йөрөнө. Быуна бер мәл ҡулына фермер таныҡлығы, ер биләү тураһында ҡарар алды. Былар банкта иҫәп асып, кредит, дәүләт субсидияһы юллау өсөн нигеҙ ине.

Ҡайһы ваҡыт кешенең юлына уйлағаны үҙе сығып тик тора бит ул. Илдарҙың да тормошонда шундай бер мәл булғандыр - кәрәкле ҡағыҙҙарын ҡулына алыуға өс көн дә үтмәне, ауыл Советы аша эҙләтеп, районға саҡырҙылар. Өфөнән районға фермерҙар өсөн байтаҡ "Беларус" тракторы бүлгәндәр икән.

✓ *Күрәһегеҙҙер, шағирә имен тормош хаҡында яр һалмай ғына бәйән итә. Үҙе оҫталыҡ түгелме ни был? Уның шиғри асылында тәбиғилек ярылып ята. Хатта патриотик шиғырҙарында ла.*



Исемлеккә Илдарҙы ла индергәндәр, барып, ҡыуып алып ҡайтырға кәрәк, имеш.

Күп тә үтмәй, банктан кредит бүлеүҙәре тураһында ҡағыҙ килеп төштө. Кредитты түләү бер йылға кисектерелә, проценты ла юҡ кимәлендә.

Аҡсаһы ла, техникаһы ла булды, тик сәсеүгә төшөргә һуңлағайны Илдар. Шуға, кәртә артына ҙур итеп аҙбар эшләтте лә, кешенән башмаҡтар һатып алып, һимертеүгә ҡуйҙы. Ем ҡайтартты, бесән эшләне, өс ауылдашын эшкә алды. Ҡышҡа ингәс, көрәккән башмаҡтарҙы ит комбинатына тапшырҙы. Уларҙың урынына йөш быҙауҙар һатып алып ҡуйҙы, орлоҡ, тырмасәскестәр хәстәрләне.

Яҙғыһын илле гектарҙа иген сәсте. Сәсеүгә хөкүмәттән тағы аҡса бүленде. Аҡса ныҡ үҙгәреп торған заман ине. Элек йөҙ һум менән баһаланған әйбер хәҙер йөҙ мең, хатта миллионға барып баҫа. Кешенең банкта ятҡан аҡсаһы янды, ә Илдар, киреһенсә, был хәлдән отто ғына. Сөнки утыҙ баш мал, аҙыҡ алырға, кәртә-ҡура төҙәтөргә еткән кредитын һатып ебәргән бер баш үгеҙ хаҡы менән ҡапланы ла ҡуйҙы.

Шул осорҙа тамыр йәйеп ҡалған Илдар артабан хужалығын киңәйтә, нығыта ғына барҙы. Иген икте, мал үрсетте, техникаһын ишәйтте, кәрәк биналар, фермалар һалды. Ике меңдә бишенсе йылда Илдарҙың фермер хужалығында тотош ауыл эшләй ине. Магазин да тотто, Ҡурғы ҡаяһының ышығына ял йорто ише нәмә төҙөттө. Өлкән ағаһы Хәлфетдин ҡартаталарының йотона күсеп ҡайтты. Төҙәлөштәр һүнеп ҡалғас, ялланып эшләүгә күскән икенсе ағаһы Харрис та ауылда өй күтәрә башланы. Илдар ярҙам итте.

Ауылдаштарына хеҙмәттәре өсөн тейешенсә түләне. Инде ҡото китеп барған тыуған төйәге күҙгә күренеп үҙгәрҙе, кешеләрҙең йөҙө асылды, дәрте күтәрелде.

* * *

Зәйнулланың балалары әсәләренең етмеш биш йәшлек оло юбилейына берене лә ҡалмай йыйылды. Йәйҙең матур көнө ине.

- Күмәкләп Ҡурғыға менәйек, - тине Илдар туғандарына.

Тәҡдимде барыһы ла дәррәү хупланы. Ҡаяның иң бейек урынына Илдар тирә-яҡты ҡарап тороу өсөн махсус майҙансыҡ эшләткәйне бер йыл элек. Әсәләрен дә күтәреп мендерҙеләр бейеккә.

- Ризамын һеҙҙән, балалар, - тине Әклимә ҡарсыҡ күҙҙәрен һөртөп, күҙ күреме ергә һоҡланып бер килке ҡарап торғас. - Атайығыҙ менән йәш саҡта йыш менә торғайныҡ ошонда. Ҡартлығымда ла насип булды тағы бер күтәрелергә... Рәхмәт... Атайығыҙ рухына тап төшөрмәнегеҙ... Фатихамды бирәм барығыҙға ла...

Ҡая аҫтында Һаҡмар мәңгелек йырын сылтыратып һуҙҙы, Ҡурғыға серен һөйләне. Улар иркенлек өсөн бер-береһе менән көрәшкән дошмандар түгел, ә Урал тауының һөйөклө балалары, йәме һәм ғорурлығы икән.

Тәбиғәттә һәм ысын кеше тормошонда ваҡлыҡтарға урын юҡ шул...

**(Аҙағы. Башы 31-32-се һандарҙа).**

*САЛАУАТ ЮЛАЕВ ПРЕМИЯҺЫНА ТӘҠДИМ ИТЕЛДЕ*

# КҮКТӘРҘӘН БИРЕЛГӘН ТАЛАНТ

**Йомабикә Илъясова башҡорт шиғриәтендә яңы исем түгел. Әммә мин уның һәр яңы китабы биттәрен, хәреф танырға өйрәнеп кенә йөрөгән сабый кеүек, ҡыҙыҡһынып, һәр саҡ ниндәйҙер мөғжизә көтөп, серле яңылыҡтар эҙләп асам. Һәм һәр саҡ табыштарға осрайым. Бөгөнгө һүҙем сәйәсмән, ижтимағи эшмәкәр Йомабикә хаҡында түгел, ә бары шағирә тураһында.**



Янырак мин уның "Етегән" тип аталған китабын энәһенән-күҙҙән үткәреп, ентекләп уҡып сыҡтым. Һәм тағы ла бер ҡабат уның шағирәнә күңеленә хайран ҡалдым. Әйтергә кәрәк, шағирәнең ижадына ҡарата булған әүәлдән килгән ыңғай ҡарашым тағы ла ыңғайланды. Уның шиғырҙары тағы ла баҙыҡланған, тағы ла тәрәнәйгән, донъяға ҡарашы тағы ла киңәйгән, һәр хәлдә, Йомабикә яулаған кимәленән түбәнерәк төшмәгән, үҙ юғарылығында ҡалған. Уның тотош ижады ябай ғына күренештә лә фәлсәфә, образ тойоуға нигеҙләнгән, барлыҡ күңел хеҙмәте, зиһен эшмәкәрлеге шулай ҡоролған. Ул аҡыл һатмай, оҙон-оҙаҡ һүҙ сурытмай, үҙенең донъяға ҡарашын ябайҙан да ябай тормош деталдәре аша әйтеп бирә. Әйтәйек, бына ҡәҙимге япраҡ. Һәр кемебеҙ белгән-күргән ябай япраҡ. Ә уны нисегерәк уйната Йомабикә, төрлө-төрлө темаларҙа ҡуллана.

*Ағас япраҡтарға күмелгәндә,*
*Әсә имеҙгәндә баланы,*
*Яңғыҙлыҡ юҡ һөйөү булған ерҙә!*
*Бер нәмә лә түгел ҡалғаны.*

Был һөйкөмлө, йылы образға ул әле иң тәүге китабында уҡ мөрәжәғәт иткәйне. Был япраҡ хәҙер инде тағы ла баҙыҡланған, әллә күпме яңы үҙенсәлектәргә эйә булған, төрлөтөрлө темаларҙы яҡтыртыуҙа уңышлы ҡулланылған.

*Һис йөләмәй ағас япраҡтарын,*
*Түгелгәндә әсе көҙҙәрҙә.*
*Әйтерһең дә, йөрәк һуты менән*
*Яралтмаған яҙғы көндәрҙә.*

"Ньютон барҙың ғына серен аҫҡан. Шағирҙар ҙа шулай", тип яҙғайны әүәлерәк шағирәбеҙ. Ул бер ниҙе лә үҙе уйлап сығармай, булғандың ғына асылына төшөнөргә тырыша.

*Затлы һарайҙарың ары торһон*
*Һин барында, Шүлгән.*
*Бөйөк һының көҙгөләрҙән түгел,*
*Ҡарай төпһеҙ күлдән,*
*Үҙ күлендән, Шүлгән!*

Йомабикә Илъясова ла донъяға үҙ күңеле төптәренән баға. Шуға микән, ул тәрән ижадсыға әүерелә. Уның әҫәрҙәренең тукымаһы тәбиғи рәүештә тукыла, ижад фантазиһы хистәре ерлегенән үҫеп сыға. Ә ул хистәр пафостан азат, ниндәйҙер моңһоулыҡ атмосфераһына мансылған. Шиғырҙарында ул ҡәтғи ҙә, сая ла түгел, тып-тын ғына, үҙ-үҙе менән яңғыҙ ҡалып ҡына уйлана.

*Таң ҡалһам да берҡет, шоңҡарҙарға,*
*Ҡәҙерлерәк миңә һандуғас,*
*Хатта турғай,* - тип яҙа икән, был уның үҙе хаҡындағы дөрөҫлөгө. Шундай булғаны өсөн дә ошондай юлдарҙы ижад итә алғандыр, бәлки:

*Ҡасан ғына кәмер ҙә ай*
*Сабыйҙай йыуаш ҡалыр?*
*Тап шул мәлдә барса донъя*
*Тыныс йоҡоға талыр.*

Күрәһегеҙҙер, шағирә имен тормош хаҡында яр һалмай ғына бәйән итә. Үҙе оҫталыҡ түгелме ни был? Уның шиғри асылында тәбиғилек ярылып ята. Хатта патриотик шиғырҙарында ла. Әйтәйек, Башҡортостаныбыҙ тураһында кемдәр генә нисек итеп кенә яҙманы, Йомабикә был осраҡта ла үҙенә тоғро - самими булып ҡалды:

*Бында торналарға, бөркөттәргә*
*Халҡым рухы барып ҡушылған.*
*Елдәрендә ҡурай тауышы бар.*
*Ауазы бар унда ҡумыҙҙың,*
*Үләнендә - тәме ҡымыҙҙың.*
*Һәр бер йылға тарих булып аға,*
*Үктай сая һаман тулҡындар.*
*Был тәбиғәт - башҡорт бейеүендә,*
*Был тәбиғәт - башҡорт көйөндә.*

Ил тойғоһон да, ҙур тойғоно ла һәлмәк итеп, ышандырырлыҡ итеп әйтеп биргән дә шағирә!

*Ҡандай һуғыш, бола, ғәрәсәттәр*
*Быуаттарҙың хәлен алғанда*
*Болон ҡаплап үҫкән ябай сәскә*
*Донъяға йәм бирә һаман да.*

Ҡуҙәтеүсәнлек һәләте шағирәгә фекерен уҡыусыларына аңлайышлы итеп еткереү өсөн киң мөмкинлектәр аса.

*Умырзая кеүек ине улар,*
*Яуға киткән йәп-йәш һалдаттар.*
*Ҡалҡан булып дошман юлын киҫте*
*Кескәй сәскә, нескә һабаҡтар.*
*Иҫкә генә беҙҙе алығыҙ, тип*
*Һәр яҙ сәскә ата һымаҡтар.*

Бер ҙә генә лә имен булмаған хәҙерге дәүеребеҙгә лә ҡағыла был юлдар. Бөтә дәүерҙәргә лә. Ысын шиғырҙар бар дәүерҙәр өсөн дә, иҫкермәй ҙә, туҙмай ҙа улар. Йомабикә "бер кемгә лә түгел тыныс, илдәр ҡындан һура ҡылыс" тип имен булмаған осоробоҙҙо ҡылыҡһырлаһынмы, "уңалмаған ер батырҙарҙан алған яраларҙан" тип, һуғыш темаһын күтәрһенме, "йөрәк тибешемдә илем икән" тип раҫлаһынмы, "етегән тигән ете йондоҙ ете һыбайлыһы күктең, Уралым тип Парижға, Берлинға еткәндәрҙең маяҡтары" тип уйланһынмы, барыһы ла күңел ҡылдарына ҡағылмай ҡалмай. Бөйөк шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич хаҡында:

*Ул үткәндә ҡала алмай*
*Алға әйҙәп барыусы зат.*
*Быуат үтте. Уның һымаҡ*
*Шағир, бәлки, тыумаҫ ҡабат.*
*Бабич йәшәй күңелдәрҙә*
*Булып набат, булып һабаҡ,* -

тигәнендә йомоҡ Йомабикәнең асыҡлығына ла ышана башлайһың. Шағирә үҙ ижадын:

*Шиғырҙарым минең үҙем кеүек,*
*Сәхнәләргә сыға торған түгел,* -

тип ҡылыҡһырлай икән, бында ла дөрөҫлөк бар. Сөнки уға тын уйланыу, шым фекерләү хас. Әммә был шымлыҡтың һәр төрлө һөрәндән көслөрәк икәнен күрмәү мөмкин түгел. "Уй уй булырҙан да алда хис кенә булған" тигән К. Станиславский. Йомабикә Илъясованың да эш ҡоралы хис, әммә тыныс, һалмаҡ көй кеүек, һәлмәк хис.

*Шатлығымда күҙ йәше бар,*
*Йылмайыу - һағышымда.*
*Тик бер генә теҫтә түгел*
*Миҙгелдәр ағышы ла.*
*Рәхмәтлемен йылы һүҙгә,*
*Нур бөркөлгән ҡарашҡа,*
*Кисерәм, ышанмаһам да,*
*Әгәр кемдер алдашһа.*
*Донъя һәр саҡ шулай булған,*
*Бөрәү ҙә түгел изге.*
*Хатта күктәге айҙа ла*
*Ниндәй ҙур ҡара тимгел!*

Был юлдар шағирә шәхесенең асылын аса һымаҡ. Ул шәхес һығылмалы, бөгөлмәле, һыныусан түгел, иҫән ҡалыусан, йәшәүсән... Шуның өсөн дә ул донъяға һәм үҙенә күп һораулар ҡуя, ғазапланып дөрөҫ яуаптар эҙләй, үҙенең камил булмағанлығын да таный.

*Аңлап микән, аңныҙлығым менән*
*Ҡылынғандыр, бәлки, хаталарым.*
*Ҡайны сакта көсөм етмәгәндән*
*Белә күрә лә шул хаталандым,*
*Белә күрә упкын буйлап барҙым,*
*Аша һикерергә көсөм юҡтан.*
*Йәшәй алғаныма йәшәй бирәм....*
*Тормош! Мин бит түгә... һинән ҡурҡтым.*

Ошолайтып әйтә алғас, бик ҡыйыу ҙа, ахыры, шағирәбеҙ. Дөрөҫөн генә әйткәндә, Йомабикә Илъясова ижады уның донъя тураһында фәлсәфәүи уйланыуҙарына ҡоролған. Шағирә был ҡанундарҙы тәрәндәнерәк аңларға, төптәнерәк асыҡларға тырыша. Ә ҡанундар бихисап, барыһын да аңлап бөтөү өсөн бер ғүмер етмәҫ кеүек. Тәбиғәт, кеше ҡанундары, рухи, физик ҡанундар, выждан, иманһыҙлыҡ ҡанундары, үлемһеҙлек, һәләкәт ҡанундары... Дөрөҫлөктө образ белә, тип әйтмәксемен. Аң етмәгән ергә ул етә. Шағирҙар булдыра ала был эште. Донъяны аңлау улар ҡулынан килерҙәй һөнәр. Йомабикә Илъясова шул ҡанундарҙы асыу өсөн образдар эҙләп таба. Таба ла уҡыусыларының йән ишектәрен шаҡый. "Ауыл" тигән шиғырында ул былай яҙа:

*Һәр бер шаҡыуға ул ишек аса.*
*Аса төнөн. Аса көндөҙөн.*
*Сәйен янай, балын, майын ҡуя,*
*Һәм һорамай кемдең кемлеген.*
*Уйламай ҙа быны изгелек тип.*
*Борондарҙан килә был ғәҙәт*
*Бөйөклөгө менән һоҡландыра*
*Ихласлыҡтан тыуған был ғәҙәт.*

Асыҡ күңеллелекте данлай шағирә. Ысынлап та, уйлай китһәң, парашют бит асылһа ғына һикереүсе иҫән ҡала ала, асылмаһа - үлем! Халҡыбыҙ, бәлки, тап ошо асыҡ күңеле өсөн генә һаман иҫәндер, һаман донъяларҙа йәшәп яталыр?

Йомоҡ Йомабикәнең шар асыҡ күңеле ярылып ята шиғырҙарында. Ул инде күптән ҡабырсағынан сыҡҡан тере, үҙаллы йән. Кеше бурысы ошо йәндә һаҡлау, үлтермәү, иҫән итеү түгелме ни? Йән кешегә күктәрҙән бирелгән бүләк. Ул яҡты, нескә, мөхәббәттән хасил, кешегә именлек, бөтөнлөк тойғоһо бирә.

*Бөтөнлөгөн һаҡла күңелеңдең,*
*Камиллығын һаҡла көндәрҙең.*
*Кешеләрҙең яҡшыһына һоҡлан,*
*Гүзәллеген той һин гөлдәрҙең.*

Был ябайҙан да ябай юлдарҙа ҡатлы-ҡатлы хаҡлыҡ ята.

Кеше тәбиғәт ҡанундарын боҙмаҫҡа тейеш. Бер генә кейек тә уны боҙмай. Кеше генә боҙа. Шуға ла ул гонаһлы. Үҙен тәбиғәткә ҡаршы ҡуйған өсөн яҙыҡлы кеше. Был иһә һәләкәткә бәрәбәр. Йомабикә һәләкәт яҡлы түгел, йәшәйеш яҡлы.

*Йәйге иртә. Көндөң сабый сағы.*
*Саф ысығы. Өмөт тулы таңы.*
*Тик яҡшылыҡ ҡына булһын өсөн*
*Кешегә ни етмәй тағы?*

Һорау бушҡа ҡуйылмаған. Уны тормош үҙе ҡуйған. Шағирә был һорауҙы бары тотоп алған.

Заманында Муса Гәли Йомабикә Илъясова шиғриәтенә ҡарата: "Ул образдың тап үҙенең иҫәп-самаһына тура килгәнен таба", - тип яҙғайны. Ысынлап та шулай, Муса ағайҙың әйткәненә ҡушылам. Иғтибар ғына итә күрегеҙсе, "океан ҡапыл илаһилыҡ тойҙо" тип яҙҙы бер саҡ Йомабикә, ошолай тип әйтә алыу өсөн ниндәй самалар кәрәк?

*Ҡыуаныс һай. Әҙәм балаһында*
*Ғәләм таң ҡалырлыҡ тәрәнлек бар!*

Былар ҙа Йомабикә шиғырынан ғәжәйеп юлдар. Күңеле - күҙле, йөрәге ҡолаҡлылар өсөн улар. Уҡыусыларың күңелендә илаһилыҡ уяткан юлдарың өсөн рәхмәт һиңә, шағирә. Алиһә! Һин ысынлап та баһаланыуға хаҡлы.

**Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА,**
**шағирә, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КӨЛӨП ДАУАЛАН

■ Сардиния уртауы - Италияның автономлы өлкәһендә йәшәүселәр йөҙ йәште үтеүселәре күп булыуы менән рекорд ҡуя. Фән әлегә быны сәбәбен асыҡлай алмай. Шулай ҙа күптән түгел Британияның биотехнологик компанияларының береһе Сардинияның көнсығышында урынлашҡан тарихи район Ольястра халҡын тикшереп ҡарарға булған. Унда оҙон ғүмерлеләр иҫәбе бөтөн донъя менән сағыштырғанда биш тапҡырға күберәк икән. Ғалимдар ғүмер оҙайлығына генетик факторҙарҙың һәм тирә-яҡ мөхиттең тәьҫирен өйрәнмәксе. Элегерәк бында көн күргән халыҡтың башлыса йәшелсә, емеш-еләк һәм балыҡтан торған сәләмәт аҙыҡ-түлек менән туҡланыуы уларҙы оҙон ғүмерле итә, тип иҫәпләйҙәр ине. Был продукттар файҙалы матдәләргә бай, уларҙа май күп түгел. Әммә быға ышанып булмай, ти белгестәр, сөнки был диета күп илдәрҙә популяр, тик улар оҙон ғүмер менән маҡтана алмай.

■ Бөгөн ауырыуҙарҙы нисек кенә дауаламайҙар. Мәҫәлән, Новосибирск ғилми-тикшеренеү институты ғалимдары алкоголизм, наркомания, депрессия менән яфаланған, үҙ-үҙенә ҡул һалырға маташыусыларҙы сыбыҡ менән ярырға тәҡдим итә. Бындай психосоматик ауырыуҙар йәшәү дәрте һүнгәндәрҙә барлыҡҡа килә. Әҙерәк "туҡмап" алғандан һуң кешелә эндорфин рецепторҙары әүҙемләшә һәм "бәхет гормоны" күпләп бүленә. Белгестәр нисек итеп һуғырға ла өйрәтә - "йомшаҡ" ергә 60 тапҡыр шыйыҡ сыбыҡ менән 30 көн дауамында һуғырға кәрәк. Был ысулды тәҡдим итеүсе, биология фәндәре докторы Сергей Сперанский үҙе ошо рәүешле депрессиянан һәм ике тапҡыр кисергән инфаркт эҙемтәләренән ҡотолған. Һимеҙлек менән яфаланыусыларға солитер йоморҡаһы йоторға тәҡдим итәләр. Солитер эсәктә йәшәүсе оҙонлоғо 10 метрға еткән селәүсен. Ул кеше ашаған нәмәләр менән туҡлана. Йылы нефть тултырылған ванналар быуындар һыҙлауынан ҡотҡара, ти. Артритты Әзербайжандың Нафталан ҡалаһы санаторийҙарында шулай дауалайҙар. Шулай ҙа АҠШ-та нефть ванналары составында канцероген бар тип иҫәпләйҙәр. Рельстар ҙа дауалай, дөрөҫөрәге уларҙан бүленеп сыҡҡан электромагнит тулҡындар. Был ысулды Индонезияла йәшәүсе таксист уйлап тапҡан. Өлөшләтә фалиж һуҡҡас, ул поезд аҫтында ҡалыу маҡсаты менән рельсҡа ятҡан. Тик токтан һуғылып, аяҡҡа баҫҡан. Хәҙер уның кәңәшен күптәр ҡабатлай икән. Шулай ҙа иң файҙалы ысул - көлөү, ти белгестәр. Ул стресс булдырмай, йөрәк һәм ҡан тамырҙары эшен, матдәләр алышыныуҙы яҡшырта, ғүмерҙе оҙайта. Дарыуҙар һатып алып дауаланырға аҡсағыҙ булмаһа, ҡысҡырып көлөгөҙ, һауыҡҡанығыҙҙы һиҙмәй ҙә ҡалырһығыҙ.

■ Америка психологтары етештереүселәр сәләмәтлек өсөн файҙалы һәм түбән калориялы тип рекламалаған ризыҡтарҙы күп ҡулланмаҫҡа кәңәш итә. Эксперименттарҙа йөҙҙән ашыу кеше ҡатнашҡан. Фильм ҡараған мәлдә уларға "файҙалы" печенье тәҡдим итәләр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, әгәр ҙә үҙен дөрөҫ туҡланам тип уйлай икән, кеше күберәк ашай икән. Магазинда ла йышыраҡ "сәләмәт туҡланыу" тигән яҙыуға иғтибар итәләр. Әммә ризыҡтың калорияһын берәү ҙә иҫәпләп тормай. Был иһә һимереүгә алып килеүе бар.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# УЙЫЛДАН МӘЗИН



*"Аллаһ юлында үлтерелгәндәрҙе "үлек" тип әйтмәгеҙ. Улар тере, тик һеҙ быны һиҙмәйһегеҙ". Әл-Бәҡара сүрәһе, 154-се аят.*

**Бала саҡтағы ошондай бер мәл хәтерҙә ҡалған: өләсәйем кем менәндер һөйләшеп ултырғанда, әүлиә кеүек кешенән дә ғәйеп табырҙар икән, ул ниндәй халыҡ дошманы булһын инде, тип әрнеп әйтеп ҡуйҙы. Мин, өлкәндәрҙең һүҙенә ҡыҫылып, кем ул халыҡ дошманы, әле ҡайҙа ул, тип ныҡыша башлағас, өләсәйем: "Тауышланма, мәзин бабай ине ул, алып киттеләр ҙә, кире ҡайтманы, һыуға төшкән кеүек ғәйеп булды", - тине.**

Аҙағыраҡ әсәйем мәзин бабай тураһында төрлө хикмәтле хәлдәрҙе ҡыҙыҡ итеп һөйләп ала торғайны. "Әҙәм ышанмаҫлыҡ" булғанғалыр инде, улар теүәл генә хәтерҙә ҡалмаған. Береһе генә ныҡлы иҫтә: имеш, мәзин бабай таң мәлендә мәсеткә аҙан әйтергә килгәндә уны мосолман ендәре ҡаршы ала торған булған. "Ендәр ҙә мосолман буламы икән ни?" тип, бик ғәжәпләнгәйнем шул ваҡытта. Йәл, ваҡытында ныҡлап ҡыҙыҡһынмағанбыҙ. Хәҙер инде Уйылдан мәзинде иҫләгән ҡарттар ҙа ауылыбыҙҙа ҡалмаған. Йыйылған мәғлүмәттәрҙән шулар ғына билдәле:

Уйылдан Ваһап улы Исхаков 1882 йылда Дәүләкән районы Мерәҫ ауылында тыуған. 1904-1905 йылғы рус-япон һуғышында ҡатнаша, унан яраланып ҡайтҡандан һуң, Ауырғазы районының Төрөмбәт ауылы мәсетендә дин эштәрен алып бара, мәзин булып тора. 1937 йылда ҡулға алынып, "халыҡ дошманы" тигән мөһөр менән атыуға хөкөм ителә. Ҡатыны Ҡунаҡбикә алты бала менән Төрөмбәт ауылында яңғыҙы тороп ҡала.

Өфөлә йәшәүсе Зәки ағай Ҡунаҡбаев иҫән сағында шуларҙы һөйләгәйне: *"Мин бәләкәй ваҡытта әсәйем, нимәнәндер ҡурҡып шикелле, бик ныҡ ауырыны. Уйылдан мәзин килеп өшкөргәс, шундуҡ терелеп киткәне хәтерҙә. Бер ваҡыт өйҙә шыпырт-шыпырт ҡына һөйләшәләр. Уйылдан мәзинде алып киткәндәр икән, тип. Ғаиләһен - ҡатыны Ҡунаҡбикә әбейҙе алты балаһы менән өйҙәренән ҡыуып сығарып, тауыҡ кетәгендәй генә бер өйгә индергәндәр. Әүезәр исемле улдары менән бер класта уҡыныҡ, ныҡ интегеп йәшәнеләр. Ашарҙарына ла юҡ ине, кейем тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. Уйылдан мәзинде ҡулға алғас, әйткәндәр: "Алланан баш тарт, баш тартһаң, ҡотҡарабыҙ". Бабай риза булмаған. Алырға килгәс, уны яҡлашып: "Ул бит бер ғәйепһеҙ кеше, ул ниндәй халыҡ дошманы булһын, ебәрегеҙ", - тип кереп әйтеүселәр булған. "Ҡыҫылып йөрөмәгеҙ, үҙегеҙҙең башығыҙ китер", - тип уларҙы ҡурҡытып сығарғандар".*

Уйылдан мәзиндең иң кесе улы, Белорет ҡалаһында йәшәүсе Әхмәт Исхаков атаһын бөтөнләй хәтерләмәй, уға ул саҡ йәш ярым ғына була: *"Атайым япон һуғышынан яраланып ҡайтҡан. Шунан ул мәсеттә дин эштәре менән шөғөлләнә. Уның тураһында бик һорашып булманы. Ул ваҡытта беҙҙең арала "тайный агент" бар ине. Әсәйем дә: "Күп һөйләнмә лә, һорашма ла", - ла тип әйтә ине. Шуны ғына һөйләгәне булды: ҡулға алырға килеүселәр, динеңдән ваз кис, һиңә бер нәмә лә булмаҫ, тигәс, мин Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан юлдан тайпыла алмайым, тип әйткән атайым. Ул ваҡытта ҡайһы бер муллалар Тажикстан яҡтарына китеп ҡотолғандар. Әсәйем, әллә беҙ ҙә сығып китәйекме, һине тыныслыҡта ҡалдырмаҫтар ул, тигәс, атайым, мин бер ҡайҙа ла китмәйем, ни яҙған - шул булыр, тигән".*

"Халыҡ дошманы" балалары тигән мөһөр Исхаковтарҙы ғүмер буйы эҙәрлекләй, алты баланың да тормошон боҙа, уларҙың йөрәгенә төҙәлмәҫлек яра һала. Үҙенең бала сағы, апай-ағайҙарының яҙмышы тураһында Әхмәт ағай күҙ йәшһеҙ һөйләй алмай: *Беҙҙең балалыҡ булманы инде ул... Һуғыш йылдарында Әүезәр ағайым менән күрше ауылда көтөү көттөк. Миңә алты йәш, ағайыма 12 йәш ине. Ике ағайым - фронтта. 9-сы йәш киткәндә октябрь айында мин 1-се класҡа уҡырға барҙым. Иң артҡы партаға ултыртып ҡуйҙылар... Ә Әүезәр ағайым, көтөүҙән бушағас, 15-е лә тулмаған көйө Донбасҡа күмер сығарырға китте. Өс йыл шахтала эшләп, армияға алынды, һуңынан Үзбәкстанда йәшәне, шунда вафат булды. Өлкән ағайыбыҙ Мәхмүт һуғыштан ҡайтманы - ҡара ҡағыҙы ғына килде. Ғилман ағайым фронттан һыңар ҡулын юғалтып ҡайтты. Ауылда өс йыл һалым агенты булып эшләне. 1948 йылда ғаиләбеҙ яңы тетрәнеү кисерҙе- көтмәгәндә бер ғәйепһеҙ ағайыма нахаҡ бәлә яҡтылар... Төрөмбәт ауылында бер бәндә бар ине, ағайым менән дуҫ булып йөрөнө, аҙаҡтан да ул халыҡтың ҡанын эскән, тиҙәр - шул минең Ғәбиҙә тигән апайыма үс итеп (уға кейәүгә сыҡмаған өсөн), Ғилман ағайымдың документтарын алып үҙгәртә. Фронтовик ағайымды, 15 мең һум аҡсаны үҙләштергән, тип, 15 йылға төрмәгә ябалар..."*

Шулай итеп, Исхаковтарҙың, шул иҫәптән ике сабый - Әхмәт менән Әүезәрҙең көтөү көтөп тапҡан барлыюҡлы мал-мөлкәтен хөкүмәт яңынан тартып ала. Ғаилә йәнә бер нәмәһеҙ, ас-яланғас тороп ҡала... Ғилман ағайҙы төрмәлә туғыҙ йыл ултырғандан һуң, биш йыл Башҡортостанда йәшәмәҫкә, тигән шарт менән иреккә сығаралар, шунан ул Үзбәкстанға китә. Әхмәт ағай 60-сы йылға тиклем Төрөмбәттә йәшәй. Көнө-төнө колхозда эшләй, ауырыу әсәһен яңғыҙы ҡарай. Әсәһе үлгәс, бында уны бер ни ҙә тотмай - ул да, ағай-апайҙары һымаҡ, тыуған ауылы менән бөтөнләйгә хушлашып, Үзбәкстанға сығып китә. Шунда ғаилә ҡора. Һуңынан, донъялар үҙгәреп киткәс, туғандар яңынан Башҡортостанға күсеп ҡайта. Бөгөн алты бер туғандың береһе генә, Әхмәт ағай ғына иҫән. Уның балаларына, шулай уҡ ағай-апайҙарының балалары-ейәндәренә бәхетле яҙмыш насип итһен Хоҙай Тәғәлә. Оло йөрәкле Уйылдан әүлиәнең вариҫтары икәндәрен онотмаһындар... ...Исхаковтарҙың аяныслы яҙмышын, сабый саҡтағы михнәттәрен күҙҙән үткәргәндә ирекһеҙҙән шундай уйҙар килә: әгәр янда атай кеше булһа, уларҙың тормошо, моғайын, бөтөнләй башҡа юҫыҡтан китер ине. Ә бит был мөмкин булған - Уйылдан ҡарт икенсе юлды ла һайлай ала ине... Уға фәҡәт "Динемдән баш тартам" тигән өс кенә һүҙ аҫтына ҡултамғаһын ҡуйыу кәрәк булған. Ундай муллалар ҙа булған. Уларҙың ғаризаларын шунда уҡ матбуғатта баҫып сығарғандар. Балалары хаҡына шулай эшләргә мәжбүр булған улар. Ә ни өсөн Уйылдан мәзин икенсе юлды һайлаған? Ни өсөн алты балаһы, ҡатыны мөлдөрәп ҡарап торғанда ла, исем өсөн генә булһа ла (уның йөрәген берәү ҙә асып ҡарай алмай бит), баш тартмаған ул диненән? Әгәр ҡатынының, ғәзиз балаларының уның арҡаһында ошо ҡәҙәре михнәт сигерен белгән булһа, диненән баш тартыр инеме икән? Хәйер, ниҙәр булырын әүлиәүи зат белмәгән тиһеңме ни. Тик ул башҡаса булдыра алмаған. Сөнки иманы көслө була. Ошо өс көнлөк донъя өсөн Аллаһы Тәғәләгә тел тейгеҙә, хыянат итә аламы һуң ундай кеше! Йыуаш ҡына ине, тиҙәр уны, ә иманы ҡайһылай ҡеүәтле булған! Иманын ул бер нәмәгә лә алмаштырмаған!

Әгәр әүлиәнең ҡәбере билдәле булһа, унда күптәр зыярат ҡылыр ине... Олатаһының атылған урынын, ҡайҙа ерләнгәнен белергә теләп, Өфөлә йәшәүсе ейәне Ғәзиз Ғилман улы Рәсәй Именлек хеҙмәтенә хат яҙа. Уға ошондай яуап килә: "...Согласно материалам архивного уголовного дела, Исхаков В.В. арестован 5 августа 1937 г. Обвинялся по ст. 58 п.8 УК РСФСР: "...за проведение контрреволюционной пропаганды и распространение провокационных слухов о войне..." С 14 августа1937 г. содержался в Уфимской тюрьме. Решением тройки НКВД БАССР № 15 от 28 сентября 1937 г. приговорен к высшей мере наказания - расстрелу. 13 октября 1937 г. приговор приведен к исполнению в г. Уфе. Место приведения приговора в исполнение в деле не указано. Установить точное местонахождение захоронения не представляется возможным, в связи с отсутствием каких-либо сведений в материалах архивного уголовного дела..."

Был донъянан Аллаһ юлында шаһит булып киткән Уйылдан мәзин. "Шаһиттарҙы, үлгән, тип әйтмәгеҙ, улар һеҙгә доға ҡыла", тиелә Бәйғәмбәребеҙ хәҙисендә. Ләкин мәрхүмдәр бит үҙҙәре лә беҙҙең хәйер-доғаларға мохтаж. Онотмайыҡ уларҙы, ауылыбыҙҙың һуңғы мәзине Уйылдан олатайҙы ла иҫкә алайыҡ, Ҡөрьән мәжлестәрендә уның рухына аят-доғалар бағышлайыҡ. Шул сағында беҙ ҙә әүлиә доғаһында булырбыҙ. Һәм... бәлки, тап уның доғалары менән ауылыбыҙ өҫтөндә яңынан аҙан тауышы яңғырай башлар. Амин, шулай булһын!

**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

АУЫЛЫМ




# БЕР КҮРЕШЕҮ - ҮҘЕ БЕР ҒҮМЕР

**Ауырғазы районы Түрһәгәҙе ауылында үткән "Туғандарҙың ҡәҙерен беләйек" шәжәрә байрамы туғанлыҡ тамырҙарын барлатты, күп йылдар осрашмаған туғандарҙы, синыфташтарҙы осраштырҙы.**

Тарихи сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәт буйынса, Түрһәгәҙе бик боронғо ауыл һәм унда йәшәүселәр меңле ырыуынан. Меңле ырыуына ҡарағандар был тирәлә ун ике йорт (ауыл) булған - Маянған, Мырҙағол, Сумар (Абдрахман), Мораҙым, Болаш, Түрһәгәҙе, Ташбаш, Дүрттояҡ (Яңы Этекәй), Дөйәбатҡан, Абдулла (хәҙерге Юлдаш ауылы), Төрөмбәт, Берикмәк. Улар Ағиҙел буйындағы Аҡкүл күленән алып хәҙерге Әлшәй районына ҡараған Оло Дүрткел тауына тиклемге ерҙәрҙе биләгән. Борон Түрһәгәҙе халҡы яҙ етеү менән йәйләүгә сығып, Аҡкүл күленә тиклем барып етеп, көҙ еткәс кенә әйләнеп ҡайтыр булған. Иген сәсмәгәндәр. Ит, һөт, ҡатыҡ, ҡымыҙ, ҡорот, көл күмәсе, икмәк урынына мал бауыры ашағандар. Һуңыраҡ Украинанан килеп, ер һатып алып йәшәй башлаған күскенселәрҙең иген сәсеүен, йәшелсә-емеш үҫтереүен күреп, бындағы аҫабаларҙың да игенселек менән шөғөлләнә башлауы билдәле.

...Түрһәгәҙе йылғаһы буйындағы байрам үтәсәк аҡланда, таллыҡ буйлап теҙелеп киткән тирмәләр янында күңелле йыр-моң, дәртле гармун, моңло ҡурай яңғыраны. Биш ғаилә үҙҙәренең шәжәрә ағасын күренеп торған урынға урынлаштырыу менән мәшғүл. Ҡаҙандар аҫылған, самауырҙар ҡайнай. Һәр кемдең байрамға ихлас әҙерләнгәне күренеп тора: тирмәләр еренә еткереп биҙәлгән, ҡул оҫталарының эштәренән, боронғо көнкүреш кәрәк-яраҡтарынан күргәҙмәләр йәйелдерелгән. Ә өҫтәлдәрҙә ниндәй генә һыйхөрмәт юҡ! Халҡыбыҙҙың һоҡланғыс ҡунаҡсыллығы, аш-һыуға оҫта хужабикәләрҙең таланты бына шунда сағыла ла инде.

Ауылдаштарын, саҡырылған ҡунаҡтарҙы Һабанаевтарҙың, Һатлыҡовтарҙың, Шәмсетдиновтарҙың, Раяновтарҙың һәм Йәғәфәровтарҙың ғаиләләре ҡаршыланы. Кемдер гармун тартып, кемдер ҡурайҙа һыҙҙыртып, йырбейеүҙәр менән, бауырһағын тәмләргә, ҡымыҙҙан ауыҙ итергә тәҡдим итеп, килеүселәрҙе тирмә эсенә әйҙүкләнеләр. Һабанаевтар үҙҙәренең ата-бабалары, Меркет-мең олоҫоноң йөҙ башы Ишемғол бабалары менән ғорурланыуын белдерҙе. Һатлыҡовтар иһә ауылдағы иң боронғо, ҙур нәҫелдәрҙең береһе булыуын нигеҙләне. 1795 йылдағы V ревизия материалдарында ла Һатлыҡовтарҙың Түбәнге Түрһәгәҙелә йәшәүе билдәләнгән. Был хаҡта Өфө ҡалаһында уҡытыусы булып эшләүсе Элмира Ғәзизова: "Таңһылыу Кусимованың һәм Светлана Бикҡолованың "Башҡорт исемдәре" (Өфө, "Китап", 2005) тигән һүҙлегенән сығып фекер йөрөтһәң, һатлыҡ - һатып алынған тигәнде аңлата. Борон бала тормағанда баланы һатып алыу йолаһы булған. Үҙ ата-әсәһе балаһын икенсе кешегә биреп, кире үҙенә һатып алыр булған. Ундай балаға Һатлыҡ тип исем ҡушҡандар. Бәлки, беҙҙең нәҫелдә лә ошо йола башҡарылғандыр һәм Һатлыҡовтар нәҫеле шулай башланып киткәндер, - тип һөйләне.

Түрһәгәҙе ауылының, был төбәктә йәшәгән башҡа башҡорт ауылдарының тарихы бик бай һәм үҙенсәлекле икәне, ул хаҡта Ауырғазы районы хакимиәтенең элекке башлығы, хәҙер иһә баҡыйлыҡҡа күскән ил уҙаманы Марат Баязит улы Ишемғоловтың китап яҙыуы тураһында район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Фәүзиә Юлманова ла әйтеп үтте. "Марат Баязит улы тыуған ауылы өсөн дә, районыбыҙ өсөн дә януп-көйөп эшләне, уның үҫешенә тос өлөш индерҙе. Ауылға йәм биреп торған матур социаль-мәҙәни үҙәк - уның иҫтәлеге булып ҡалды. Кескәй тыуған төбәгегеҙҙе ул ярата белгән кеүек яратығыҙ, һаҡлағыҙ, үҫтерегеҙ", - тине Фәүзиә Ғәли ҡыҙы.

Таштамаҡ ауыл хакимиәте башлығы Минсара Федорова ошо байрамды үткәреүгә өлөш индереүселәргә, бағыусыларға - Стәрлетамаҡ урман хужалығы етәксеһе В. Сәғәҙиевҡа, "Ауырғазыстройсервис" йәмғиәтенең генераль директоры Р. Бикмәтовҡа, эшҡыуарҙар М. Үтәғоловҡа, Зөфәр һәм Фидаил Ҡаһировтарға рәхмәт белдерҙе. Артабан иһә, шәжәрәләрен тәҡдим иткән ғаиләләр ҙә, ат сабышында ҡатнашыусылар ҙа, ауылдың матур ғаиләләре лә ошо бағыусылар әҙерләгән бүләктәрҙе алып ҡыуанды.

Әйткәндәй, ошолай бер-береһенең күңелен күреп, бер-береһенең бәләкәй генә уңыштарын да күтәрмәләп йәшәгән ауылдар һоҡландыра. Үҙенең нәҫел тамырҙарын өйрәнеп, данлы ата-бабаларына лайыҡлы булып йәшәргә ынтылған кешеләр һоҡландыра.

**Рәүилә БАРДЫБАЕВА.**

ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

# МАТУРЛЫҠ ЭҘЛӘП БАРҒАЙНЫҠ...



**Хәҙер төрлө темаға арналған күргәҙмәләр бик йыш булып тора. Әхирәтем менән мин дә косметика буйынса уҙғарылғандарының береһенә барып ҡайтырға булдыҡ. Көн буйына йөрөп арығас, ултырып, ял итеп алырға булдыҡ. Эргәбеҙгә бер ҡатын килеп ултырғас, һүҙ артынан һүҙ сығып, аралашып киттек.**

Күптән түгел генә ул Ҡытайҙан ҡайтҡан икән. Рәсәйҙә уның бер бөйөрөн алырға тигән вердикт сығарғандар, ә ҡытайҙар көн һайын иртән, организм элекке хәленә ҡайтҡанға тиклем, һарымһаҡ имергә ҡушҡан. Ванга ла бит "Ерҙә һарымһаҡ булғанда, ер йәшәйәсәк", тип юҡҡа ғына әйтмәгән. Һарымһаҡты йоҡаҡ ҡына итеп турап, уны биш минутҡа һалып ҡуябыҙ ҙа, һуңынан ҡабып, һутын һурабыҙ. Төкөрөк ҡанға эләгеп, тамырҙарҙы, лимфаны таҙарта, ауыҙ ҡыуышлығы, теш ҡаҙнаһы нығына. Ауыҙ эсе янмаһын өсөн бер пластинка һарымһаҡтан башлап, бер тырнаҡҡа тиклем еткерергә мөмкин. 30 минут имергә лә, һуңынан төкөрөргә кәрәк. Ауыҙҙан еҫ сыҡмаһын тиһәгеҙ, иртәнге ашты ашарға һәм теште таҙартырға, кофе ярмаһы, петрушка япрағы сәйнәргә була.

Яңы танышыбыҙ аңлатыуынса, һарымһаҡты күпләп ашаһаң, ул аппетитты аса, сөнки һуты тура ашҡаҙанға төшә, ә имгән ваҡытта һут ҡанға эләгә икән. Бындай алымды киҙеү эпидемияһы алдынан ҡулланғанда, етди эҙемтәләрҙән һаҡланып ҡалырға мөмкин.

Бына шулай, матурлыҡ эҙләп барған ерҙә осраҡлы ғына осрашыу сәләмәтлегебеҙҙе нығытыу алымы табырға ла ярҙам итте. Иң мөһиме - был ысулды әлегәсә бер ҡайҙа ла ишеткәнем юҡ ине.

**Әлиә ЙӘНТҮРИНА.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Ижади көс

**Төпкө аң - автоматик ижади механизм.** Төпкө аңығыҙҙы аңлы рәүештә һайлаған теләһә ниндәй ғәмәлде башҡарырға өйрәтә алаһығыҙ. Пианистың нисек итеп оҫта уйнауын күҙәтеп, уның камиллашыу моделен төпкө аңда формалаштырыуына шикләнмәһәгеҙ ҙә була. Уның төпкө аңы был турала иҫләй һәм аңлы рәүештә ниндәй клавишаға баҫырға икәнлеген уйлап тормаҫ өсөн, төпкө аңдағы мәғлүмәтте азат итә. Төпкө аңығыҙ - аңығыҙ яңғыҙы ғына үҙгәртергә тырышҡан тормошоғоҙҙо тиҙ арала үҙгәртергә һәм проблемаларығыҙҙы хәл итергә һәләтле автоматик ижади механизм ул. Ул бер нәмә менән дә сикләнмәгән, шуға күрә уны өйрәтергә һәм ҡабаттан уҡытырға мөмкин. Хыялығыҙҙа нимәлер һүрәтләгән арала, маҡсатты табыуға программаланған төпкө аңығыҙ хаталарҙы онотоп, йүнәлеште үҙгәртеп, үҙен дөрөҫләп, һеҙҙе маҡсатығыҙға автоматик рәүештә алып сығасаҡ.

**Һеҙҙең бөтөн нәмәгеҙ ҙә бар.** Төпкө аңдың көсөн ирекка сығарыу сере - үҙ-үҙенде уның эшләүенә ышандырыу. Һеҙ һуңғы һөҙөмтәне һүрәтләргә тейешһегеҙ. Теләгәнегеҙҙе алыуығыҙға ышанығыҙ. Уның һеҙҙә булыуына инанып, ҡыуаныс һәм шатлыҡ кисерегеҙ. Һүрәтләү процесында сикле аңығыҙ интеллект ярҙамында һеҙгә ҡамасауларға тырышыр. Ул теләгегеҙҙең тормошҡа ашмаҫтай булыуына инандырырға тырышасаҡ. Ышанмағыҙ. Аңдан килгән мәғлүмәттең биш тойғо менән сикләнгәнен онотмағыҙ. Уның урынына эске төпкө аң системаһына ышанығыҙ. Әгәр яңы автомобиль алырға теләһәгеҙ, дилерға барып, брошюралар алып ҡайтығыҙ. Мөмкин тиклем йышыраҡ автомобиль фотоларын ҡарағыҙ, күргәҙмә салондарына йөрөгөҙ, һатып аласаҡ машинаны өйрәнегеҙ. Хыялығыҙҙа ғына уның менән идара итеүегеҙҙе күҙаллағыҙ. Үҙегеҙҙе ошо машина хужаһы кеүек тотоғоҙ. Әле генә, машина юлда, тиҙҙән килтереп еткерәсәктәр, тигән яңылыҡ алған кеүек ҡыланығыҙ. Автомобиль өсөн ниндәйҙер аксессуар алып ҡуйһағыҙ ҙа була. Алдан уҡ хыялланған нәмәләрҙең барыһы өсөн дә рәхмәт әйтегеҙ. Әгәр принциптың асылын аңлаһағыҙ, был сәйер тойолмаҫ. Әммә алдан рәхмәт белдереп, һеҙ теләгән нәмәгеҙҙең юлда икәнлеген таныйһығыҙ. Шуны ҡабул итеү менән урап алған шарттар үҙгәрә башлаясаҡ, сөнки һеҙ аңдың иң юғары үлсәменә ынтылаһығыҙ. Һеҙ магнетик тартыу торошондаһығыҙ.

## Һуңғы маҡсатты һайлау

Уңышлы һәм бәхетле тормош - үҙенде лайыҡлы ғүмер планын бойомға ашырыуға арнау ул. Әгәр тормошобоҙға маҡсат һәм йүнәлеш бирмәһәк, штурвал артында капитаны булмаған һәм маршрут картаһыҙ юлға сыҡҡан карап хәлендә ҡалырбыҙ. Бындай карап берәй утрау ярында һәләкәткә осраясаҡ йәки батасаҡ. Аныҡ ҡына ҡайҙа юл алғаныбыҙҙы белмәй тороп, бик күп мөмкинлекте юғалтабыҙ. Әгәр иғтибарлап ҡараһаҡ, йыһанда төҙөүҙең Генераль планын күрһәтеүсе аҡыллы Көс булыуын аңларбыҙ. Һәр нәмәнең урыны һәм йәшәү өсөн сәбәбе бар. Һеҙ ҙә был тормошта үҙ урынығыҙ менән тыуғанһығыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 15 АВГУСТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

04.00 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
08.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35, 15.15 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Улыбка пересмешника". Сериал (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.25 "Мужское/Женское" (16+).
17.10 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости.
18.20 "Давай поженимся!" (16+).
19.20 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро. Синхронное плавание. Дуэты.
21.00 "Время".
21.30 "Нюхач". 1-2 серии. Детективный сериал (16+).
22.30 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
23.30 "Нюхач". Продолжение сериала (16+).
00.30 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
01.15 "Модный приговор".
02.20 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
03.20 "Наедине со всеми" (16+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". "История болезни". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Письма на стекле". 1-4 серии. Сериал (12+).
00.50 "Каменская". Сериал (16+).
02.50 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.

### БСТ

**Профилактика на канале.**
**14.00 Новости недели.**
**14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Книга сказок" (0+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 20.15 "Полезные новости" (12+).**
**16.00 "У дачи" (12+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**17.15 "Личность" (12+).**
**18.00 "Бай бакса" (12+).**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.15 "Ай кызы". Сериал (12+).**
**19.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Нельсон Мандела. Один в поле воин!" (12+).**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**23.00 "Ирландец". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 А.Атнабаев. "Дети мои" (12+).**

## 16 АВГУСТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
00.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Улыбка пересмешника". Сериал (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости.
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Нюхач". 3-я и 4-я серии (16+).
23.30 "Прекрасный мир". Худ. фильм (16+).
01.40 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
02.40 "Скудда-у! Скудда-эй!" Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Скудда-у! Скудда-эй!" Продолжение фильма (16+).

### РОССИЯ 1

05.55 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.
07.00 "Утро России".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". "Выбор оружия". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Письма на стекле". 5-8 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Каменская". Сериал (16+).
02.50 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30 "Физра" (6+).**
**10.45 "Когда ее совсем не ждешь". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 17.45, 01.00 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.55 Хоккей. Кубок РБ. "Нефтехимик" (Нижнекамск) - "Металлург" (Новокузнецк).**
**16.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**17.15 "Орнамент" (0+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**18.55 Хоккей. Кубок РБ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Адмирал" (Владивосток).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Божьи коровки". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.315 Т.Миннуллин. "Счастье с неба" (12+).**

## 17 АВГУСТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

04.30 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
06.50 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Улыбка пересмешника". Сериал (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Нюхач". 5-я и 6-я серии (16+).
23.35 "Банда шести". Худ. фильм.
01.40 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
02.40, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.35 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.55 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.
07.00, 09.15 "Утро России".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". "Поклонники". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Письма на стекле". 9-12 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Каменская". Сериал (16+).
02.50 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.

### БСТ

**07.00 "Сәләм, Республика!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30 "Бауырһаҡ" (0+).**
**10.45 "Когда ее совсем не ждешь". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.55 Хоккей. Кубок РБ. "Адмирал" (Владивосток) - "Нефтехимик" (Нижнекамск).**
**16.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**17.15 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**18.55 Хоккей. Кубок РБ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Новокузнецк).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Неприкасаемые". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Т.Гарипова. "Убежавшие в счастье" (12+).**

## 18 АВГУСТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Улыбка пересмешника". Драматический сериал (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Нюхач". 7-я и 8-я, заключительная, серии (16+).
23.40 "Беглый огонь". Боевик (12+).
01.40 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
02.45, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.35 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.55 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.
07.00 "Утро России".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". "Кто есть кто". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Письма на стекле". 13-я-16-я, заключительная, серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Каменская". Сериал (16+).
02.50 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 17.15 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**10.30 "Преград.net" (6+).**
**10.45 "Когда ее совсем не ждешь". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Борсаҡ" (0+).**
**15.15 "Семәр".**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 18.00, 20.45 "Полезные новости" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Ай кызы". Сериал (12+).**
**19.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Уфа-форум" (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Двойник". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "И.Юмагулов. "Нэркэс" (12+).**

## 19 АВГУСТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

04.30 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
06.35 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35, 16.10 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Улыбка пересмешника". Драматический сериал (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Улыбка пересмешника". Продолжение сериала (12+).
16.20 "Мужское/Женское" (16+).
17.55 Новости.
18.10 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
19.30 Вечерние новости.
20.00 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро. Синхронное плавание. Группы. Финал. Прямой эфир.
21.10 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
22.00 "Время".
22.30 "Я несу в ладонях свет". Концерт Тамары Гвердцители.
23.30 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
03.30 "Отбой". Драма (16+).

### РОССИЯ 1

05.55 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.
07.00 "Утро России".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". "Фотограф". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Петросян-шоу" (12+).
23.00 "Не покидай меня, любовь". Мелодрама (12+).
01.00 "Каменская". Сериал (16+).
03.00 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Борсаҡ" (0+).**
**10.30 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**10.45 "Когда ее совсем не ждешь". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Теория заговора" (12+).**
**12.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 Республиканский праздник курая, г.Октябрьский. 1-я часть (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.55 Хоккей. Кубок РБ. "Адмирал" (Владивосток) - "Металлург" (Новокузнецк).**
**16.45 "Время башкирское" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**18.55 Хоккей. Кубок РБ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Военные игры". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 Н.Карпенко-Карий. "Бесталанная" (12+).**

## 20 АВГУСТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.55 "Охотники за головами". Сериал (16+).
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.10 "Смак" (12+).
10.55 "Александр Зацепин. Мне уже не страшно..." (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Теория заговора" (16+).
14.10 "На 10 лет моложе" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Законный брак". Худ. фильм (12+).
17.00 "Кто хочет стать миллионером?"
18.00 "Творческий вечер Игоря Матвиенко".
20.00 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
23.00 "Дьявол носит Prada". Драма (16+).
01.00 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
02.45 "Экспресс фон Райана". Худ. фильм (12+).
04.40 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.

### РОССИЯ 1

07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.25 "Утренняя почта".
10.05 "Сто к одному". Телеигра.
11.00 "Вести".
11.25 "Вести-Башкортостан".
11.35 "Измайловский парк" (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Любовь нежданная нагрянет". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.05 Юбилейный концерт Игоря Николаева.
20.00 "Вести".
20.35 "Шпион". Приключения (16+).
22.35 XXXI летние Олимпийские игры в Ри-де-Жанейро.

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Тайна темной комнаты" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "7 чудес Башкортостана" (12+).**
**10.45, 17.00 "Выборы-2016" (16+).**
**11.00 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**12.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Уфа-форум" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Автограф" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.15 М.Гафури. "Красная звезда" (12+).**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**21.15 "Полезные новости" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30, 02.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Киберспорт" (16+).**
**01.45 "Следующий уровень" (12+).**

## 21 АВГУСТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.40 Новости.
06.50 "Охотники за головами". Сериал (16+).
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.10 "Непутевые заметки".
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Валдис Пельш. Путешествие к центру Земли".
13.20 "Роберт Рождественский. "Желаю Вам..."
15.10 "Здравствуй и прощай". Худ. фильм.
17.00 "Голосящий КиВиН". Музыкальный фестиваль (16+).
19.30 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро. Художественная гимнастика. Групповое многоборье. Финал.
21.00 "Время".
21.30 "Аффтар жжот" (16+).
22.30 "Восстание планеты обезьян". Приключения (16+).
00.30 "Би-2". Концерт.
02.05 "Виталий Смирнов. Властелин колец" (12+).
03.00 "Россия от края до края" (12+).
04.00 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро. Церемония закрытия. Прямой эфир.

### РОССИЯ 1

07.15 "Вся Россия".
07.30 "сам себе режиссер".
08.20, 03.15 "Смехопанорама".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
14.00 "Вести".
14.20 "Любовь и Роман". Худ. фильм (12+).
16.10 "Все вернется". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести".
21.100 "Отогрей мое сердце". Мелодрама (12+).
23.10 "45 секунд". Мелодрама (12+).
01.15 "Тихий омут". Триллер (12+).
03.45 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Лев Макс" (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай" (12+).**
**09.30 "Будьте как дома" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45, 17.00 "Выборы-2016" (16+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Учим башкирский язык" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Автограф" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.15 "Сәләм, Республика!" Специальный выпуск (12+).**
**20.15 "Дневник мамы первоклассника". Худ. фильм (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Красная кнопка" (16+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.30 "Глаза дракона". Худ. фильм (18+).**
**02.15 М.Горький. "Дачники" (12+).**

*ИҒЛАНДАР*

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия - интернатына** тулы эш көнөнә ике аҙналыҡ һынау шарты менән юғары педагогик белемле, юғары категориялы, эш тәжрибәһе биш йылдан да кәм булмаған **информатика, урыҫ теле, биология, тарих уҡытыусылары** талап ителә. Бәйләнеш өсөн телефон: **+7 (347) 244-70-38; 8-903-356-09-45**, резюмеларҙы **brgi1@mail.ru** электрон адресы буйынса ебәреү һорала.

* * *

"Киске Өфө" гәзите редакцияһына Өфөнө һәм республиканы яҡшы белгән **тәжрибәле водитель** талап ителә. **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса шылтыратырға.

*✓ Бөгөнгө көнгә суд приставтары республиканың 33 мең кешеһенә сит илгә сығыуҙы тыйҙы, уларҙың 5 меңдән ашыуының алимент буйынса бурысы бар. Һөҙөмтәлә, уларҙың мең ярымы 140 млн һум булған бурысты ҡайтарҙы.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БЫЛ БЕЛЕМ УСАҒЫ КЕМДЕҢ ИСЕМЕН ЙӨРӨТӘ?




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**29-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Урағына. Урынд+ыҡ. Ураҙала. Арал. Зәхмәт. Юрғалыға. Ҡуян. Оло. Ваҡыты. Старт. Ивний. Иҫәнов. Әсәләш. Хәмзин. Тама. Райх. Әхәт. Әләм. Дейл. Ефет.
**Вертикаль буйынса:** Юнысбаев. Арғымаҡтай. Тарих. Ултыра. Әҙәмде. Инә. Абушахманов. Иртәле. Амиго. Лена. Абдразаҡов. Ишмөхәмәт. Ҡиәмәт. Манты. Татлы. Вафа.

*ҺОРАУ-ЯУАП*

**Һорауға Суд приставтары Федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы етәксеһе БАЙҒУСҠАРОВ Зариф Закир улы яуап бирә.**



# ЯЛЫҢДЫ АЛДАН ХӘСТӘРЛӘ

**"Ғаиләбеҙ менән сит илдә ял итергә уйлайбыҙ. Иремдең Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһы һалған штрафтары бар. Уны ил сиген үткәндә кире бормаҫтармы? Бындай хәл булмаһын өсөн нимә эшләргә?**

**Миләүшә, Өфө ҡалаһы".**

- Рәсәй Федерацияһы сиген сыҡҡан саҡта бындай сикләү сараһы бурысы булған кеше үҙ теләге менән суд ҡарары талаптарын билдәләнгән ваҡытында үтәмәгәндә ҡулланыла. Был осраҡта бурыс күләме 10 мең һумдан күберәк булырға тейеш. Әйткәндәй, бөгөнгө көнгә суд приставтары республиканың 33 мең кешеһенә сит илгә сығыуҙы тыйҙы, уларҙың 5 меңдән ашыуының алимент буйынса бурысы бар. Һөҙөмтәлә, уларҙың мең ярымы дөйөм суммаһы 140 млн һум булған бурысты ҡайтарҙы. Сумманың өстән бер өлөшө бала бағыу буйынса бурыс, уны 800 вайымһыҙ ата-әсә түләгән.

Был сараның һөҙөмтәле булыуы тураһында миҫал да килтерә алам. Бер ир-егет апрелдә үк 800 мең һум бурысын ҡапларға тейеш ине. Ваҡытында түләмәүе һөҙөмтәһендә тағы ла 60 мең һум төрлө башҡарыу йыйылмалары өҫтәлде. Сит илгә сығыр алдынан ғына ул бурысын түләү буйынса суд ҡарарын үтәне. Шуға ла үҙегеҙҙе, ғаилә ағзаларын Суд приставтары Федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығының сайтында мәғлүмәттәр банкынан ҡарай алаһығыҙ. Ул "Ҡарарҙарҙы үтәтеү производствоһының мәғлүмәт банкы" ("Банк данных исполнительных производств") тип атала. Исемлектә булһағыҙ, тиҙ генә бурыстарығыҙҙы түләй һалығыҙ. Бурысты ошо уҡ сайтта йәки банктар аша түләргә була. Артабан суд приставына был турала әйтергә кәрәк булыр. Әгәр ҙә ситкә сығыу буйынса сикләү һалынған булһа, ул 7-10 көн эсендә алынасаҡ. Түләү тураһындағы квитанцияны сик буйында күрһәтеү файҙа бирмәйәсәк, сик һаҡсылары суд приставтары һалған сикләүҙәрҙе үҙгәртә алмай.

Аэропорттарҙа бурысты түләү мөмкинлеге лә ойошторолған. Тик барыбер ҙә процедура ярайһы ғына ваҡытты ала. Сөнки ул биш этапты үтә: тәүҙә бурысты банкка түләйһең, банк уны түләүҙәрҙең мәғлүмәти системаһына индерә, мәғлүмәт приставҡа килеп етә, был мәғлүмәттәрҙе - сик буйы хеҙмәтенә, сикләүҙе алыу тураһындағы мәғлүмәтте үткәреү пунктына ебәрергә. Йәғни, граждан үҙенең рейсына һуңлауы ла ихтимал.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Август (Зөлкағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (12) дүшәмбе | 4:24 | 5:54 | 13:30 | 19:16 | 20:46 | 22:16 |
| 16 (13) шишәмбе | 4:25 | 5:55 | 13:30 | 19:13 | 20:43 | 22:13 |
| 17 (14) шаршамбы | 4:27 | 5:57 | 13:30 | 19:11 | 20:41 | 22:11 |
| 18 (15) кесе йома | 4:29 | 5:59 | 13:30 | 19:09 | 20:39 | 22:09 |
| 19 (16) йома | 4:31 | 6:01 | 13:30 | 19:07 | 20:37 | 22:07 |
| 20 (17) шәмбе | 4:33 | 6:03 | 13:30 | 19:04 | 20:34 | 22:04 |
| 21 (18) йәкшәмбе | 4:35 | 6:05 | 13:30 | 19:02 | 20:32 | 22:02 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

# ОҘОН, ТӘПӘШ...

**Һинең буйың нисә, тигән һорауға тиҙ генә яуап бирергә ашыҡма. Буйҙы билдәләү ауыр ғына эш, бының өсөн һинең ҡайҙа һәм ниндәй ваҡытта үлсәнеүең дә роль уйнаясаҡ.**
**Ә һин беләһеңме:**



- көн аҙағына һин 2,5-3 сантиметрға тәпәшерәк күренәһең. Көнө буйы умыртҡа һөйәктәре (ә улар 33) араһындағы шыйыҡлыҡ менән тулы дискылар ерҙең тартыу көсөнә һәм кәүҙәнең вертикаль торошона бәйле әкренләп ҡыҫыла;

- ятҡан саҡта оҙонораҡ булаһың. Сәбәбе - шулай уҡ ерҙең тартыу көсө һәм дискылар;

- йәш үҙгәреү менән кешенең буйы үҙгәрмәй. Олоғая килә һин бары 1 сантиметрға ғына сүгәсәкһең. Ололарҙы йәштәр менән сағыштырғанда, йыш ҡына ҡатын-ҡыҙҙың уртаса буйы һәр быуын һайын оҙая бара. Беҙҙең өләсәйҙәр әле беҙҙән бәләкәйерәк, сөнки улар йәш сағында ла беҙгә ҡарағанда тәпәшерәк булған;

- һинең буйың - ата-әсәндең уртаса арифметик буйы. Әгәр ҙә әсәйең һәм атайың уртаса буйлы икән, һинең буйың оҙон буласаҡ. Оҙон буйлы ир-ат менән бәләкәй ҡатын-ҡыҙҙың балалары, ғәҙәттә, уртаса буйлы була.

*✔ Беҙҙең коллективтар тамашаһы йөрәгенә асҡыс тапҡан, уларҙы сәхнәнән оҙаҡ сығармай тотоп, аяғүрә алҡышлағандар, "Башҡортостан! Башҡортостан!" тип ҡыҫҡырғандар. Хатта алып барыусы ла башҡортса бер нисә һүҙ әйткән.*



МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# ДОНЪЯЛАРҘЫ АРБАР МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ

**Мексикала үткән "Бөтә донъя фольклориадаһы-2016" сараһында Башҡортостаныбыҙҙан Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле менән "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө ҡатнашыуы тураһында хәбәр иткәйнек инде.**



Журналист Гәүһәр Батталова хәбәр итеүенсә, Башҡортостан артистарының тәүге концерты ҡаланың тарихи үҙәге - Бисентанарио исемендәге паркта үткән. "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө башҡарыуында ҡурай моңо, шулай уҡ Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле башҡарыуындағы "Тархандар", "Ете ҡыҙ" бейеүҙәре хис-тойғоға бай мексикандарҙы һәм күп һанлы туристарҙы битараф ҡалдырмаған. Һәр хәлдә, беҙҙең коллективтар тамашаһы йөрәгенә асҡыс тапҡан, уларҙы сәхнәнән оҙаҡ сығармай тотоп, аяғүрә алҡышлағандар, "Башҡортостан! Башҡортостан!" тип ҡыҫҡырғандар. Хатта хисләнеп киткән алып барыусы ла башҡортса бер нисә һүҙ әйткән. Был кисте алыҫ Башҡортостан мексикандар өсөн бик яҡын һәм туғандаш төбәккә әүерелгән.

Мексиканың Сакатекас ҡалаһында Башҡортостандың рәсми делегацияһының Халыҡ-ара сәнғәт һәм фольклор фестивалдәрен ойоштороу советы етәкселеге менән осрашыуы булып үтте, тип хәбәр итә Гәүһәр Батталова. Рәсми делегация етәксеһе, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сағитов донъя кимәлендәге форумға саҡырғандары өсөн Халыҡ-ара сәнғәт һәм фольклор фестивалдәрен ойоштороу советы етәкселәренә рәхмәт белдергән. Өфөлә 2020 йылда үтәсәк Бөтә донъя фольклориадаһын юғары кимәлдә үткәреү өсөн республика Мәҙәниәт министрлығы вәкилдәре, илдең Халыҡ-ара сәнғәт һәм фольклор фестивалдәрен ойоштороу советы ағзалары ингән ойоштороу комитеты булдырыла, тип хәбәр иткән Салауат Тәлгәт улы.

Һөйләшеүҙәр барышында рәсми документҡа - 2020 йылда Өфөлә Бөтә донъя фольклориадаһын үткәреү тураһындағы ос яҡлы килешеүгә ҡул ҡуйыу тураһында килешелгән. Осрашыу 2016 йылдың октябрендә Италияла уҙасаҡ. Яҡтар билдәләүенсә, бөгөн мәҙәниәт - төрлө илдәрҙе берләштергән берҙән-бер тармаҡ ул.

Осрашыуҙа Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, республика Хөкүмәте министры Руслан Мирсаяпов һәм Халыҡ-ара сәнғәт һәм фольклор фестивалдәрен ойоштороу советы президенты, Фольклориада комитеты рәйесе Уго Ифран ҡатнашҡан.

7 августа Сакатекас ҡалаһының тарихи үҙәгендә Бөтә донъя фольклориадаһын ябыу тантанаһы булған һәм Башҡортостанға форумдың флагы тапшырылған. Фольклориада тамамланғас, башҡорт артистары мәҙәни форумдың икенсе өлөшөндә - Веракрус штатында Mexico Festival CIOFF исемле сарала ҡатнаша. Башҡа ҡатнашыусылар Мексиканың 15 штатында сығыш яһай. Mexico Festival 14 августа Мексика Ҡушма Штаттарының баш ҡалаһында ҙур гала-концерт менән тамамлана.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӨКӨШӘ ТОРҒАН КӘЗӘГӘ...

## Хоҙай мөгөҙ бирмәгән

Ағыу яһаған ағыуҙан үлер, һөңгө яһаған һөңгөнән үлер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йыш ҡына кешеләр көләү объектына әйләнермен тип ҡурҡып, изгелек эшләүҙән тыйыла.

**(Сара Бернар).**

Гонаһтарҙың ҡолағәһе оҙон.

**(Ирланд мәҡәле).**

Данға ярһып ынтылыуҙан да, ҡурҡып тайпылыуҙан да һаҡлан.

**(Аристотель).**

Фәҡирлек ҡурҡыныс түгел ул. Фәҡирлектең яманлығы шунда: уны башҡалар күҙенән йәшереп булмай.

**(Джером).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше бик ҡаты ауырып китә һәм түшәгенән дә тора алмаҫ хәлгә килә. Ул үҙен аяуһыҙ яҙмыш алдында көсһөҙ бер йән әйәһе итеп хис итә башлай. Хәл белешергә килгән бик күп һанлы туғандары, таныштары үҙҙәренең йәлләүе, яҙмышты әрләүе менән уның был тойғоһон тағы ла тәрәнәйтә генә. Бары тик ҡатыны ғына өндәшмәҫ һәм сабыр булып ҡала. Ул ирен йәлләмәй, ә хәленә инә, хәстәрләй, уның күңелен күтәрергә тырыша. Кистәрен усаҡ яғып, иренә аҙағы бәхетле тамамланған ваҡиғалар тураһында һөйләй. Үҙе лә ире алдында матур булырға, ирендә йәшәргә һәм яратырға көс тыуҙырырға тырыша. Тик яңғыҙы ҡалған ваҡыттарҙа ғына ул башҡалар ишетмәһен өсөн башын түшәгенән сығарып, йәшертен генә күҙ йәштәрен түгә. Ә уның күҙ йәштәре тамған урында иҫ киткес матур ағас үҫеп сыға.**

**Бына бер ваҡыт улар йәшәгән ҡалаға үҙенең белеме һәм аҡылы менән танылған бер табип килә. Унан әлеге ауырыу ирҙе ҡарауҙы үтенәләр. Табип ауырыуҙы ҡарай һәм: "Һин һауығаһың һәм аяҡҡа баҫаһың, тик йәлләү шишмәһенән һыу эсеүеңде туҡтат һәм өй алдында үҫкән ағастың емешен аша", - ти. Ауырыуҙың ҡатыны бөтөн туғандарын, таныштарын өйҙән ҡыуып сығара. Ул иренә тәҙрә төбөндә үҫкән ағастың емешен килтереп бирә. Емеште ашағас, ауырыу ир тәненең яҙылып киткәнен тоя һәм аяғына баҫа.**

**Китер алдынан табип ҡатынға баяғы ағастан тағы бер емеш килтереүен үтенә. Ул был емештең орлоҡтарын сөкөп ала һәм уны бөтөн донъяға таратасағын әйтә. Кешеләр был емеште ашап, ысынды ялғандан, ихласлыҡты икейөҙлөлөктән, йәлләүҙе хәлгә кереүҙән айырырға өйрәнергә тейеш, ти ул".**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылған уҡыусыларыбыҙҙың тәҡдимдәрен һәр һанда ҡурһәтә киләбеҙ. Бөтәһе лә уҡырға тейешле китаптар исемлеге йылап үҫә бара. Әлегә ул бына ниндәй:**

**1. "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы**
**2. М. Аҡмулланың шиғырҙар йыйынтығы**
**3. Ҡол Ғәли "Йософ ҡиссаһы"**
**4. Ризаитдин Фәхретдин "Нәсихәттәр"**
**5. Ғайса Хөсәйенов "Тормош" һәм "Донъя" парсалар китаптары**
**6. Шәйехзада Бабич, "Ғазазил" поэмаһы, шиғырҙар**
**7. Зәйнәб Биишева "Кәмһетелгәндәр" трилогияһы**
**8. Һәҙиә Дәүләтшина "Айбикә" повесы**
**9. Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"**

**Киләһе фекерҙе яҙыусы Рәсүл Байгилдиндан яҙып алдыҡ.**

- Үткән һандарҙың береһендә Һәҙиә Дәүләтшинаның "Айбикә" повесын "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһының исемлегенә индерергә тәҡдим иткәйнеләр. Әҙибәнең башҡорт әҙәбиәтендә классик әҫәр һаналған "Ырғыҙ" романын да был исемлектән төшөрөп ҡалдырмаҫҡа кәрәк. Был романда 1902-1922 йылдарҙағы тарихи ваҡиғалар, төрлө ҡатлам башҡорт кешеләренең көнкүреше, йәшәйеше тасуирлана. Әҫәр тарихи әһәмиәтенән тыш, һүҙ байлығы, халыҡсанлығы менән дә айырылып тора. "Ырғыҙ" романының башҡортса китабын да, рус теленә тәржемәһен дә ошо көндәрҙә яңынан уҡып сыҡтым. Айбулат Гөлйөҙөмдө урлап, кәләш итеп алыуы тасуирланған өҙөк буйынса хатта айырым фильм төшөрөрлөк! Шуға күрә, әҫәрҙең ошо юлдарының күсермәһен алып, Санкт-Петербург ҡалаһында кино төшөрөү өлкәһендә эшләгән кесе улыма ебәрҙем әле. Берәй режиссерға тәҡдим итһән, бәлки, ҡыҙыҡһыныр, тим. Киләсәктә был күркәм әҫәр буйынса үҙебеҙҙең йәш режиссерҙар ҙа фильм төшөрөр, моғайын. Уға тиклем, тормош ауырлыҡтарына бирешмәй, ошо бөйөк әҫәрҙе ижад итергә үҙендә көс тапҡан Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ"ын һәр кем үҙе уҡып, белергә тейеш.

**Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына һеҙ ҙә ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-иңдәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 12 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 4417
Заказ - 1439/08